ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 апрель (алағарай) 2021
№ 15 (953)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иркен

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Заман йәштәренең...** яңы ҡылыҡтары



3

**Ир-атҡа юл бирәйек!**



8

**Ете егет бергә килгән...**



9

**Изге Рамаҙан башлана**



13

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм йәмғәт! Быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы аҙналыҡ "Киске Өфө" гәзитенә 5 апрелдән 15-нә тиклем ташламалы - 619 һум 08 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Әйҙәгеҙ, "Киске Өфө"гә тоғро ҡалып, ошо осорҙа дәррәү генә яҙылып, уның дуҫтарын, уҡыусыларын арттырыуға ла булышлыҡ итәйек.***

***Мөхәрририәт.***

*КӨНАУАЗ*

**Бына ун йылдан ашыу инде Башҡортостанда "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы уңышлы эшләп килә. Тәү ҡарамаҡҡа, дөрөҫөрәге, уйһыҙҙарға ғына улар йырлап-бейеп йөрөгән кеүек тойолдо башта. Төптән уйлап ҡараһаң, улар бик ҙур эш алып бара. Халҡыбыҙҙың йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, милли аш-һыуыбыҙҙы, матди ҡиммәттәребеҙҙе һәм ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас шөғөлдәрҙе, кәсептәрҙе тергеҙеүгә ең һыҙғанып тотоноп, шул эштәрҙе уңышлы атҡарып киләләр. Ә инде уларҙың һәр ерҙә милли күлдәктәрҙә, милли биҙәүестәрҙә донъя йәмләп йөрөүе үҙе бер күккә сөйәр ғәмәл.**



## ҠОРҒА ТУПЛАНА...

### көслө заттар

Ә бына ир-егеттәребеҙ һәр йәһәттән ҡалыша. Йәғни, ир-егеттәребеҙ башҡара торған бурыстарҙың аҡһауын, уларға хас шөғөл-кәсептәрҙең онотола барыуын әйтәм. Мәҫәлән, бөгөн ҡайһы берәүҙәр күпләп йылҡы үрсетеү менән маҡтана ала. Эйе, был башҡорттоң төп кәсептәренең береһе. Ләкин ата-бабаларыбыҙ йылҡыны ит өсөн генә аҫрамаған, ул уның төп таянысы, уң ҡанаты, айырылғыһыҙ юлдашы булған. Ә бының өсөн ат яуҙарҙа ла, сабышта ла ал бирмәҫ итеп өйрәтелгән, күнектерелгән. Бөгөн иһә сабыш аттары юҡ дәрәжәһендә, сөнки ир-егеттәребеҙ был шөғөлгә шулай уҡ кәртә ҡуйған. Ә инде ат еккеһенә кәрәкле арба, сана, ыңғырсаҡ, йүгән, эйәр һымаҡ әйберҙәр эшләү бөтөнләй онотолған. Ғөмүмән, һуңғы йылдарҙа малсылыҡты, йылҡысылыҡты үрсетеү тураһында күп һөйләйбеҙ. Ләкин ошо шөғөлдәр йәнәшендәге кәсеп-һөнәрҙәрҙе тергеҙеү берәүҙең дә башына инеп сыҡмай. Мәҫәлән, көтөүсе сыбыртҡыһыҙ көтөү көтә алмай. Ә бөгөн кем уны үрә белә? Ә кем оҫта итеп салғы яный, тапай? Һәнәк, көрәк, балта һаплау оҫталары ла юҡ дәрәжәһендә.

Ошолар тураһында ла һөйләшеү мәле еткәндер, тип уйлайым. Һәм РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров етәкселегендә республикала ойошторолаcаҡ "Ир-егеттәр ҡоро" ошо тәңгәлдә эште йәнләндереп ебәрер, тигән өмөттә ҡалам. Республикала беренсе тапҡыр үткәрелгән ҙур конференцияға Мәләүездән ике делегат һайланды. Шуның береһе - мин, Мәләүез башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы, икенсеһе - йәш быуынға илһөйәрлек тәрбиәһе биреү йәһәтенән етди эш алып барған "Батальон" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Йәмил Әлмөхәмәтов. Был башланғыс бик ваҡытлы булды. Форумда "Ир-егеттәр ҡоро"нон эш йүнәлештәре, бурыстар, шулай уҡ ир-егеттен, айырыуса атай кешенең статусын күтәреү буйынса ла маҡсаттар билдәләнер, тип өмөтләнәм.

**Фәнис БИКТАШЕВ.**
**Мәләүез районы.**

**(Теманың дауамын 8-се биттә уҡығыҙ).**

*МӨҺИМ ВАҠИҒАЛАР*

## ЮЛДАР ТОТАШТЫ!



**Мартта Башҡортостандың иң ҙур инфраструктура объектында - Өфөгә Көнсығыштан инеү юлы төҙөлөшөндә мөһим ваҡиға булды: автоюл тоннеленең көнбайыш һәм көнсығыш хәрәкәте йүнәлеше бергә тоташты. Шул уңайҙан БР Башлығы Радий Хәбиров менән Федераль юл агентлығы етәксеһе вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы (Росавтодор) Роман Новиков төҙөлөш майҙансығындағы эштәр менән танышты.**

Был объектта эштәр 1992 йылда башлана һәм уны 2023 йылда файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла. Әммә тоннель төҙөлөшө 2007 йылда туҡтатылып, 2017 йылда ҡабаттан көн үҙәгенә сығарыла. 2019 йылда иһә унда төҙөлөш эштәре ҡабаттан тергеҙелә. Былтыр быға тиклем төҙөлгән участкаға Ҡариҙел йылғаһының ҡаршы ярынан тоннель төҙөү башланды. Техник йәһәттән тоннель - Көнсығыштан инеү юлында иң ҡатмарлы участка, шул уҡ ваҡытта үҙенсәлекле объект.

- Был проект ҡала һәм төбәктең юл селтәрен бер аҙ бушатырға ярҙам итәсәк, федераль трассаларҙы үҙ-ара бәйләп торасаҡ, - тине Роман Новиков журналистар менән осрашыуҙа. - Шул уҡ ваҡытта водителдәр ҙә ҡала аша тотҡарлыҡһыҙ үтә аласаҡ. "Хәүефһеҙ һәм сифатлы автомобиль юлдары" проектының федераль өлөшөндә Росавтодор М-5 трассаһында Көнсығыштан инеү участкаһының эргә-тирәһен реконструкциялау буйынса ла эш башланы. Шулай итеп, беҙ берҙәм транспорт комплексына эйә буласаҡбыҙ. Төҙөлөш тотороҡло финансланды. Дөйөм сумманың 19,9 миллиард һумы - федераль ярҙам, беҙ әле 5,1 миллиард һум күсерҙек, быйыл тағы ла 2,6 миллиард һум йүнәлтергә планлаштырабыҙ...

Радий Фәрит улы ла журналистар менән аралашып, был мөһим проектты тергеҙеүгә һәм эштәрҙе дауам итеүгә ниндәй саралар булышлыҡ итеүе тураһында һөйләне:

- Ике йыл, йыл ярым элек иң мөһим бурыс - төҙөлөш буйынса килешеүҙең иҡтисадын ҡайтанан ҡарау булды. Фекер алышҡандан, яңынан иҫәпләүҙәр эшләгәндән һуң булған килешеүгә өҫтәмә килешеү төҙөнөк. Һөҙөмтәлә республика бюджетына төшкән көсөргәнеште 30 миллиард һумға кәметеү мөмкин булды. Бөгөн был - иҡтисади файҙалы проект. Иң мөһиме - партнерҙарыбыҙ яҡшы, эштәр ойошҡан рәүештә һәм тәртип менән башҡарыла. Әгәр федераль бюджеттан финанслауҙа өҙөклөктәр булмаһа, 2024 йылға бынан тәүге автомобилдәр үтәсәк...

12+

✓ *Ябай әҙәмдең был хәбәрҙе сығарыусы инештәрҙе таба һәм язаға тарттыра алыуына шик бар. Махсус төркөмдәрҙе, мәғлүмәт сығарыусыларҙы асыҡлау өсөн дә белем, ваҡыт, аҡса кәрәк.*



ЕР-ҺЫУ АТАМАҺЫ

# КӨГӨШ ЙЫЛҒАҺЫ



**Ғафури районындағы рус телендә Усолка тип йөрөтөлгән йылғаның быуындан - быуынға тапшырылып килгән башҡортса үҙ исеме бар. Ул - Көгөш. Шуның өсөн башҡорт телендә яҙылған мәҡәләләрҙә уны рус теленән башҡортсаға әйләндереп, Тоҙйылға тип түгел, ә тарихи исеме менән Көгөш тип атау зарур. Быны барығыҙ ҙа белһәгеҙ ине, республикабыҙҙағы тарихи ер-һыу атамаларын үҙебеҙ үк боҙмаһаҡ ине.**

Ғафури районында һәр күпер эргәһендә был йылғаның исеме ике телдә лә яҙып ҡуйылған. Көгөш йылғаһы Һаралыға барышлай һул яҡта ятҡан Айыулы яланынан башлана. Ул был яланда табаҡ ҙурлыҡ ҡына булып ер өҫтөнә ҡалҡа ла, үҙенә юл ярып, ағып китә. Ул үҙ юлында элекке Үҙбәйҙәк (60-сы йылдарҙа урынынан күсерелеп юҡҡа сыҡҡан ауыл) эргәһенән ағып үтә. Тәүҙә бәләкәй генә итеп юл ярған ошо йылғаға эреле-ваҡлы күп кенә шишмәләр ҡушылғас, киңәйә башлай. Ташлы ауылы эргәһендә инде ул апаруҡ ҙур ғына йылғаға әйләнә. Һыуы таҙа, тоҙло булмаған, эреле-ваҡлы балыҡтар йөҙгән ҡәҙимге йылға ул Көгөш. Курорт ауылына етер алдынан ул эреле-ваҡлы тоҙло минераль шишмәләр менән тулылана. Бына был тирәлә инде Көгөш йылғаһының көмөш кеүек таҙа, сөсө һыуы тоҙло тәм ала. Шуғалыр ҙа инде был йылғаны урыҫ телендә Усолка тип йөрөтә башлайҙар.

Красноусол ҡасабаһына етмәҫтән алда Көгөшкә Бәләкәй Төлкәҫ һәм Оло Төлкәҫ йылғалары ҡушылып, ул тәрәнәйә һәм киңәйә. Элек быяла заводы мейесенә ягыр өсөн Көгөш йылғаһы буйлап ағас ағыҙғандар һәм богорҙар менән тартып сығарып, утын әҙерләгәндәр. Завод тирәһендә уның быуаһы ла булған. Көгөш йылғаһы Красноусол, шунан Заречный (Заготскот) ауылы эргәһенән ағып үтеп, Родина - Ватан ауылы яғына юл тота. Заречный ауылы янындағы шишмә лә Көгөшкә ҡушыла. Ә Ватан ауылы янында иһә Көгөшкә әллә нисә бәләкәй шишмәнең һыуынан тулыланған Бирешле исемле бәләкәйерәк йылға барып ҡушыла. Бына шулай күп кенә ҡушылдыҡтарҙан ҙурайған һәм тәрәнәйгән Көгөш - Усолка йылғаһы Табын-Табынск ауылына барып етә. Бында инде уны көслө ағымлы аҡ йылға - Ағиҙел көтөп тора. Көгөш үҙенең шифалы һыуҙарын Ағиҙелгә, Ағиҙел - Камаға, Кама - Оло Иҙел - Волгаға, Оло Иҙел Каспий диңгеҙенә ҡоя.

Көгөш йылғаһының һыуы артыҡ йылы ла, һыуыҡ та түгел, уртаса йылылыҡта. Йәй көнө йылға буйы һыу инеүселәр менән тулы була. Төбөндә ваҡ ҡом булһа ла, эре таштар юҡ. Ярының бейек ерҙәре лә бар, күбенсә һөҙәк, йәм-йәшел үләнле һәм туғайлы уның ярҙары. Көгөш йылғаһында ажау, суртан, шамбы, күкәс (күкйен), ҡоморой (бөрөш), сабаҡ һәм башҡа балыҡтар бар. Әйтер һүҙем шул. Ғафури районы халҡы исеменән башҡорт телендә яҙылған мәҡәләләрҙә һәм аҫәрҙәрҙә беҙҙең йылғабыҙҙың дөрөҫ исемен - Көгөш йылғаһы атамаһын ҡулланыуығыҙҙы һорайым. Һыуынан тоҙ тәме килеүе уның үҙенсәлеге генә, ә йылғаның атамаһы түгел. Шулай уҡ Көгөш һүҙен Башҡорт теленең академик һүҙлегенә лә индерерҙәр, тип өмөт итәбеҙ, көтәбеҙ.

**Фәүзиә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Дәүләт Думаһы депутаттары интернетта яла яҡҡан өсөн ике йылға тиклем ирektән мәхрүм итеү сараһын өс ултырышта ла яҡлап сыҡты. Шулай итеп, дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр менән яла яҡҡан өсөн 1 миллионға тиклем штраф йәки 2 йылға тиклем хөкөм ителеү язаһы ҡарала. Закон проекты тағы ла түбәндәге тәртиптәрҙе лә индерә:**
**- вазифаһын ҡулланып ялған хәбәр таратыусыға 2 миллион һум штраф йәки 3 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү;**
**- кемделер йәмғиәткә ҡурҡыныс янаусы ауырыу менән сирле тигән ялған хәбәр таратыусыға 3 миллион һум штраф йәки 4 йылға тиклем хөкөм;**
**- кемделер енси характерҙағы енәйәттә гәйепләгән ялған мәғлүмәттәр өсөн 5 миллионға тиклемгә штраф йәки 5 йылға тиклем хөкөм итеү.**

# ЯЛА ЯҠҠАН ӨСӨН ЯЗА



Был ҡарар менән Дәүләт Думаһы депутаты, Ғаилә, ҡатын-ҡыҙ һәм балалар комитеты рәйесе урынбаҫары Оксана Пушкина риза түгел. Һәм, моғайын, риза булмағандар бер ул ғына ла түгелдер. Сөнки, ысынлап та, беҙҙең йәмғиәттә интернетта яла яғыуға, ғәйбәт һөйләүгә һәм һөйләүселәргә артыҡ ҙур иғтибар бирелә. Ниндәйҙер икенсе, мөһимерәк булған һәм етди иғтибар талап иткән йүнәлештәргә бындай уҡ язалар юҡ. Мәҫәлән, енси бәйләнешкә инергә мәжбүр иткән өсөн енәйәтсе бер йылға тиклем генә хөкөм ителә. Ун алты йәшкә тиклемгә үҫмер (бала) менән енси бәйләнеш дүрт йыллыҡ төрмә менән янай. Шундай уҡ балиғ булмағанға ҡарата әҙәпһеҙ енси мөнәсәбәт тә өс йыллыҡ язаға тарттырыла. Ә бында интернетта яла яғыуы 2-4 йыллыҡ хөкөмгә һәм 1-3-5 миллион штрафҡа дусар ителә. Артыҡ ҡаты түгелме? Һәм бөтөн был эштәр ябай халыҡҡа кәрәкме? Ябай халыҡ өсөн был закондан зыян да, файҙа ла юҡ һымаҡ. Ысынында, зыяны булырға мөмкин, йәғни интернет донъяһын аңлап етмәүе һәм уны артыҡ етдигә ҡабул итмәүе арҡаһында кеше ошо тәртиптәр ҡармағына ҡабыуы ла бар. Аңһыҙлыҡ йәки уйһыҙ эштәр өсөн төрмәгә эләгергә лә, ҙур түләүгә ҡапланып ҡалырға ла мөмкин.

Барыбер ҙә был закон йондоҙҙар, етәкселәр, байҙар һәм шуның кеүек билдәле кешеләр мәнфәғәтендә яһалған кеүек. Үҙәк каналдарҙан барған күп тапшырыуҙар бөгөн "Бер йондоҙҙо былай тип ҡаралағандар", "Бер олигархҡа шундай яла яҡҡандар" йәки "Интернеттағы йәшерен фотоларын, хәбәрләшеүҙәрен, видеоларын киң даирәгә сығарып мыҫҡыл иткәндәр" тигән "разборкалар"ға ҡайтып ҡала. Ошондай күренештәр арҡаһында уларҙың рейтингтары төшә, дандарына зыян килә һәм башҡалар. Әлбиттә, уларҙың шәхси һәм башҡа хоҡуҡтары ла боҙола, әммә был тәңгәлдә башҡа төрлө хоҡуҡ һаҡлау закондары бар. Һәм бынан ары уларҙы әлеге яңы закон да һаҡлаясаҡ.

Ябай кешене миҫалға алайыҡ. Уның хаҡында интернетта ялған мәғлүмәттәр сыҡты, ти. Ул ни эшләй ала? Ябай әҙәмдең был хәбәрҙе сығарыусы инештәрҙе таба һәм язаға тарттыра алыуына шик бар. Махсус төркөмдәрҙе, мәғлүмәт сығарыусыларҙы асыҡлау өсөн дә белем, ваҡыт, аҡса кәрәк. Асыҡлаған хәлдә лә, иҫбатлау, судлашыу һәм язаға тарттырыуға алып барып еткереү өсөн әллә күпме сығымдар талап ителәсәк. Бөгөн ауыл халҡы кәрәкле юридик эштәрен дә эшләй алмай ултыра. Йәғни, яңы закон менән ябай халыҡ икеһе ике параллель донъяла һымаҡ...

Ялған менән дөрөҫлөктө интернет аша асыҡлауға килгәндә, бер мәсәлде һөйләп китергә була. Бер әҙәм барыһына ла туп-тура йөҙҙәренә ҡарап, тик дөрөҫтө генә әйткән. Кемдәргәлер уның хәбәренән һуң ҡыйын булған, кемдәрҙеңдер йөрәге туҡтаған, кемдәрелер һуғышҡа ташланған, икенселәр унан ҡурҡып боҫҡан. Һәр хәлдә, тура әйтелгән хәҡиҡәт берәүҙе лә тыныслыҡта ҡалдырмаған. Уның артынан бола, яу, талаш-тартыш, күҙ йәштәре ҡалған. Шул ваҡыт был кеше уйлана башлаған: дөрөҫлөк бит шундай бөйөк, таҙа, саф һәм матур күренеш, ни өсөн ул шундай насар әҙәмтәләргә килтерә?

Кеше Дөрөҫлөктөң үҙен эҙләп табып, уға шул һорауҙы бирергә булған. Ай эҙләгән, йыл эҙләгән һәм... тапҡан. Ҡараңғы мәмерйәнән уның ҡаршыһына ҡурҡыныс, ҡарт, ҡоро һөлдәгә ҡалған Дөрөҫлөк килеп сыҡҡан. Эҙләп килеүсе бик аптыраған. Ҡарт менән бер аҙ ваҡыт әңгәмәләшеп ултырып, уның эргәһенән китер алдынан шулай тип һораған:

- Дөрөҫлөк, һинең хаҡта халыҡҡа нимә һөйләйем?

Ә Дөрөҫлөк былай тип яуаплаған:

- Нимә һөйләһәң дә һөйлә, тик мине матур, саф, бөйөк һәм йәш ине, тип әйт, - тигән.

Ошонан сығып, һәр кем үҙе фекер төйнәһен.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓9 апрелгә мәғлүмәттәр буйынса, тәүлек эсендә Башҡортостанда COVID-19 йоҡтороуҙың 103 осрағы асыҡланған. Сирлеләрҙең дөйөм һаны - 33 294. Пандемия башланғандан алып 389-ы коронавирустан үлгән. Уҙған тәүлектә ике кешенең ғүмере өҙөлгән. Эпидемия осоронда 29191 кешенең һауығыуы теркәлгән. Башҡортостанда 108 534 кеше яңы коронавирус инфекцияһына ҡаршы препарат менән вакцинацияның ике этабын да үткән.

✓Өфөгә эш сәфәре менән Рәсәйҙең спорт министры урынбаҫары Одес Байсолтанов килде. Ул республиканың спорт объекттарын ҡарап сыҡты һәм уларҙы "көҙәтле инфраструктура" тип атаны. Башҡортостан Башлығы федераль ведомство вәкиле менән осрашты һәм республиканың спорт ҡаҙаныштары менән ғорурланыуын билдәләне.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров указына ярашлы, 65 йәштән өлкәндәр, шулай уҡ хроник сирҙәре булғандар өсөн мотлаҡ изоляция режимы 2021 йылдың 14 апрелenә тиклем һаҡлана. Шулай уҡ республикала йәшәүселәргә медицина хеҙмәткәре тәҡдиме буйынса коронавирусҡа ҡаршы прививка яһатырға кәңәш бирәләр. Эш биреүселәргә медицина ойошмалары менән үҙ-ара килешеп, хеҙмәткәрҙәргә коронавирусҡа ҡаршы вакцинация үткәреү мөмкинлеген ҡарарға тәҡдим ителә.

✓Ағиҙел, Бәләбәй, Дүртөйлө, Салауат, Сибай, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Өфө, Яңауыл Рәсәй Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының уңайлы ҡала мөхите булдырылған ҡалалар исемлегенә инде. Башҡортостан уңайлы ҡалалар өлөшө буйынса Рәсәйҙә - ун етенсе, Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында өсөнсө урынды алды. Федераль проект талаптарына ярашлы, 2024 йылға Рәсәйҙә ҡалаларҙың 60 процентында уңайлы мөхит булдырылырға тейеш.

✓"Йәшел Башҡортостан" ағас ултыртыу акцияһының беренсе этабы 24 апрелдә - "Хәтер баҡсаһы" халыҡ-ара проекты сиктәрендә ойошторола. Был маҡсатта республиканың ҡала һәм райондарында 670 биләмә билдәләнгән. Бөгөнгә 35 меңгә яҡын кеше экологик сараларҙа ҡатнашырға теләк белдергән. Республиканың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов һүҙҙәренсә, "Йәшел Башҡортостан" һәм "Хәтер баҡсаһы" акциялары барышында республикала 250 гектарҙан ашыу майҙанда ағас ултыртыла.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЗАМАН ЙӘШТӘРЕНЕҢ... яңы ҡылыҡтары



**Атай-олатайҙарыбыҙ йөҙәрләгән йыл дауамында беҙҙең энергетик, тәбиғәт һәм кеше ресурстарын тартып алырға ынтылған дошманға ҡаршы көрәшкән. Һуғышта кемдең ҡоралы яҡшы һәм уның менән оҫта эш иткәндәр генә түгел, ә кем көслө рухлы булып тәрбиәләнгән - шулар еңгән.**

Атай-олатайҙар кем дошман һәм уны нисек еңергә икәнен һәр ваҡыт яҡшы белгән. Әммә әлеге ваҡытта бөтөнләй икенсе төрлө һуғыш бара - мәғлүмәт һуғышы. Ул хәүефлерәк тә, ҡурҡынысыраҡ та. Мәғлүмәт һуғышы, әлбиттә, тормошто аңлап етмәгәндәргә йүнәлтелгән. Унда кемдең мәғлүмәте көүәтлерәк һәм уның менән кем оҫта эш итә - шул еңә. Быны быйыл ғинуар аҙағында йәштәребеҙҙең урамға митингыларға сығыу факты ла иҫбатланы. Йәш быуындың формалаштырыуҙағы етди хәүефтәрҙең береһе - уларҙы мәғлүмәттәрҙе аңлы ҡабул итергә өйрәтмәү. Элекке мәғариф министры Фурсенко: "Совет мәктәбенең кәмселеге шунда: ул Ижадсы тәрбиәләне, ә беҙгә квалификациялы ҡулланыусы әҙерләргә кәрәк", - тигәйне. Бөгөнгө йәштәр, ысынлап та, ҡулланыусы, ләкин хәл-ваҡиғаны дөрөҫ анализлай белмәгән ҡулланыусы. Ул кем матур тышлыҡ күрһәтә, шуның артынан барасаҡ. Уйларға өйрәтелмәгән, БДИ-лаштырылған мәктәп тамамлаған үҫмерҙәр, йәштәр бөгөн ҡулланыусылар өҫтөнлөк иткән йәмғиәттә Рәсәй дәүләтселеген сираттағы тапҡыр емереүгә алып барған социаль-сәйәси ваҡиғаларҙы тыуҙырыусыларҙың клиентураһына әйләнде. Беҙгә агрессияның был төрөн бөтөрөү йәһәтенән бөгөн бик етди эшләргә кәрәк буласаҡ.

Билдәле булыуынса, телевидение йәмәғәтселек фекерен формалаштырыуға ныҡ йоғонто яһай. 2010 йылдарҙа аңға йоғонто яһау ғына түгел, ә ниндәйҙер эшкә, ҡылыҡҡа саҡырған социаль селтәрҙәр барлыҡҡа килде. Был күренештәр тәрбиәне уҡыу процесынан айырып ҡарау арҡаһында килеп сыҡты. Бала тәрбиәләү социаль селтәрҙәргә тапшырып ҡуйылды. Башта социаль селтәрҙәр йәштәр өсөн хәүефһеҙ мөхит һымаҡ ине. Эксперт педагогтарҙың, был тәңгәлдә тейешле контроль булмауы кире күренештәргә килтерәсәк, тиген иҫкәртеүе бер һөҙөмтә лә бирмәне. Социаль селтәрҙәр күптәрҙе төрлө виртуаль арауыҡҡа индереү өсөн файҙаланылды. Ә хәҙер улар ниндәйҙер саҡырыуҙар инструменты кимәленә тиклем үҫте.

Мәҫәлән, Ҡытайҙа барлыҡҡа килгән ТикТок социаль селтәре быйылғы йылдың протест акцияларында етди роль уйнаны. "2021 йылдың 23 ғинуарындағы митинг алдынан ТикТок митингыға сығырға саҡырған меңәрләгән видео менән тулды. Хоҡуҡ һаҡлаусылар формаһын һәм погондарын сисеп ырғытып, "канлы режим"дағылар сафында халыҡҡа ҡаршы башҡа бара алмаусын белдергән интернет-флешмобтар барлыҡҡа килде", - ти Илья Титов "Завтра" гәзитендә баҫылған сығышында.

Бындай социаль селтәрҙәр саҡырыуҙар ташлап һәм фекер формалаштырып ҡына ҡалмай, ул ҡайһы бер аңлыҙ тәртип өлгөләрен дә булдыра. Йәғни, кемдең кем икәнен, илдә нимә барғанын белмәгән йәштәрҙе сәйәсиләштереү алып барыла, бөтә төбәктәр өсөн бер төрлө лозунгыларҙы алға һөрә.

2010 йылдан Ҡытайҙа социаль селтәрҙәрҙә тәртибен контролдә тотоу өсөн йәштәргә эмоциональ яҡтан тәьҫир итеү буйынса тәжрибә үткәрә башланылар. Ул ваҡытта Гонконгтағы был митингыларға Рәсәйҙә әһәмиәт бирмәнеләр. Флешмоб ярҙамында социаль селтәрҙәр йәштәр һәм үҫмерҙәр менән идара итеүгә күсте. Ә ул йәштәрҙе билдәле "Покемон-ГО" кеүек тауарҙы күмәкләп алырға саҡырыу кеүек ябай ғына күренештән башланды. Һуңынан протест митингыларына сығыу өлгөләрен формалаштырыу буйынса ТикТок социаль селтәре барлыҡҡа килде. Ул ниндәй ҙә булһа мәғәнәһеҙ эш башҡарырға саҡырған инструмент. АҠШ-та яҡынса 100 миллионға яҡын йәштәр һәм үҫмерҙәр ТикТок USA контролендә. Был селтәрҙең Рәсәйҙәге ниндәй ваҡиғаларға этәргес биреүенә күптәр ғинуарҙа шаһит булды. Был акцияның берҙән-бер маҡсаты - митинглыға этеш-төртөш ваҡытында үҫмерҙәрҙең ғүмерҙәрен ҡыйыу. Балаларыбыҙ беҙгә һәм атай-олатайҙарыбыҙға билдәле булмаған яңы янау-хәүеф менән осрашты. Уларға кисекмәҫтән был янауға ҡаршы торорға һәм мәғлүмәт һуғышында иҫән ҡалырға өйрәтергә кәрәк.

Әммә әле булһа әхлаҡи, илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләнгән үҙ социаль селтәребеҙ, контентыбыҙ, БР Стратегик башланғыстар үҙәге ҡарамағында йәштәр араһында барған социаль процестарҙы тикшереү үҙәге юҡ. Йәш быуынға ыңғай йоғонто яһау механизмдары ла эшләнмәгән. Йәштәр сәйәсәте өсөн яуап биргән һәм лидерҙар, ирекмәндәр әҙерләгән Йәштәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ, Рәсәй мәктәп уҡыусылары хәрәкәте, Юнармия, Мәғариф министрлығы өлкәһе лә, бөтә кимәлдәге чиновниктар ҙа киләсәк быуын менән эшләргә тейеш ине. Ә бына социаль селтәрҙәр уларҙың нисек тын алыуын һәм йәшәүен, ихтыяжын яҡшыраҡ белә шул. Акцияны интернет-монополистарҙың технологик яҡтан оҫта ойоштороуы БДИ һөҙөмтәһендә фекерҙәре калейдоскоп рәүешле формалашҡан балаларыбыҙҙы ла митингыларға сығырға йөләп итте.

Икенсенән, хәҙер мәктәптәрҙә илһөйәрлек тәрбиәһе биргән дәрестәр ҙә юҡ тиерлек. Уны яңы индерә башланылар башлауға, әммә был эшкә 20 йылға һуңлап тотонолғанын да беләбеҙ. Өсөнсөнән, мәктәптәрҙә йәш быуында яуаплылыҡ һәм ҡыйыулыҡ тураһында аңлатҡан һәм тәрбиәләгән ир-егет педагогтарҙың булмауы ла бәкәлгә һуға. Педагогик коллективтарҙа кәмендә 50 процент ир-егет булырға тейеш. Был ихтыяжды Эске эштәр министрлығы, Федераль хәүефһеҙлек хеҙмәте, Янғын һағы хеҙмәтенең отставкалағы хеҙмәткәрҙәре һәм башҡалар тултыра ала.

Иң мөһиме, ғаиләләрҙең тарҡалыуын туҡтатыу кәрәк (2020 йылда республикала айырылышыусылар һаны 71 процентҡа яҡын). Ғаилә - ул халыҡты һаҡлау системаһы, дәүләт нигеҙе. Ғаилә юҡ икән, тимәк, беҙҙең балаларҙы һаҡлаған система ла юҡ. Атайҙар (айырылышҡан булһалар ҙа) балаларына көнөнә 20 минут булһа ла ваҡыт бүлергә, уларҙың проблемаһы, уҡыуы, кемдәр менән аралашыуы, ҡыҙыҡһыныуҙары тураһында белешергә, үҙенең әйткән һүҙе һәм ҡылыҡы өсөн яуаплы булырға өйрәтергә тейеш. Факттар менән һәр кемдең аңын бутарға була. Әгәр кеше ул фактын сәбәбе һәм һөҙөмтәһе бәйләнешен белһә, уны алдау мөмкин булмаясаҡ!

**Шамил БАТЫРШИН,**
**Башҡорт дәүләт университетының өлкән уҡытыусыһы.**

ИҢ МАТУР ҺҮҘ

## ЙОМАРТЛЫҠ

**Иң матур башҡорт һүҙе акцияһы башланғас, социаль селтәрҙәрҙә төрлө фекерҙәр яңғыраны. Туған телебеҙҙәге бөтә һүҙҙәр ҙә күркәм, ниндәйҙер һүҙҙе айырып күрһәтеп тә булмай, тип сығыш яһағандар ҙа булды. Икенселәр үҙҙәренең, ата-әсәһенең, ауылдаштарының лөғәтендәге һирәк ҡулланылған һүҙҙәрҙе барлай башланы.**

Ысынлап та, телебеҙ ҙә, һүҙҙәребеҙ ҙә иҫ киткес матур. Әммә дөрөҫ әйтелгәндә генә улар мәғәнәһенә тура килә һәм телмәребеҙҙең гүзәллеген күрһәтә. Бынан байтаҡ йылдар элек ҡалабыҙ уртаһында "Йомарт" тип аталған магазин асылғайны. Хәҙер иҫләмәйем дә инде унда нимә һатылғанын. Шулай ҙа уның исеме ныҡ иҫтә ҡалған. Бер көндө шулай элекке хеҙмәттәшем шылтырата.

- Тиҙ генә килеп ет, мин "Йомарт" магазины янында, - ти.

Урыҫ телле ханым баҫымды беренсе ижекгә төшөрөп әйтһә, был һүҙ "юмарт" тип яңғырай һәм ҡолаҡты ярып инә лә, тәүҙә хатта аңлашылмай тора. Бер аҙҙан һуң ғына ниндәй магазин тураһында әйткәнен аңғарҙым. Осрашҡас, әлбиттә, мин уға был һүҙҙең дөрөҫ әйтелешен төшөндөрөп бирҙем.

- Ҡайһылай матур һүҙ! Мәғәнәһе лә күркәм, - тип һоҡланды шунда танышым.

Йомарт, йомартлыҡ... Был кешенең иң яҡшы сифаттарының береһе булып һанала. Мохтаждарға ярҙам итеү - иманыбыҙҙың бер татлы емеше һымаҡ ул. Ҡылығыбыҙҙың иң гүзәл сағылышы. Динебеҙҙә лә йомартлыҡ ҙур әһәмиәткә эйә. "Йомарт кешеләрҙең хаталарына күҙ йомоғоҙ, сөнки йомарт кешенең аяғы тайһа ла, Аллаһы Тәғәлә уға йығылырға ирек бирмәҫ, Аллаһы Тәғәлә уғ бәндәгә һәр ваҡыт ярҙамсы була", - тигән хәҙистән дә йомартлыҡта көслө мәғәнә ятҡанын күрергә мөмкин.

Йомартлыҡ - ул үҙеңдәге матди ҡиммәтле әйберең менән бүлешеү генә түгел, ә белемең, ваҡытың, шулай уҡ тәжрибәң менән уртаҡлашыу. Мохтаж кешегә тейешле иғтибар биреү, уны тыңлау ҙа ошо төшөнсәгә инәләр, тип уйлайым. Сөнки белем, тәжрибә һәм ваҡыт кеше тормошондағы хаҡы булмаған иң ҡиммәтле әйберҙәр...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова Сибай концерт-театр берекмәһе коллективын яңы етәксе - Юнир Кәлимуллин менән таныштырҙы. Конкурс процедуралары тамамланғансы ул директор вазифаһын башҡара. Быға тиклем Юнир Кәлимуллин Сибай музыка мәктәбендә, "Росконцерт" берекмәһендә һәм Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығында эшләгән.

✓2020 йылда Башҡортостанда ВИЧ йоҡтороу осраҡтары кәмегән. Республиканың СПИД-үҙәге мәғлүмәттәре буйынса, уҙған йылда 1977 яңы осраҡ асыҡланған (2019 йылда - 2705, 2018-ҙә - 2782). Ләкин ВИЧ менән ауырыған йөклө ҡатын-ҡыҙҙар һаны кәмемәй. Былтыр 92 052 йөклө ҡатын-ҡыҙ ВИЧ-ҡа анализ биргән. Уларҙың 94-ендә тәүге тапҡыр ВИЧ инфекцияһы асыҡланған.

✓Башҡортостандың дүрт медицина учреждениеһында баш табиптар алмашынды. Айрат Рәхмәтуллин Өфө 18-се ҡала клиник дауаханаһының баш табибы итеп тәғәйенләнде. Жулдыбай Иржанов иһә Өфө ҡалаһы 52-се поликлиникаһының баш табибы. Бөрө үҙәк район дауаханаһының баш табибы вазифаһын Салауат Рәхмәтуллин биләй. Благовещен үҙәк район дауаханаһының баш табибы вазифаһында хәҙер Арсен Ғарипов эшләй.

✓Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы 1 апрелдән 30-на тиклем түләүле эштәр һәм хеҙмәттәр күрһәтеү өлкәһендә ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса бушлай "ҡыҙыу бәйләнеш" уҙғара. "Ҡыҙыу бәйләнеш" телефоны: 8 (347)218-09-78. Бынан тыш, судка тиклем дәғүә тәҙөгәндә ҡатмарлыҡтар килеп тыуһа, ҡулланыусылар Өфө, Цюрупа урамы, 13 адресы буйынса Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығына мөрәжәғәт итергә мөмкин.

✓Роспотребнадзор балалар ялын ойоштороуға индерелгән ҡайһы бер талаптарҙы йомшартты. Атап әйткәндә, ҡала ситендәге лагерҙарҙа балалар һанын 50 проценттан 75 процентҡа тиклем арттырырға рөхсәт ителә. Субъекттарҙың баш санитар табиптарының ыңғай ҡарарын иҫәпкә алып, балаларҙы республиканан ситтә ял иттерергә мөмкин, тип хәбәр итте Башҡортостандың Мәғариф министрлығы.

**✓ Әгәр ҙә түләү терминалы эшләмәһә, пассажир түләмәҫкә лә мөмкин. Нисек кенә булмаһын, билет бирелергә тейеш, сөнки ул пассажир менән килешеү төҙөү фактын раҫлаған документ булып тора.**



ҠЫҪҠАСА

# АТАЙҘАРҒА...

✓ **Башҡортостанда "Атай ҡаһарманлығы" республика конкурсына ғаризалар 15 апрелгә тиклем ҡабул ителә. Проектты ойоштороусы - Башҡортостан Республикаһының Йәмәғәт палатаһы.** "Атай ҡаһарманлығы" наградаһы бала тәрбиәләгән, сәләмәт тормош алып барған, ғаилә ҡиммәттәрен һәм традицияларын һаҡлау һәм тергеҙеү, йәмғиәттә әхлаҡи мөхитте яҡшыртыу өсөн шарттар булдырған, районды, республиканың иҡтисади тормошонда әүҙем ҡатнашҡан атайҙарҙы дәртләндереү һәм уларҙың хеҙмәтен таныу өсөн булдырылған. Конкурста Башҡортостанда 5 йылдан да кәм йәшәмәгән Рәсәй граждандары ҡатнаша ала. Ҡатнашыусыларға 15 апрелгә тиклем награда материалдары пакетын "Атай ҡаһарманлығы" билдәһе менән oprb2011@mail.ru электрон адресына ебәрергә кәрәк. Тулыраҡ мәғлүмәтте 8(347) 280-82-36 телефоны буйынса алырға мөмкин.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тәүге уҡыуҙа балиғ булмағандарға шыйыҡландырылған углеводород газын һатҡан өсөн штраф һалыу тураһында закон проектын ҡабул итте.** "Бында газ ҡабыҙғысы тураһында ла һүҙ бара, - тине республика парламенты спикеры Константин Толкачев. - Был документ балаларға ошондай продукция һатыуҙы тыйған законды практик ғәмәлгә ашырыуҙы тәьмин итергә тейеш". Закон проектына ярашлы, ғәмәлдәге тәртипте боҙған өсөн штраф күләме граждандарға - өс мендән дүрт меңгә, вазифалы кешеләргә - 20 мендән 25 меңгә, юридик берәмектәргә - 30 мендән 40 меңгә тиклем. Ҡабаттан боҙған өсөн штраф күбәрәк: граждандарға - дүрт мендән биш меңгәсә, вазифалы кешеләргә - 30 мендән 40 меңгәсә, юридик берәмектәргә - 50 мендән 70 меңгәсә. Документ үҫмерҙәр мөхитендә токсикомания менән көрәшеүгә йүнәлтелгән.

✓ **Статистика күрһәтеүенсә, Башҡортостанда илдең (1,505) һәм Волга буйы федераль округының (1,437) дөйөм күрһәткесе менән сағыштырғанда тыуымдың дөйөм коэффициентының күпкә юғарыраҡ кимәле һаҡлана.** "Росстаттың яҡынса мәғлүмәттәре буйынса, 2020 йылда Башҡортостан буйынса күрһәткес 15-49 йәшлек бер ҡатын-ҡыҙға 1,525 тәшкил иткән. Был 2019 йылдағы кимәлдән 0,9 процентҡа юғарыраҡ. Республика күрһәткестең үҫеш темпы буйынса Волга буйы федераль округы төбәктәре араһында Марий Элдан һәм Удмурт Республикаһынан ҡала өс лидер иҫәбенә инде", - тип белдерҙеләр Хеҙмәт министрлығында. Күрһәткестең артыуы ғаиләләрҙә өсөнсө һәм артабанғы булып донъяға килгән сабыйҙарҙың күбәйеүе менән бәйле. 2020 йылда 11 844 сабый тыуған. Улар өсөнсө һәм артабанғы бала булып донъяға килгән. Был 2019 йылға ҡарағанда 979 балаға йәки 9 процентҡа күберәк.

✓ **Башҡортостан йыйылма командаһының X Бөтә Рәсәй ҡышҡы ауыл спорт уйындарында еңеүе һөҙөмтәһендә республика киләһе ярыштарҙы үткәреүгә дәғүә итергә мөмкин.** Республика етәксеһе Радий Хәбиров был хаҡта социаль селтәрҙә хәбәр итте. "Беҙ саңғыла, полиатлонда, шахматта, шашкала һәм спорт ғаиләләре ярышында иң яҡшы һөҙөмтә күрһәттек. Республиканан Пермгә Бөрйән, Өфө, Шишмә, Әлшәй районарынан 17 спортсы һәм ике тренер барҙы. Делегация етәксеһе - Шишмә районының балалар-үҫмерҙәр спорт мәктәбе директоры Сергей Балуев", - тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы. Республика спортсылары илдең төрлө субъекттарынан килгән 700 спортсы менән миҙалдар өсөн көс һынашты. Уларҙың барыһы ла ауыл, урман, балыҡсылыҡ хужалыҡтарында, ҡулланыусылар кооперацияһында эшләй, фермерҙар, социаль хеҙмәткәрҙәр.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯРЛЫЛАР КҮПМЕ?



**Башҡортостан Республикаһы Рәсәй субъекттары араһында ярлылыҡ кимәле буйынса - 26-сы, 2019 йыл йомғаҡтары буйынса Волга буйы федераль округында Татарстандан (6,9 процент) һәм Түбәнге Новгород өлкәһенән (9,5 процент) ҡала өсөнсө урынды биләй.**

Был турала Башҡортостанстатҡа һылтанма менән республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр иттеләр. 2018 йылда Башҡортостан ошондай рейтингта 25-се урында ине. Башстат мәғлүмәттәре буйынса, ярлылыҡ кимәле (Башҡортостанда аҡсалата килеме йәшәү минимумынан аҙыраҡ булған халыҡтың өлөшө) 2019 йылда 12,1 процент - 490,6 мең кеше тәшкил иткән. 2018 йыл менән сағыштырғанда 12 процент йәки 487,5 мең кеше. Дөйөм алғанда, Рәсәйҙә халыҡтың ярлы өлөшө (килеме йәшәү минимумы дәүмәленән аҙыраҡ) - 12,3 процент йәки 18,1 миллион кеше. 2018 йылда - 12,6 процент йәки 18,4 миллион кеше. 2019 йылдың дүртенсе кварталында йәшәү минимумы 9 222 һумға тиң булһа, бөгөн иһә ул 10 015 һум тәшкил итә. Хеҙмәт министрлығында билдәләүҙәренсә, Башҡортостанда 2024 йылға тиклем килеме йәшәү минимумынан кәмерәк булған халыҡтың өлөшөн кәметеү программаһы раҫланған. Бынан алда "Башинформ" властарҙың яңы эш урындарын булдырыу, бизнесҡа ярҙам күрһәтеү, фермерлыҡты үҫтереү, ғаиләләргә адреслы социаль ярҙам, аҡсалата түләүҙәр һәм башҡа саралар ярҙамында күрһәткестәргә өлгәшергә ниәтләүҙәре тураһында хәбәр иткәйне.

# ЯУАПЛЫЛЫҠ БИЛДӘҺЕ БЫЛ




**Республика етәксеһе Радий Хәбиров Владимир Путиндың "Башҡортостан сода компанияһы"н контролдә тотоу хоҡуғын Башҡортостанға тапшырыу тураһында ҡарарын Президенттың бүләге түгел, ә ҙур ышаныс һәм яуаплылыҡ билдәһе, тип атаны.**

Хәбәр ителеүенсә, 31 мартта Владимир Путин "Башҡортостан сода компанияһы" йәмғиәте акцияларының 38,3 процентын - республика милкенә, шулай уҡ 11,7 процент плюс бер акцияны ышанылы идараға тапшырыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Шулай итеп, республика предприятиены контролдә тотоу хоҡуғын алды, ул унын үҫеше менән идара итергә тейеш.

- Икенсе көндө мин "Сода"ның хеҙмәт коллективына барҙым, ҡайһы берәүҙәр ошо ваҡиғаны яңылыш аңлай башланы, тип әйтә алам. Был Рәсәй Президентының бүләге түгел. Быны ҙур яуаплылыҡ һәм Президенттың ышанысы тип баһаларға тейешбеҙ. Беҙ һеҙҙең менән предприятиеның хәле өсөн яуаплыбыҙ. Бында, әлбиттә, ныҡлап эшләргә кәрәк, - тип белдерҙе Радий Хәбиров дүшәмбе Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә. Радий Хәбиров билдәләүенсә, "Сода"ның проблемалары хаҡында барыһы ла белә. Шул уҡ ваҡытта ул Башҡортостандың дәүмәле буйынса дүртенсе предприятиеһы. "Шуға күрә иҡтисадыбыҙға был артабан үҫешеү өсөн һәйбәт этәргес булыр тип уйлайым", - тип йомғаҡ яһаны республика етәксеһе.

# ҠУНАҠТАР КӨТӘБЕҘ

**Өфө Бөтә донъя фольклориадаһына әҙерләнә. Бөтәһе 56 илдән коллектив һәм артист саҡырылған.**



Республика Хөкүмәте вице-премьеры Азат Бадранов һүҙҙәренсә, ҡатмарлы эпидемиологик һәм иҡтисади хәлгә бәйле ҡайһы бер дәүләттәр ҡатнашыуҙан баш тартҡан. "Фольклориадала ҡатнашыусылар өсөн Роспотребнадзор менән берлектә Өфө аэропортында коронавирус инфекцияһына тест үткәреү өсөн экспресс-лабораториялар ойоштороурға уйлайбыҙ, - тине Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары. - ПЦР-тестар кәрәк, сөнки килгән көндә уларҙың күпселегенең осошҡа тиклем 72 сәғәт эсендә эшләнгән белешмәләре ғәмәлдән сыға. Уларҙы Өфөлә эшләү зарур, сөнки беҙҙә дауаханаға һалыу һәм карантинға урынлаштырыу бригадалары әҙер тора". Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостанда донъя кимәлендәге сара 3-10 июлдә уҙғарыла. Был аҙнала Фольклориада сайтында журналистарға аккредитация үткәрелә башлай.

# ПАССАЖИРҘАР НИСЕК ИҪӘПЛӘШӘ?



**Республикала йәмәғәт транспортында пассажирҙар менән иҫәпләшкәндә контроль-касса аппаратын ҡулланыуҙы тикшереү буйынса рейдтар дауам итә.**

Рейдтарҙа республиканың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығы, Федераль һалым хеҙмәте идаралығы, ЮХХДИ һәм Төбәк-ара дәүләт автомобиль юлын күҙәтеү идаралығы хеҙмәткәрҙәре ҡатнаша. Билдәләнеүенсә, рейдта ҡатнашыусылар транспорт йөрөтөүселәргә ҡулаҡса менән иҫәпләшкәндә контроль-касса техникаһын мотлаҡ ҡулланыу кәрәклеге тураһында аңлатыу эше үткәрә. Улар шулай уҡ ошо өлкәләге закон талаптарын боҙған өсөн яза биреләсәге хаҡында ла иҫкәртә. Мәҫәлән, юл хаҡы өсөн иҫәпләшкәндә контроль-касса техникаһын ҡулланмаған өсөн вазифалы кешеләргә - табыштың сирек өлөшөнән яртыһына тиклем (кәмендә 10 мең һум), ойошмаларға иһә дүрттән өс өлөшөнән алып табыштың тулы күләменә тиклем (кәмендә 30 мең һум) штраф һалына. Тәртипте ҡабатлап боҙһалар, вазифалы кешеләр бер-ике йылға был эшмәкәрлектән ситләтелә, ә шәхси эшҡыуарҙарҙың һәм ойошмаларҙың эшмәкәрлеге 90 тәүлеккә туктатыла. Рейдтар һынғай һөҙөмтә бирә - йәмәғәт транспорты ойошмалары пассажирҙар менән иҫәпләшкәндә контроль-касса техникаһын әүҙемерәк ҡуллана башланы. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, әгәр ҙә түләү терминалы эшләмәһә, пассажир йәмәғәт транспортында йөрөгәне өсөн түләмәҫкә лә мөмкин. Нисек кенә булмаһын, билет бирелергә тейеш, сөнки ул пассажир менән килешеү төҙөү фактын раҫлаған документ булып тора. Юл-транспорт ваҡиғаһы осрағында ул пассажирға страховка түләүен алыу хоҡуғын бирә. Бынан тыш, билет тикшереүселәр менән аңлашыуҙан азат итәсәк.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында 1 апрелдән Дим ҡала дауаханаһы яңы коронавирус инфекцияһын йоҡторған пациенттарҙы ҡабул итмәй. Әлеге көндә республикала ковид-сирлеләр өсөн койкаларҙың дөйөм һаны - 1668, шуларҙың 90 проценты тулы.

✓2 апрелдән республикала Өфө - Стәрлетамаҡ- Салауат - Мәләүез - Күмертау маршруты буйынса "Орлан" ҡала яны поезы йөрөй башланы. Һынап ҡарағандан һуң юлға киткән ваҡытты ике тапҡырға тиерлек - 3 сәғәт 50 минутҡа тиклем кәметеүгә өлгәшелгән. Тиҙ йөрөшлө ҡала яны поезын тәғәйенләү эше 2020 йылда уҡ башланды. Тәүҙә яңы маршруттарҙы асыу 2021 йылдың майына билдәләнгәйне. Ведомствола билдәләүҙәренсә, юлдағы ваҡытты 3 сәғәт 20 минутҡа тиклем ҡыҫҡартыу планлаштырыла.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында "Өфө ҡалаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн" тигән маҡтау билдәһен раҫланылар. Ҡарарҙан күренеүенсә, был награда ҡаланың социаль-иҡтисади һәм мәҙәни үҫешенә тос өлөш индергән предприятиеларҙы, учреждениеларҙы, ойошмаларҙы, йәмәғәт берләшмәләрен дәртләндереүгә йүнәлтелгән. Почёт билдәһе Рәсәй, республика кимәлендәге саралар йәки һөнәри байрамдар, ойошманың барлыҡҡа килеүенә бәйле юбилей даталары, ҡала байрамдары ваҡытында тапшырылырға мөмкин.

✓Өфөлә 5 апрелдән 15 автобуста юл хаҡы арта. Был турала пассажирҙар ташыу буйынса оператор - шәхси эшҡыуар Фәнис Батыровҡа һылтанма менән Өфө хакимиәте хәбәр итте. Хәҙер ҡулаҡса йәки банк картаһы менән иҫәпләшкәндә юл хаҡы 30 һум була, ҡайһы бер маршруттарҙа "Алға" картаһы менән түләгәндә ташлама ҡаралған. Өфө хакимиәтендә белдереүҙәренсә, йәмәғәт транспортында юл хаҡы буйынса ҡарарҙы ташыусылар үҙҙәре ҡабул итә. Улар был хаҡта ҡалаға 30 көн алдан хәбәр итергә тейеш.

✓Өфөлә Башҡортостандың халыҡ артисы, танылған ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов үҙенең 50 йәшлек юбилейын билдәләргә йыйына. Әле артист ошо йәһәттән "Ҡумыҙ сере" тип аталған концерт программаһы әҙерләй. Сара 17 апрелдә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# МИҘГЕЛ ХӘСТӘРЛЕКТӘРЕ



**1 апрелдән Өфөлә "Баш ҡала ҡаҙанышы" ҡала йәмәғәт премияһына ғаризалар ҡабул итеү башланды. Быйыл ул 15-се тапҡыр тапшырыласаҡ. Был - ҡала халҡының социаль мөхиттә һәм граждандыҡ йәмғиәтен үҫтереүҙәге ҡаҙаныштарына ихтирам белдереү мөмкинлеге ул. Ҡаланы үҫтереүҙең йәмәғәт фонды сайтында ғаризалар ҡабул итеү 30 апрелгә саҡлы дауам итә. Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә башҡа мәсьәләләр менән бер рәттән ошо хаҡта тағы ла бер тапҡыр иҫкә төшөрөлдө.**




Көн тәртибенә иһә тәү сиратта ташҡын мәсьәләһе сығарылды. Дим районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Аскар Батталов белдереүенсә, 31 мартҡа ҡарата Дим йылғаһы бассейнындағы ҡар ҡатламы 129 миллиметр тәшкил иткән, йәғни был норманан 32 процентҡа артығыраҡ. Ә Ағиҙел йылғаһында ҡар ҡатламы декадала башҡа йылдарҙағы күрһәткестән 13 процентҡа күберәк булһа, Димдә 49 процентҡа артығыраҡ. Районда ташҡын эҙемтәләрен һәм унан килгән зыянды кәметеү маҡсатында штаб төҙөлгән, һыу кимәлен тикшереү буйынса мониторинг ойошторолған.

Шулай уҡ әлеге ваҡытта яҙғы хәрби саҡырылыш бара. Башҡортостан ғына түгел, Өфө ҡалаһы ла егеттәрҙе хәрби хеҙмәткә оҙатыу һәм уларҙың әҙерлеге буйынса илдә даими рәүештә алдынғылар рәтендә йөрөй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һуңғы саҡырылыштар бер ни тиклем хәүеф тә тыуҙыра, сөнки коронавирус инфекцияһы һаман да таралыуын дауам итә. Ҡала хакимиәтенең Граждандыҡ йәмғиәте институттары менән бәйләнеш буйынса идаралығы начальнигы Артур Ғафаров белдереүенсә, Өфөнөң саҡырыу комиссиялары инфекция таралыуға юл ҡуймау өсөн барлыҡ сараларҙы ҡуллана. Хәрби хеҙмәткә саҡырылыусылар араһында сирҙе булдырмау һәм таратмау өсөн тейешле ҡарәш барһа, икенсе яҡтан, хәрби хеҙмәттән ҡасып йөрөүселәрҙе эҙләү проблема тыуҙыра. Бәғзеләр теркәү урыны буйынса йәшәмәй, туғандары уларҙы эҙләүҙә булышлыҡ күрһәтмәй һәм был осраҡта полиция хеҙмәтенең ярҙамы талап ителә. Өфөнән саҡырылыусы егеттәр ҡала хакимиәте шефлыҡҡа алған Балтика флотының "Сообразительный" корветында хеҙмәт итә, шулай уҡ йыл һуңында һыуға төшөрөләсәк "Өфө" исеме бирелгән дизель һыу аҫты кәмәһендә лә хеҙмәт итә ала.

Ололарҙың ололарса хәстәрлеге менән бер рәттән, яҙ - ул уҡыусыларҙың да нервыһын ҡаҡшатыусы осор, сөнки тиҙҙән сығарылыш имтихандары башланасаҡ. Был мәлдә нисек итеп балалар өсөн дә эҙемтәһеҙ үткәрергә? "Ғаилә" Психологик-педагогик, медицина һәм социаль ярҙам үҙәге директоры Эльза Әхмәтова имтихандар осоронда уҡыусыларҙың психологик сәләмәтлегә торошо менән таныштырҙы.

Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәнән күренеүенсә, һәр миҙгелдең үҙ мәсьәләләре һәм уларҙың барыһы ла иғтибар талап итә. Ә яҙ бер нәмәгә ҡарамай үҙ хоҡуҡтарын даулай...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# БАРЫҺЫ ЛА ИҪӘПКӘ...



**1 апрелдән 3-7 йәшлек балаһы булған ғаиләләр арттырылған пособиеға дәғүә итергә мөмкин. Март башында Владимир Путин ошондай указға ҡул ҡуйҙы.**

Республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостанда 80 меңдән ашыу ғаилә арттырылған түләү алырға хоҡуҡлы. Билдәләнеүенсә, әгәр элек рәсми килеме йәшәү минимумынан түбәнерәк булған бөтә ғаиләләр ҙә ярлы тип иҫәпләнһә, хәҙер иһә ғаиләнең мөлкәте: фатирҙары, йорттары, ер участкалары, транспорты ла иҫәпкә алына. Әйтәйек, ғаиләнең килеме йәшәү минимумынан түбән, ләкин бер нисә фатиры йәки йорто бар икән, метраж иҫәпкә алына: фатирҙа бер кешегә - 24, йортта 40 квадраттан артмаҫҡа тейеш.

Был социаль ярҙам сифатында алынған мөлкәткә ҡағылмай. Әгәр фатир йәки өй бөрәү генә булһа, уларҙың метражына иғтибар итмәйҙәр. Ер участкалары ла иҫәпкә алына: ҡалала йәшәүселәр өсөн - 25 сутыйҙан, ауыл ерендәгеләр өсөн бер гектарҙан күп булмаҫҡа тейеш, ошо осраҡта ғына ғаиләләр пособие алырға хоҡуҡлы (ерҙе социаль ярҙам сиктәрендә алғандарға ҡағылмай). Шулай уҡ милектә йәшәү өсөн тәғәйенләнмәгән бер йорт, бер дача һәм бер гараж булырға мөмкин (йәки күп балалылар һәм инвалид бала тәрбиәләгән ата-әсәләр өсөн - ике).

Быйыл пособие тәғәйенләгәндә ғаиләнең өлкән ағзаларының барыһының да ниндәйҙер аҡ килеме - эш хаҡы, эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлегенән килем, стипендия йәки пенсия булыуы мотлаҡ.

Закондағы ярашлы, ғаризаны ҡарауға 30 көн бирелә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ғаризаны ағымдағы йылдың декабренә тиклем яҙырға мөмкин. Барлыҡ һорауҙар менән социаль ярҙам үҙәгенең 8 (347) 200-80-80 телефонына шылтыратырға.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЕР КӘРӘКМЕ?

✓**Башҡортостанда инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр ер алыу өсөн ғариза яҙғанда инвалидлыҡ тураһында белешмәләр биреүҙән азат ителде. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Ер мөнәсәбәттәрен көйләү тураһында законға тейешле үҙгәреш индерҙе, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан парламентынан.** "Ысынында иһә, был - халыҡҡа артыҡ бюрократик йөкләмә. Закон көсөнә ингәндән һуң ведомстволар кәрәкле мәғлүмәтте үҙҙәре һоратып алдырырға тейеш. Инвалидлыҡты медик-социаль экспертиза дәүләт хеҙмәте билдәләй. Был мәғлүмәттәр "Инвалидтарҙың федераль реестры" федераль дәүләт мәғлүмәт системаһына ебәрелә", - тип белдерҙе Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Закон ҡул ҡуйыу өсөн Башҡортостан Башлығына йүнәлтелгән. Рәсми баҫылып сыҡҡандан һуң ун көн үткәс, закон үҙ көсөнә инә.

✓**Синоптиктар яҙғыһын һәм йәйгеһен республикала йәшәүселәрҙе ниндәй һауа торошо көтөүе тураһында һөйләне.** Апрелдә уртаса һауа температураһының - нормаға ярашлы, төньяҡ-көнбайышта норманан юғары - 3-5 градус булыуы көтөлә. Майҙа ла уртаса температура нормаға ярашлы - 10-14 градус. Ә бына яуым-төшөм ғәҙәттәгегә ҡарағанда саҡ ҡына аҙыраҡ була. Йәй көнө аномаль юғары температура көтөлмәй. Июндә - 16-18, июлдә - 17-20, августа - 14-18 градус. Йәйҙең һуңғы айында республиканың көнсығышында норманан күберәк яуым-төшөм фаразлана.Сентябрҙә Башҡортостанда уртаса температура норманан юғары - 8-12 градус була. Һауа температураһы һәм яуым-төшөм прогнозын Рәсәйҙең Гидрометеорология үҙәге төҙөгән. Оҙайлы прогноздың дөрөҫлөгө - 65-70 процент.

✓**Баш ҡалала "Өфө муйынсағы" атамалы йәйәүлеләр өсөн маршрут барлыҡҡа киләсәк. Уның дөйөм оҙонлоғо 100 километр самаһы буласаҡ.** Ул ҡаланың ете урынында яр буйҙарындағы маршруттарҙы үҙ эсенә алып, бер исем аҫтында берләштерәсәк. Урындағы әүҙемлек үҙәге был мәсьәләгә ҡағылышлы ике проект сессияһын уҙғарған да инде. Икенсе сессия барышында маршрут моделе эшләнгән һәм проектты тормошҡа ашырыу буйынса эшсе төркөм төҙөлгән. Уның составына ҡала хакимиәте вәкилдәре, активистар, урбанистар, архитекторҙар һ.б. ингән. Проектты тормошҡа ашырыу өсөн бер ни тиклем мәсьәләне, шул иҫәптән маршрут территорияларын төҙөкләндереү, уны зоналарға бүлеү, күҙәтеү майҙансыҡтары булдырыу һ.б. хәл итергә кәрәк. Проект инициаторҙары өфөләрҙе унда ҡатнашырға, һорауҙар булһа 8-917-480-54-80 номеры буйынса мөрәжәғәт итергә саҡыра. Проекттың һынау участкаларын май башында асыу планлаштырыла.

✓**Ҡаланың Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге һәм административ комиссиялар газондарҙа, балалар майҙансыҡтарында транспорт сараларын парковкалау тыйылыуы тураһында иҫкәртә.** Хоҡуҡ боҙоусыларға административ саралар ҡаралған, йәғни транспорт сараларын газондарҙа, клумбаларҙа йәки башҡа йәшелләндереү территорияларында парковкалаған граждандарға административ яуаплылыҡ билдәләнгән - 1 меңдән 2 мең һумға тиклем штраф ҡаралған. Хоҡуҡ икенсе тапҡыр боҙолғанда инде, был күләм 3 меңдән 5 мең һумға тиклем. Вазифалы кешеләргә һәм ойошма-предприятиеларға штраф күләме тағы ла ҙурыраҡ. Профилактиканың йәки алдан иҫкәртеүҙәрҙең төп маҡсаты штраф менән ҡурҡытыу түгел, ә газондарҙың һәм сәскәлектәрҙең именлеген һаҡлау, сөнки транспорт үткәндән һуң улар шунда уҡ бар матурлығын юғалта.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бауыр кистаһы

❖ Бауыр кистаһы ауыр осраҡта әүәрелгәнгә тиклем уны андыҙ менән дауаларға була. 100 грамм андыҙ тамырына 3 литр ҡайнатылған һыу ҡойоп, 1 ҡалаҡ ҡоро сүпрә өҫтәп һалып, бер тәүлек дауамында ҡараңғы урында төнәтергә һәм һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашағандан 20 минут үткәс, 100-әр мл эсергә. Әҙер төнәтмә бөткәнсе ҡулланырға, шунан бер ай дауаланыуҙан туҡтап тороп, янынан ҡабатларға була.

❖ 1 ҡалаҡ киптереп ваҡланған дегәнәк тамырына 250 мл һыу ҡойоп, талғын утта 15 минут ҡайнатырға. Ярты сәғәт төнәткәндән һуң һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15-20 минут алда 1/3 стакан эсергә.

❖ Дегәнәктең йәш япраҡтарын йыуып, ваҡларға һәм һутын һығып алырға. Шул һутҡа 1:1 нисбәтендә һыу ҡатыштырып, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Был рәүешле 1 ай дауаланырға. Әҙер һутты һыуыткыста һаҡларға кәрәк, әммә 3 тәүлектән дә артыҡ ярамай.

### Хәтер яҡшыртыу

❖ Берәр стакан таҙартылмаған көнбағыш майы (нерафинированный) һәм ҡырылған һарымһаҡты ҡушып болғарға. Килеп сыҡҡан 700 грамлыҡ шифалы ҡатышманың 1 балғалағын көнөнә 1 тапҡыр иртәнсәк ас ҡарынға ашарға, ауыҙҙа имеп йөрөргә. Хәтерҙе яҡшыртыу өсөн ошондай ҡатышманы ике тапҡыр әҙерләп, ваҡыты-ваҡыты менән туҡталып тороп, йыл дауамында дауаланырға. Бынан тыш, йәшелсә-емеш, диңгеҙ балығы ашарға, шиғыр ятлау йәки кроссворд сисеү кеүек баш мейеһен эшләтә торған шөғөлдәрҙе үҙ итергә кәрәк.

### Быуындар һыҙлаһа

❖ 1 литрлыҡ банкаға дарыуханала һатылған ваҡланған әремде һалып, өҫтөнән ниндәй булһа ла үҫемлек майы ҡойоп, ваҡыты-ваҡыты менән болғатып тороп, ҡояшта 40 көн төнәтергә. Тубыҡҡа, арҡаға, ҡулдарға 2-3 компресс яһау менән һыҙлау баҫыла. Был төнәтмәне шулай уҡ тирегә һөрткәндә әҫпенән дә ярҙам итә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Беҙ бала саҡта өҫтөнә иҫкерәк сапан, аяғына ситек һәм галош, эҫе йәй көнө булыуға ҡарамаҫтан, башына теүәтәй тышынан ҡама бүрек кейгән, киң маңлайлы, ҙур һаҡаллы бер ҡарт ауылыбыҙға йыш килеп йөрөй торғайны.*



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Кесерткән Азияның урман һыҙатында һәм Көнсығыш Европа территорияһында яңы таш быуат осоронда туҡыма әҙерләү өсөн үҙләштерелгән үҫемлек. Ваҡыт үтеү менән уны киндер һәм башҡа үҫемлектәр алмаштыра. Әммә әле XVIII-XIX быуатта ла ханттар, мансиҙар, кеттар, төньяҡ алтайҙар (челкандар, кумандиндар), Амур буйы халыҡтары, Урал буйында башҡорттарҙан тыш коми һәм мари халҡы кесерткәндән еп иләү һәм туҡымалар эшләүҙе дауам иткәндәр. Башҡорттарҙы һәм Көнбайыш Себер уғырҙарын (тәү сиратта ханттарҙы) кесерткән туҡыманы ирҙәр күлдәге тегеү өсөн ҡулланыу берләштерә, тигән күҙәтеү яһай ханттар һәм мансиҙар мәҙәниәте буйынса белгес Н.Ф. Прыткова.

Е.А. Алексеенко билдәләүенсә, кесерткән, ағас сүстәрен һәм башҡа урман материалдарын ҡулланыу Көньяҡ һәм Көньяҡ-Көнбайыш Себер тайга зонаһындағы йәйәүле һунарсылар, йыйыусылар һәм балыҡсылар хужалыҡ комплексы вәкилдәренә хас. Улар араһында Обь уғырҙары ғына түгел, көньяҡ самоедтар, төньяҡ алтайҙар, тайга хакастары ла. Автор XX быуаттың 70-се йылдарында башҡорттарҙың матди мәҙәниәтендә һәм хужалығында тайга ҡатламын айырып күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта был үҙенсәлек бигерәк тә көньяҡ-көнсығыш этномәҙәни комплекста асыҡ сағылыуы ла һыҙыҡ өҫтөнә алына. Ҡыр үҫемлектәренән туҡыма һуғыу башҡорт мәҙәниәтендә тайга халыҡтарына хас сифаттарҙың оҙон исемлеген дауам итеүсе һыҙат.

Уралдан Алыҫ Көнсығышҡа тиклем кесерткән эшкәртеү технологияһы сағыштырмаса ябай булған: талҡыштан сүсте һөйәк йә ағас бысаҡ менән айырғандар, шунан килелә йомшартҡандар. Кесерткән ептәрҙе бөтә ерҙә лә бау һәм ау үреү өсөн ҡулланғандар, шулай уҡ тиренән өҫ кейеме һәм күн аяҡ кейеме тегеүҙә тарамыш менән бер рәттә йыш тотонолған.

Волга буйының төрки телле халыҡтарында, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла, туҡыма эшләгәндә киндер сүсе ҡулланыу оҫталығының киң таралыуында тик урындағылар (фин-уғыр) йоғонтоһон билдәләргә булыр ине. Әммә башҡорт һәм татарҙарҙа киндерҙән һуғылған туҡыманың атамаһында уҡ үҫемлекте аңлатҡан kendir боронғо төрки һүҙе ҡулланыла. Алтайҙар ҙа туҡыманы шулай атағандар. Башҡорттарҙың урынағастары ла төбәктәрҙә "киндер урыны" тип йөрөтөлгән. Төньяҡ Алтай һәм Урта Азия халыҡтарының да борон киндерҙән туҡыма эшләүҙәрен иҫәпкә алмай булмай. XIX быуатта Себерҙә шорҙар, төньяҡ алтайҙар (челкандар, кумандиндар) киндерҙән тегелгән кейем кейгән. Уларҙа киндер туҡыма һуғыу традицион һәм үҫешкән етештереүҙәрҙең береһе булған. Төньяҡ алтайҙар һәм шорҙар тәбиғи сеймал ҡулланып, иң ябай төр арҡыры станок ҡулланырға өйрәнгәндәр.

Урта Азияның төрки телле халыҡтары араһында ҡырҙа үҫкән киндерҙән ҡарағалпаҡтар туҡыма эшләй белгән. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр бында уғырҙар йоғонтоһон күҙәтеп, уғырҙар һәм төрки халыҡтарҙың бер өлөшөндә, шул иҫәптән ҡарағалпаҡ һәм башҡорттарҙа, Көньяҡ Себерҙең төньяғында көн иткән төрки халыҡтарҙа үҫемлек сүстәрен эшкәртеүҙә хужалыҡ-мәҙәни традициялары уртаҡлығына иғтибарҙы йүнәлтә. Т.Н. Томина ҡарағалпаҡтарҙың киндер туҡымаһы менән 2-се Пазырык ҡурғанында табылған туҡыманы сағыштырып, үткән быуатта Көньяҡ Себер халыҡтарында киндер туҡыма сағыштырмаса ябай урынағас ярҙамында һуғылған булыуын, бындай урынағас төркиҙәрҙә тула баҫыу өсөн ҡулланылыуын билдәләй. Күренеүенсә, Көньяҡ Себер төбәгендә был төр урынағас төркиҙәргә тиклемге осорҙа барлыҡҡа килгән. Беҙҙең дәүерҙең I меңъйыллығы аҙағында һәм II меңъйыллығы башында Көньяҡ Урал һәм уға сиктәш урманлы дала территорияһында таралып ултырған ҡәбиләләр сүсле үҫемлектәрҙе эшкәртә белеүе һәм туҡыусылыҡ менән шөғөлләнеүен Урал буйы һәм Урал аръяғындағында асылған күскенселәр ҡурғандары иҫбатлай.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...*

# "ҺЫУҺАҠ БАБАЙ" КЕМ УЛ,

## йәки Диуаналарға мәрхәмәтле булайыҡ!



**Ауыл-ҡалаларыбыҙҙа һирәкләп кенә осратабыҙ бындай "сәйер" кешеләрҙе. Уларҙы халҡыбыҙҙа "диуана" тип тә атайҙар. Медицинала уларҙы "шизофрения", ә ҡайһы берҙәрен "олигофрения" (слабоумие) тип аталған сирле кешеләр тип һанайҙар.**

Бәғзе бер шундайҙарҙың ауырыуы әленән-әле киҫкенләшеп, "яҡты аралыҡ" (светлый промежуток) менән алышынып торһа, икенселәре ябай кешегә әллә ни беленеп тә бармаған еңел формала булыусан. Бындай сирҙең ҡайһы бер төрөн тик табип-психиатр ғына аныҡлауы мөмкин. Агрессив булмаған, йәғни йәмғиәткә зыяны теймәҫтәй сирлеләрҙе стационарҙа дауалау мотлаҡ түгел. Яҡындары, таныштары араһында үҙ урынын табып, күптәре һин дә мин үҙләшеп китә ундайҙар. Айырыуса яуаплылыҡ талап итмәгән эшкә лә урынлашып, эшләп ғүмер ҙә итәләр. Ундайҙарға инвалидлыҡ статусы биреп, тейешенсә пенсия ла түләү ҡаралған. Хатта ғаилә ҡороп та ала бәғзеләре. Бындай кешенең ниндәйҙер берәй һәләте (мәҫәлән һүрәт төшөрөү) айырыуса көсәйеп китеүе лә ихтимал. Ғәҙәттә, яҡындары, тирә-йүндәгеләр етди ҡабул итмәгән ошондай диуананың берәй елле генә фекер әйтеп һалыуы ла ихтимал. Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә" тигән трагедияһындағы Диуана образын күптәр хәтерләйҙер. "Мөрйәһе ҡыйыш булһа ла - төтөнө тура сыға" тип әйтәләр бындайҙар хаҡында.

Беҙ бала саҡта өҫтөнә иҫкерәк сапан, аяғына ситек һәм галош, эҫе йәй көнө булыуға ҡарамаҫтан, башына теүәтәй тышынан ҡама бүрек кейгән, киң маңлайлы, ҙур һаҡаллы бер ҡарт ауылыбыҙға йыш килеп йөрөй торғайны. Бер ҡасан да уның юл буйында туҡталышта машина йә автобус көтөп торғанын күргәнем булманы. Арҡаһына тоҡ аҫып, ауылдан-ауылға, тауҙар-яландар аша, эре-эре аҙымдар менән йәйәүләп кенә йөрөй торғайны. Бер ҡулында һәр саҡ шымарып бөткән таяғы булды.

Был ҡартты беҙҙең ауылда "диуана бабай" тип кенә йөрөттөләр. Олораҡтар "Шаһишәриф диуана" тип тә әйтер ине. Үҙе дин юлындағы кеше булараҡтыр инде, башлыса ауылыбыҙ муллаһының өйөнә килә торғайны. Ололар уға ҡарата бик ихтирамлы, яҡшы мөғәмәләлә булды. Бала-сағаны күрһә, бабай туҡтап тороп: "Мә, улым, бишинйә", - тип, ҡапсығынан иҙелеп бөткән печенье йә икмәк һынығы сығарып һона. Беҙ уны алмай ҡасып китәбеҙ. Ҡарттың ғәҙәти түгел ҡиәфәттә булыуы, тау-таш араларында йөрөүе беҙгә, малай-шалайға, бигерәк тә серле, ирмәк тойола ине. Урам буйынан китеп барған, һис бер кемгә лә насар һүҙ әйтмәгән был йыуаш кешегә "Диуана, аҡса бирһәң - ҡыуана", тип һамаҡлап ҡала торғайныҡ. "Оло кешене үртәү ярамай, гонаһ була", тип өлкәндәр беҙҙе тыйғылай ине.

Бабайҙың тоғонда нимә барлығы ла беҙҙең өсөн ҡыҙыҡ. Балалар араһында бәғзе берәүҙәр "тоғоноң эсе тулы аҡса" тигән имеш-мимештәр уйлап сығарып һөйләй... Ҡыйыураҡ малайҙар хатта кемдәрҙеңдер йортона ҡунырға туҡталғанда олатайҙың тоғон асып ҡарағанын да белә инек. Һәр төрлө үлән, япраҡтар, иҙелеп йә иһә ҡатып бөткән икмәк, печенье ҡалдыҡтары, кәнфит-маҙар ғына ине, тип һөйләне улар аҙаҡтан.

Апайым һөйләүенсә, элегерәк беҙгә лә килгеләп йөрөгән икән был бабай. Уның бер килгәнен мин үҙем дә яҡшы хәтерләйем. Мосафирҙы хөрмәт итеүҙең ҙур сауаплы ғәмәл икәне, уның доғаһы ҡабул булыуы хаҡында риүәйәтте оло кешеләр яҡшы белгәндәрҙер. Атайым менән әсәйемдең дә уны ихтирамлап ҡаршы алыуы, хатта ҡунаҡ итеүе иҫемдә. Ҡарттың өйгә килеп инеү менән "Әссәләмү ғәләйкүм!" тип сәләм биреп, беҙгә, бала-сағаға, шунда уҡ иғтибар итеүе, "И-и-и, балаҡайҙар!" тип ихлас йылмайып ебәреүе күҙ алдымда. Әсәйемә: "Һин, һеңлекәш, был балаларға майға икмәк бешереп кенә бир инде. Уларҙың самай майикмәк ашар саҡтары бит!" - ти. "Майикмәк"кә ишараны шунда уҡ аңлаған әсәйем, самауыр ҡайнағансы ҡамыр баҫа һалып, шыжлатып, майға икмәк бешерә башлай... Түргә ултырғас, матур, ҡыҙыҡ итеп һөйләшә-һөйләшә майикмәләп, баллап-ҡаймаҡлап, оҙаҡ ҡына сәй эсергә ярата ине бабай. Атайымды көлдөрә-көлдөрә һөйләгән хәбәре бер аҙ иҫемдә ҡалған: "...Мин Сәмәрҡандта, Бохарала ла булдым. Пуйыз менән йөрөнөм. Юлда милисийә "Ҡайҙа китеп бараһың?" тип һорай. Ә мин: "Там даруга - там пошел, тут даруга - тут пошел", - тип кенә әйтәм дә ҡуям... Ул ғына түгел, хатта дүкәмит тә һорайҙар бит. "Дүкәмит нимә була ул? - тип кенә яуаплайым тегеләргә (үҙе ихлас көлөп тә ебәрә). - Һыйыр мөгөҙөнә оҡшаған нәмәме ул, әллә болан мөгөҙөнә оҡшағанмы? Әгәр дүкәмит кәрәк булһа ни, ундай нәмә, ана, урыҫтарҙа күп була. Шуларҙан һорағыҙ", - тигәс, ҡул һелтәп, китә лә баралар..."

Минең ҡартатайымдың (атайымдың атаһы) исеме лә Шаһишәриф булған. Шул хаҡта ишеткән бәғзе берәү: "Диуана бабай һинең ҡартатайыңмы әллә?" тип һорағаны ла бар. Ҡайһы берҙә шаяртып: "Эйе, минең ҡартатайым шул. Оҡшамағанмынмы ни?" - тип тә ебәрә торғайным.

Мин армияла саҡта әлеге "диуана" олатайҙың вафаты хаҡында әсәйемдән ишеттем. Ҡыш көндәренең береһендә юлда аяҡтарын туңдырып, Баймаҡ дауаханаһының хирургия бүлегендә ятҡаны тураһында уның менән палаталаш бер ағай һөйләгән. Ҡарттың иҫ киткес сабыр булыуына, һис кенә лә ыңғырашмауына аптыраған барыһы ла. Шулай тыныс ҡына ятып үлгән бабай...

Ҡайһы бер ауылдарҙа был ҡартты "Һыуһаҡ бабай" тип тә йөрөттөләр. Уның хаҡында хәҙер төрлө гәзиттәрҙә лә телгә алғылайҙар. Бәғзе берәүҙәр, был "диуана" бабай "һыуһаҡ" һүҙен һәр саҡ ҡабатлап йөрөгән, тип яҙа. Әммә минең хәтерләүемсә, бабай гел генә (айырыуса, көрһөнгән саҡта) "Аллаһ" һүҙенә нығыраҡ баҫым яһап, "Аллаһуһаҡ, Аллаһуһаҡ", ти торғайны. Уға тағылған ҡушаматы ғына "һыуһаҡ" булып киткән. Ә инде әлеге һүҙҙең мәғәнәһенә килгәндә, дини гәзиттәрҙең береһендә бер мөслимә ҡәрҙәшебеҙ "Аллаһу-Хаҡ" тигән зекер тураһында мәҡәлә яҙып сығарғайны ("Зекер" һүҙе ғәрәпсәнән "иҫкә алыу" тип тәржемәләнә). Был олатай тап ана шулай тип, Аллаһ Тәғәләне һәр саҡ иҫкә алып йөрөгән булһа кәрәк. Элегерәк был һүҙҙе әсәйемдән дә ишеткеләй торғайным, әммә уға артыҡ иғтибар итмәгәнмен. "Хаҡ" һүҙе ғәрәпсәнән урыҫ теленә "истина" тип тәржемәләнә. Ул - Аллаһ Тәғәләнең исемдәренең береһе. Бына ниҙән килеп сыҡҡан был һүҙ. Үҙе ингән һәр бер өйҙөң ғаилә ағзаларына яҡшы теләктәр теләп, Аллаһ Тәғәләгә доға ҡылып ҡына йөрөгән изге күңелле кеше булған был бабай. Ҡасандыр, бала сағынан мосолман рухында тәрбиәләнеп үҫкән, дингә ныҡ инанған, әммә һуңғараҡ бер аҙ ғына "диуаналанып" киткән, сабый балалар һымаҡ эскерһеҙ бындай кеше өсөн Раббыбыҙға беҙ үҙебеҙ доға ҡылып торорға тейешбеҙ, тип һанайым. Шәриғәт ҡануны буйынса, балиғ булмаған балалар менән бер рәттән, ана шундай аҡылға зәғиф булғандар хатта бөтә мосолманға мотлаҡ тип ҡушылған намаҙ ғибәҙәтенән дә азат ителә бит...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

✓ *Йыландар - монгол сығышлы иң боронғо төрки ҡәбиләләренең береһе. Уларҙың беренсе мең йылдың икенсе яртыһында Римға һөжүм итеүе тураһында әрмән яҙыусыһы Матвей Эдесс (XII быуат) яҙып ҡалдырған.*



БАШҠОРТ ТАРИХЫ ЙЫЛЫ

**Ырыуҙар ҡороноң сираттағы йыйыны Дүртөйлә районында үтте. Бында эске йылан ырыуы вәкилдәре йыйылды. Йылан башҡорттарының аҫаба ерҙәре Тарихи Башҡортостандың көнбайыш өлөшө биләмәһе буйлап көньяҡтан төньяҡҡа табан киң һыҙат булып һуҙылған. Әлеге ваҡытта был ырыу вәкилдәре республиканың Бишбүләк, Дүртөйлә, Йәрмәкәй, Илеш, Ҡалтасы, Туймазы, Шаран һәм Саҡмағош, Татарстан Республикаһының Баулы районында йәшәй.**

# ИҢ БОРОНҒО ТӨРКИҘӘР



Йылан нәҫеленән бик күп билдәле шәхестәр сыҡҡан. Улар - Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми, Советтар Союзы Геройҙары Әнүәр Абдуллин һәм Ғәни Ғәлимов, Социалистик Хеҙмәт Геройы Тәлғәт Аҡманов, яҙыусылар Ғилемдар Рамазанов һәм Марсель Сәлимов, Рәсәй Фәндәр академияһының ғалим-академигы Ривнер Ғәниев, Башҡортостан Республикаһының һәм Татарстан Республикаһының халыҡ артисы Илһөйәр Ғәзетдинова, композитор, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Ризван Хәкимов, яҙыусы, драматург Радик Мөсифуллин, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Радик Динәхмәтов һәм башҡалар.

Мәжүсилек осоронда йылан башҡорттарҙа изге йән тип һанала. 922 йылда тарихи башҡорт ерҙәренә сәйәхәт ҡылған Әхмәт ибн Фаҙлан боронғо башҡорттарҙың йыланға табыныуын теркәп ҡалдыра, әммә йылан этнонимы йыланға бәйле булғанын Рәил Кузеев осраҡлылыҡ ҡына тип билдәләй. Йылан ҡәбиләһе өс ырыуға бүленә: эске йылан (ырыу аралары: баҙраҡ, йылан, күгәрсен, яҡут); Иҙел йылан (ырыу аралары: ҡандра, үрнәк, байсары); ҡыр-йылан, икенсе исеме тышҡы йылан (ырыу аралары: бүләк, искәндәр, исламғол, ҡараҡыпсаҡ, ҡуян, тәзәй).

Йыландар (монголса - ҡай) - монгол сығышлы иң боронғо төрки ҡәбиләләренең береһе. Уларҙың беренсе мең йылдың икенсе яртыһында Римға һөжүм итеүе тураһында әрмән яҙыусыһы Матвей Эдесс (XII быуат) яҙып ҡалдырған. Һуңынан йылан халҡы "ерәнсәслеләр" илен баҫып ала. Һары, ерән сәсле тип ҡыпсаҡтарҙы (урыҫса половцы - полома - солома) атайҙар. Ошо һәм башҡа ҙур ваҡиғаларҙың башында йылан (ҡай) ҡәбиләһе торған. Профессор Рим Йәнғужин ғалимдарҙың фекеренә таянып, йыландарҙың тарихы беҙҙең эраға тиклем өсөнсө быуатҡа ҡайтып ҡала, тип яҙа. Данлыҡлы ҡәбилә яңы эраның беренсе йыллығының аҙағында уҡ башҡорт этносын тулыландыра.

Йылан һәм ҡырғыҙ ҡәбиләләре тарихы урта быуаттарҙа ҡыпсаҡ конфедерацияһы сиктәрендә Дәште Ҡыпсаҡта үҫешкән булыуы ихтимал. XIII-XIV быуаттарҙа күп һанлы Дәште Ҡыпсаҡ ҡәбиләләре Урал алдына юл тота. Көслө миграция юлдары Башҡортостанға башҡа ҡәбиләләрҙе лә алып килә. Йылан ырыуының сығышы аныҡ билдәле булмаһа ла, уларҙың ҡыпсаҡтар берләшмәһенә ингән иң боронғо төрки ҡәбилә икәне бәхәсһеҙ.

Эске йылан улысы 1680 йылда Йылан улысын икегә (эске йылан һәм тышҡы йылан ырыуҙары) бүлгәндән һуң ойошторола. 1700 йылда ике улыстан өсөнсөһө: Иҙел йылан улысы айырыла. Эске йылан улысы үҙ сиратында алты аймаҡтан - Бикмәт, Ыуаныш, Ҡуҙбай, Күрзә, Баҙраҡ, Өсболон - тора. 1865-1866 йылдарҙа ғына улыстар территориаль берәмектәргә үҙгәртеп ҡорола. XVIII быуат аҙағында - XIX быуатта йылан ҡәбиләһе йәшәгән ер биләмәләре административ рәүештә Бәләбәй, Боғоруслан, Бөрө улыстары составына, Башҡортостанда идара итеүҙең кантон системаһына күсерелгәндән һуң - 5-се (10-11-се), 10-сы (12-13-сө) башҡорт кантондарына ингән.

Йылан ҡәбиләһенең аҫаба ерҙәренә хоҡуҡтары батша хөкүмәте тарафынан 1574, 1626, 1658, 1685, 1753, 1766, 1793 йылдарҙа грамоталар менән раҫланған. Шәжәрәләр башҡорттарҙың биләгән ерҙәренә хужа булыуына, аҫабалығына юридик күҙлектән дәлилләү өсөн ышанысльı документ булып һаналған. Мәҫәлән, эске йылан ырыуы башҡорттары быуындан-быуынға 1618 йылғы документты тапшыра килгәндәр.

Үкенескә күрә, оҙайлы ваҡыт йылан ырыуы башҡорттары йәшәгән райондарҙа уҡыу татар телендә алып барыла һәм 1990 йылдарҙа халыҡта ҡан хәтере уяна, улар үҙҙәренең сығышы менән ҡыҙыҡһына башлай. Һөҙөмтәлә 2013 йылдың 27 февралендә Йәрмәкәй районының үҙәгендә йылан ырыуы башҡорттарының съезы үтә, унда Борай, Бишбүләк, Туймазы райондары вәкилдәре ҡатнаша. 2015 йылда инде ошо ырыуға ҡараған райондарҙа Башҡортостан Гуманитар тикшеренеүҙәр институты ғалимдары тарафынан нәшер ителгән "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһының йылан һәм ҡырғыҙ ырыуҙарына арналған китаптарының исем туйы уҙғарыла.

Ниһайәт, йылан ырыуы вәкилдәре үҙҙәренең икенсе оло ҡорона йыйылды. Дүртөйлә районында үткән сарала Борай, Ҡалтасы, Илеш һәм Саҡмағош райондарынан ырыу вәкилдәре ҡатнашты. Ғәҙәттәгесә, сара район мәҙәниәт йортоноң фойеһында урынлаштырылған күргәҙмә менән танышыуҙан башланды. Унда халыҡ оҫталары үҙҙәренең эшен, үҙ райондары башҡорттарының милли кейемдәре өлгөләрен, билдәле шәхестәренең шәжәрәләрен тәҡдим итте. Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмиҙең Дүртөйлә районының Минеште ауылындағы йорт-музейы бик бай экспозиция һәм әҙиптең шәжәрәһен алып килгән. Директоры Жәлил Сабиров әҙиптең шәжәрәһе менән таныштырып: "Шәжәрәһен Назар Нәжми үҙе төҙөй башлаған, һуңынан ҡыҙы тулыландырған. Был шәжәрәлә халыҡ шағирының нәҫеле Бәшир исемле атабабаһынан башлана, нәҫел агаһында Миңеште ауылына күсеп килгән Яманғол да күрһәтелгән. Шәжәрә буйынса Назар Нәжмиҙең нәҫеле эске йылан ырыуына ҡарай", - тине.

Сараның төп өлөшө эске йылан ырыуының килеп сығыу тарихын сағылдырған тамашанан башланып, ете ырыу вәкиленең Аҡ батшаға барып аҫабалыҡ грамотаһын алыуы, башҡорттарҙың Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуы, Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларын күҙ алдында терелтеп, тарихты хәҙерге көндәр менән тоташтырып ҡуйҙы.

Пленар өлөштә тарихсы Салауат Хәмиҙуллин "Эске йылан ырыуының тарихы һәм үҙенсәлеге" исемле доклад менән сығыш яһаны, Юлдаш Йосопов төньяҡ башҡорттарына арналған ғилми-методик әсбаптар менән таныштырҙы. "Беҙ башҡортлар" хәрәкәте етәксеһе Радик Бәхтиевтың сығышын халыҡ һәр ваҡыттағыса йылы ҡабул итте. Ырыу вәкилдәре лә үҙҙәренең уй-фекерҙәре менән уртаҡлашты. Уларҙың сығыштары үҙ төбәктәрендәге башҡорт ауылдары тарихына, шәжәрәләренә, легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы сафында һуғышҡан яҡташтарына арналды. Пленар ултырыш һуңында Ырыу советы ағзалары һәм уның башлығы һайланды. Эске йылан ырыуы советы башлығы итеп бер тауыштан Дүртөйлә районының Минеште ауылы мәктәбе директоры Дамир Сабиров һайланды. Йыйылыусылар Руфина Камалова шиғырына Филүс Беркет ижад иткән йырҙы бер тауыштан эске йылан ырыуы гимны тип ҡабул итте. Резолюцияға Башҡортостан Республикаһы Башлығына Исмәғил ауылында эске йылан ырыуына нигеҙ һалыусы Исмәғил хөрмәтенә стела урынлаштырыу, Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжмигә Өфө ҡалаһында һәйкәл ҡуйыу үтенесе менән мөрәжәғәт итеү, шулай уҡ Башҡортостандың Бүздәк, Благовар, Бөрө, Дүртөйлә, Кушнаренко, Мишкә, Туймазы һәм башҡа төньяҡ-көнбайыш райондарында Шәжәрә байрамы үткәреүҙе дауам итеү тураһында пункт индерелде.

**Земфира ХӘБИРОВА әҙерләне.**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай һинең улдарың, Урал

275-се атлы полк, комдив бойороғон үтәп, Блиновский, Карасево, Старосинютино утарҙарын урап үтеп, дошман частары урынлашҡан ҡалҡыулыҡҡа табан йүнәлә. Полк авангардында барған Бәҙри Мәмбәтҡоловтың 2-се эскадроны һәм өлкән лейтенант Василий Гудыманың 3-сө эскадроны юл буйлап килгән румын-немец колоннаһын шәйләп ҡалып, аттарына килеш дошманға ябырылып, уны тулыһынса юҡ итә.

Шул арала һуғыш ҡыҙып китә. Ҡалҡыулыҡта урынлашҡан румын танк полкы һәм пехотаһы 275-се полкты ҡамап алып, юҡ итергә ниәтләй. Әммә өлкән лейтенант Шамил Рәхмәтуллиндың батареяһы, тиҙ арала орудиеларын дошманға ҡаратып ҡуйып, һөжүмгә күскән танкыларға һәм пехотаға көслө ут аса. Шулай уҡ танкыларға ҡаршы ата торған мылтыҡтар менән ҡоралланған яугирҙар батырҙарса һуғыша. Рядовой Ғәли Йосопов шундуҡ бер танкыға тура атып тейҙереп, яндыра. Унан һуң ул икенсе дошман танҡыһын да сафтан сығара. Өсөнсө танкыны Василий Гудыманың яугирҙары уратып ала, шул арала сабельник Мотаһар Галин, танк өҫтөнә һикереп менә һалып, уның люгын асып, автоматынан дошман танкистарына ут яуҙыра. Шамил Рәхмәтуллиндың орудие наводчиктары Сәйфетдин Ғафаров, Усман Бакиров, Сәлихов тар, мәргән атып, бер нисә танкыны сафтан сығара.

Дошман Карасево ауылы яғынан Блиновский утарына резерв көстәрен күсереүҙе дауам итә. Шул саҡ юлда дошман пехотаһы тейәлгән 3 автомашина пайҙа була. Лейтенант Хажи Ярмиевтың миномет батареяһы уларға ҡаршы ут аса. Машиналарынан һикереп төшкән дошман һалдаттары тиҙ арала ялан буйлап һибелеп, эргәләрендә генә ярылған миналарҙан ҡасып ҡотолорға ынтыла. Шул мәлдә өлкән лейтенант Ғәни Ғафаров эскадроны, уларға ташланып, уратып ала, һөҙөмтәлә тиҫтәләгән румын һалдаттары әсиргә алына. Күп тә үтмәй, Блиновский утары яғынан, 4 танк артына ышыҡланып, бер рота румын һалдаттары һөжүмгә күсә. Беҙҙең орудие расчеты командиры, сержант Ярулла Бакиров икенсе атыуҙан дошман танкыһын яндырыуға өлгәшә, ҡалғандары кире боролорға мәжбүр була.

Көн кискә ауыша. Румындарға яңынан алты ауыр танк, 2 бронемашина һәм 2 батальон һалдат ярҙамға килә. Полк батареяһы командиры, өлкән лейтенант Ш. Рәхмәтуллин танкыларҙы яҡын килеп етеү менән тура наводка менән утҡа тоторға бойора. Ярулла Бакиров орудиеһынан атылған өс снаряд бер танкыны һәм бронемашинаны сафтан сығара. Әммә дошман артиллерияһы утынан расчет яугирҙары ла, командир Бакиров та яралана. Ул, яраланған көйө, дошманға гранаталар ташлап өлгәрә. Икенсе орудиеның расчетынан тик наводчик Ғ. Сынбулатов ҡына иҫән ҡала. Ул да, мәргән атып, ике дошман танкыһын туҡтата. Шулай уҡ бер үҙе генә тороп ҡалған М. Ғафуров, орудие командирҙары Ғәлимйән Ихсанов, Ғабдрахманов та икешәр танкыны сафтан сығара.

Эскадрондар ҙа артиллеристарҙан ҡалышмай, ныҡ тора, бер-бер артлы дошман атакаларын кире ҡаға. Өлкән лейтенант Бәҙри Мәмбәтҡолов эскадроны дошман танкылары һәм пехотаһы ҡамауында тороп ҡала. Улар беҙҙең һалдаттарҙы тамам баҙатып, әсиргә алырға ниәтләй. Өлкән лейтенант ауыр яралана, әммә яугирҙары менән командалыҡ итеүен дауам итә. Улар өс сәғәт дауамында, дошмандың өҙлөкһөҙ уты аҫтында, уның барса аталарын кире ҡағыуға өлгәшә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✔ *Бер шулай балаһына алимент түләмәгән ир менән һөйләшәм. "Мине әсәйем яңғыҙ үҫтерҙе бит, әсәһе үҫтерер әле", - ти. Йәғни ул үҙе ниндәй тәрбиә алған - балаһына ла шуны тапшыра.*



*БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ*

# ИР-АТҠА ЮЛ БИРӘЙЕК!

**Ошо көндәрҙә, 16 апрелдә, республикала беренсе тапҡыр Ир-егеттәр форумы үтә. Башҡортостан Республикаһының атайҙар ролен күтәреү буйынса "Ир-егеттәр ҡоро" төбәк йәмәғәт ойошмаһының инициаторы һәм ойоштороусыһы, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф БАЙҒУСҠАРОВ менән ошо сара уңайынан әңгәмә ҡорҙоҡ.**

- Был ойошманы былтыр уҡ төҙөгәйнек, әммә пандемия уның эшен йәнләндереп ебәреүгә аяҡ салғас, бер аҙ кисектереп торорға һәм быйыл тәүге форумды үткәрергә булдыҡ, - тине Зариф Закир улы. - "Атайҙарҙың ролен күтәреү буйынса", тигән һүҙбәйләнешкә айырым баҫым яһап үтер инем, сөнки әсәйҙәрҙән, йәғни ҡатын-ҡыҙҙан башҡа атайҙар ҙа бар бит әле. Ғаилә төҙөүҙә, уны күтәреүҙә, тәьмин итеүҙә атайҙарҙың роле ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡынан кәмерәк түгел, бәлки, ниндәйҙер юҫыҡта күберәктер ҙә. Шуға бөгөн атайҙарҙың абруйын, бөҫөн, мәртәбәһен күтәреү маҡсатында ошондай ойошма кәрәк, тип уйланым.

**▸ Уның маҡсаттары ниндәйерәк, йәғни ул төп иғтибарҙы нимәгә йүнәлтәсәк?**

- Төп маҡсаттар - ир-аттың йәмғиәттәге әүҙемлеген, статуҫын күтәреү, ғаилә ҡиммәттәрен тергеҙеүгә, ғаилә институтын нығытыуға, атайлыҡтың абруйын нығытыуға, ир-аттың ижтимағи-сәйәси хеҙмәтендәге әһәмиәтен күтәреүгә булышлыҡ итеү, уның социаль йәһәттән яҡланыуына ярҙам итеү. Был бурыстарҙың һәр береһенә айырым тукталып китергә мөмкин, әлбиттә. Минең бигерәк тә нимәгә йәнем әрней: беҙҙә эскелеккә бәйле йолалар ныҡ тамырланды. Алкоголде законлы рәүештә лә, законһыҙ рәүештә лә һаталар. Халыҡ эсә һәм күпселек осраҡта ир-ат был сирҙән ҡаза күрә, яҡты донъя менән хушлаша. Ир-ат ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда 11 йылға кәмерәк йәшәй. Яңы йәмәғәт ойошмаһы эскелеккә ҡаршы көрәшеү һәм айыҡ тормош алып барыу һәм, әлбиттә, спорт менән шөғөлләнеүҙе пропагандалар, тип уйлайым.

Был тәрбиәне ололарға ғына түгел, малайҙарҙың, йәш егеттәрҙең дә аңына һалырға кәрәк. Барыһы ла балаларҙың тәрбиәһенән килә. Малайҙарҙы ысын ир-егет итеп тәрбиәләү мәктәбенең традицияларына базыҡланып ҡалды. Бына, мәҫәлән, беҙҙең быуынды бөтөнләй икенсе төрлө тәрбиәләнеләр һәм атайҙарҙың әйткәнен беҙ һаман да тотабыҙ. Беҙҙең осорҙа ҡыҙҙар әрме хеҙмәтен үтмәгән егеттәрҙе әҙәмгә лә һынамай ине. Хәҙер, киреһенсә, хәрби хеҙмәттән ҡасып ҡалған егеттәрҙе герой итеп тигәндәй күрәләр.

Республикала бөгөн, яҡынса самалауымса, меңләп ир-ат балаларына алимент түләүҙән, йәғни балаларын ашатыуҙан ҡасып йөрөй. Был да дөрөҫ түгел, сөнки атай кеше балалары, уларҙың тормош-көнкүреше өсөн яуаплы. Былдай күренештәр нимәнән килә - ғаиләлә балалар тейешле тәрбиә алмай, ҡыҙҙарҙы - буласаҡ әсәй, егеттәрҙе - буласаҡ атай итеп тәрбиәләмәйбеҙ. Бер шулай балаһына алимент түләмәгән ир менән һөйләшәм. "Мине әсәйем яңғыҙ үҫтерҙе бит, әсәһе үҫтерер әле", - ти. Йәғни ул үҙе ниндәй тәрбиә алған - балаһына ла шуны тапшыра. Шуға, ғаилә культын, ғаилә институтын нығытырға, шул йүнәлештә эшләргә кәрәк.

Һәм тағы. Республикала оло йәштәгеләргә мөнәсәбәт һөҙөмтәһенең асыҡ миҫалы - ул ҡарттар йорттарының артыуы. Уларҙа һуңғы осорҙа күҙәтелгән аянысլы хәл-ваҡиғалар барыбыҙҙы ла тетрәндерҙе. Күптән түгел Сибайҙағы ҡарттар йортонда булдым һәм атай-әсәйҙәрен тапшырыу буйынса сират барлыҡҡа килгәнен ишетеп, иҫем китте. Уйлап ҡараһаң, хатта аслыҡ, һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа ла ҡарттар йорттары булмаған, балалары ата-әсәләрен сит ҡулдарға ҡарарға бирмәгән. Нисек кенә булмаһын, ололарға тыуған нигеҙенән айырылып, ҡарт көнөндә ҡайҙалыр сит ерҙә йәшәүе ҡыйын. Минең ул йорттарҙа йәшәгән ололар менән һөйләшкәнем бар. Күпселегенең балалары уҡыған, хәлле кешеләр. Шундағы бер инәй һаман күҙ алдымда. Ике улы бар, береһе Мәскәүҙә йәшәй, икенсеһе Өфөлә вазифалы урында эшләй. Йылына бер тапҡыр ғына килеп китәләр, ти. "Улым менән һөйләш әле, килеп алһын, минә бында бик ҡыйын. Йүнләп сәй ҙә эсеп булмай", - тигәс, Өфөләге улының телефонын алып, шылтыраттым. "Ни өсөн әсәйегеҙҙе ҡарттар йортона бирҙегеҙ?" тип һорағас: "Уның холҡо насар, беҙҙән һорамайынса, туғандарына, ахирәттәренә сығып китергә мөмкин, фәлән-фәсмәтән", - ти. "Үҙең 80 йәшкә еткәс, холҡоң унаҡынан яҡшыраҡ булыр тиһеңме? Һинең бит балаларың, ейәндәрең бар, улар ҙа һине бер саҡ үҙең биргән өлгәлә шундай уҡ йортҡа тапшырырҙар тип уйламайһыңмы?" - тиҙем. Өндәшмәй. "Әсәйеңде барып алыу өсөн күпме ваҡыт кәрәк?" - тием. Ике аҙна һораны, ике аҙнанан теге инәй үҙе шылтыратты, өйҙә рәхәт, тип ҡыуанып, хәбәрен һөйләп бөтә алмай. Был ни өсөн һөйләйем: был осраҡта кеше әсәһен ашатырға, ҡарарға мөмкинлеге булмағанлыҡтан түгел, ә тәрбиә булмағанлыҡтан шундай юлға баҫа.

Ауылдарҙа күп йөрөйөм, унда йәшәүсе йәштәр менән дә йыш осрашам, һөйләшәм. Уларҙы бергә эшләргә, мәҫәлән, суррогат алкоголь, тәбиғәт байлыҡтарын һатыусыларға, башҡа кире күренештәргә ҡаршы бергәләп көрәшергә саҡырам. Беҙгә йәштәрҙе, егеттәрҙе ситкә тибергә түгел, киреһенсә, уларҙы берләштереп, энергияларын матур һәм күркәм эштәргә йүнәлтергә кәрәк. Заман сире булған эскелеккә ҡаршы көрәштә ир-аттың да роле ҙур булырға тейеш. Халыҡ йыйылышын барып һөйләшһә, был кире күренештәр кәмейәсәк. Шулай уҡ бөгөн, әгәр теләк булғанда, халыҡ үҙе хәл иткәндә, хатта суррогатты ғына түгел, магазиндарҙа алкоголь һатыуҙы сикләргә йәки бөтөнләй туҡтатырға мөмкин.



Ошондай хәлдәрҙе ҡарап, күҙәтеп йөрөп, ҡайһы бер ауылдарҙа, айырыуса Әбйәлил, Баймаҡ райондарындағы ир-егеттәр менән һөйләшеп, ошондай йәмәғәт ойошмаһы булдырырға тип ең һыҙғандыҡ та инде.

**▸ Форум ниндәйерәк форматта үтәсәк һәм унда кемдәр ҡатнаша ала?**

- Әлеге ваҡытта теркәлеү бара, форумдың положениеһы һәм ҡатнашырға теләк белдереүселәр өсөн райондарға анкеталар ебәрелде, шулай уҡ социаль селтәрҙәрҙә махсус сәхифә ("Совет мужчин Башкортостана") асылды. Ҡатнашырға теләүселәр анкета тултыра һәм анкета буйынса кем нимә менән шөғөлләнә, кем нимә тураһында сығыш яһарға теләй, шуларҙы аныҡ яҙып ебәрә ала. Заявкалар ҡабул итеү 9 марттан 9 апрелгә тиклем дауам итте.

Күргәҙмәләр ойошторорға ниәт иткәнбеҙ. Ауыл ерҙәрендә эшләп яткан ир-егеттәр өсөн айырым күргәҙмә эшләйәсәк. Әгәр ауыл ерендә эш башлаға теләһән, дәүләт тарафынан ниндәй ярҙам ала алаһың - барлыҡ һорауҙарға яуап буласаҡ, шулай уҡ файҙалы кәңәштәр тупланған буклеттар эшләнәсәк һәм таратыласаҡ. Оҫта ҡуллы, һөнәрмән ир-егеттәр етештергән продукцияларҙан, тауарҙарҙан да күргәҙмәләр эшләйәсәк. Дүрт фекер алышыу майҙансығында күренекле кешеләр сығыш яһаясаҡ һәм һуңынан уларҙың фекерҙәрен тыңлап, үҙебеҙҙең ҡарарға индерәсәкбеҙ.

Шулай уҡ ойошма үҙенең "Ил терәге" тигән миҙалын булдырҙы, ул балалар тәрбиәләүҙә, йәмәғәт, дәүләт эшендә әүҙем ҡатнашҡан иң шәп атайҙарға тапшырыласаҡ.

**▸ Был миҙалға кемдәр дәғүә итә ала?**

- Республика территорияһында даими йәшәгән, һөнәри конкурстарҙа еңеү яулаған, дәүләт һәм йәмәғәт наградалары, премиялары менән бүләкләнгән, 2019-2021 йылдарҙа һөнәри өлкәлә юғары ҡаҙаныштарға өлгәшкән, шулай уҡ ғаиләһендә өс һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән, уларға ғына түгел, ғөмүмән, өлгө булып торған һәм атай исемен лайыҡлы йөрөткән, 18 йәштән 65 йәшкә тиклемге ир-ат дәғүә итә ала. Бының өсөн Ойоштороу комитетына махсус анкета-ғариза тултырып ебәрергә кәрәк. Миҙал ете номинация буйынса тапшырыласаҡ, шулай уҡ жюри айырым ҡатнашыусыларҙы махсус бүләкләү хоҡуғына эйә.

**▸ Бөгөнгө ир-аттың пассивлығы, инициативаһыҙлығы тураһында ла әйтеп үтергә кәрәктер. Бының сәбәптәре нимәлә?**

- Атай тәрбиәһе етмәүҙән киләбыл, тип уйлайым. Атай тәрбиәһе булһа, атаһының балалары өсөн эшләгәнен күрһә, улы ла атай кешенең бурысын аңлап, күреп үҫер ине. Минең атайым, мәҫәлән, ир-егеттең бурысы ғаиләһен ҡарау, балаларын аяҡҡа баҫтырыу, тыуған ерен һаҡлау, тип әйтә торғайны. Шуны беҙгә һеңдергән дә инде. Атай тәрбиәһе менән ҡатын-ҡыҙ тәрбиәһе барыбер айырыла. Әсәй кеше барыбер балаһына йомшағыраҡ була. Минең теләгем: баланы әсәй генә үҫтермәһен, уны ғаиләлә атай менән әсәй бергә тәрбиәләһен.

**▸ Эскелеккә ҡаршы көрәшеүҙе төп бурыстарығыҙҙың береһе тип атайһығыҙ. Әйе, магазиндарҙа акцизлы алкоголде лә һатыуҙы бөтөнләй тыйырға мөмкин, әммә власть органдары быға юл ҡуйырмы, сөнки республика бюджетына билдәле бер өлөш тап ошо алкоголь һатыуҙан инә бит. Әлбиттә, туҡтатыу, тыйыу тураһында пункт законға индергән, һәр муниципалитет был хаҡта үҙе ҡарар сығара, әммә алкоголбистар ҙа тик ятмай, улар ҙа үҙ эшен алып бара һәм көсләрәк, ҡеүәтлерәк алып бара, тип әйтергә мөмкин...**

- Бында муниципалитеттарҙан, халыҡтан күп нәмә тора. Әгәр халыҡ шундай ҡарар сығара икән, тимәк, был территорияла алкоголь һатыу бөтөнләй туҡтатылырға тейеш. Дөрөҫөн әйткәндә, алкоголдең зыяны килеменә ҡарағанда бер нисә тапҡырға күберәк. Беҙҙә медицинаға булған сығымдың 25 проценты алкоголь ҡулланыу, эсеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән сирҙәрҙе дауалауға китә. Бынан тыш, күпме бала етем ҡала, күпме кеше ғәрипләнә, күпме ғаилә тарҡала. Ир-егеттәр ҡороноң маҡсаттарының береһе - ошо мәсьәләләрҙе күтәреп сығып, халыҡтың фекерен белешеп, уларҙы ойоштороп, ауылдарҙа араҡы һатыуҙы бөтөнләй тыйыу. Һәр хәлдә, спиртлы эсемлектәр һатылмаған ауылдар күберәк булырға тейеш.

**▸ Былдай йәмәғәт ойошмаһын ойоштороу тәжрибәһе тағы берәй ерҙә бармы?**

- Әлегә Мәскәүҙәге "Атайҙар берлеге"нән башҡа бер ерҙә лә юҡ. "Беҙҙең был эште башлап ҡарағаныбыҙ булды, әммә ирҙәрҙе күтәреп, ҡуҙғатып, ойоштороп булмай, ваҡытығыҙҙы бушҡа сарыф итәһегеҙ", - тип иҫкәртеүселәр булды. Әлбиттә, ир-атты күтәреүе бик ҡыйын, ә шулай ҙа был эшкә ваҡыт еткәндер, тип уйлайым.

**▸ Башҡортостандың абруйлы, өлгө булырҙай ир-егеттәренең характеристикаһын йәки портретын нисек күҙаллайһығыҙ?**

- Минеңсә, абруйлы ир-егет - ул үҙенең тыуған ерен, илен, тыуған телен яратҡан, халҡын, тыуған илен һөйгән балалар үҫтергән кеше.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ир-егеттәрҙең беренсе форумы, уның маҡсаттары, йүнәлештәре тураһында башланған һөйләшеү тормошобоҙҙоң төрлө яҡтарына барып ҡағылды. Шуныһы мөмкин дә түгелдер, сөнки был проблемалар һәр өйгә, һәр ғаиләгә, һәр кемгә тигәндәй ҡағыла һәм, яман шеш кеүек, йәмғиәттә уның метастазалары тарала бара. Илен, ерен яҡлап яуға күтәрелгән атай-олатайҙар кеүек, ир-аттар бөгөн дә халҡын, телен, ғаиләһен һәм, тәү сиратта, үҙ абруйын һаҡлап, ҡалҡан булып баҫырға ниәтләй. Ниһайәт, Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙар союзы рәйесе Рәшиҙә Солтанованың һәр трибуна артынан: "Ир-аттарҙы һаҡлайыҡ, ир-аттарҙың абруйын күтәрәйек, ир-аттарҙың да йәмәғәт ойошмаһын булдырайыҡ", - тигән саҡырыуы фәрештәләрҙең "амин" тигән сағына тура килде, шикелле. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ иһә яңы башланғысҡа, ир-аттарға юл биреп, кәрәк ваҡытта ышанысլы тыл булырға тейештәр. Хатта бәләкәй малайҙарҙың да юлын ҡыйырға ярамай, тигән бит беҙҙең аҡыллы атай-бабайҙар.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

**Башҡортостан юлдаш каналында икенсе йыл рәттән барған "7 егет" проекты телевизор ҡараусылар араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Төрлө һөнәр эйәләре булған, төрлө яҡтан килгән һәм төрлө ҡарашлы ир-егеттәрҙең бер проектта ҡатнашып, үҙ-ара бәйге тотоп һынашыуы башҡорт телетапшырыуҙары өсөн яңылыҡ та, табыш та булды. Ете егеттең етеһен дә баш ҡалала осратып булманы, шулай ҙа өсәүһен күреп һөйләшеү уңайы тыуҙы. Гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына Айтуған Баисламов, Фәҙел Дәүләтов һәм Алмас Усманов менән мауыҡтырғыс әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# ЕТЕ ЕГЕТ БЕРГӘ КИЛГӘН...



➔ **Егеттәр, һеҙ был проектҡа ниндәй маҡсат менән килдегеҙ? Үҙегеҙ өсөн нимәләр иҫбатларға теләнегеҙме, күренергәме, реклама өсөнмө, әллә башҡа уй-ниәт алып килдеме һеҙҙе әлеге теле-уйынға?**

**Айтуған Баисламов:** Әлбиттә, проекттың маҡсаты халыҡтың милли ир-егет кәсептәрен күрһәтеү һәм пропагандалау, шул шөғөлдә алып барған оҫталар менән таныштырыу. Быныһы - бер, ә икенсеһе уйынсыларҙы ла тамашасы алдына сығарыу. Мин, мәҫәлән, буласаҡ табип һәм бына ошо бәйгелә ҡатнашыуым менән үҙемә киләсәккә ниндәйҙер кимәлдә реклама ла эшләнем. Ваҡытында врачтар һәм уҡытыусылар иң хөрмәтле һөнәрҙәрҙең береһе ине, бөгөн иһә был фекер һүрәнләнә төштө. Шунлыҡтан, мин милләттәштәремә буласаҡ башҡорт табибын төрлө яҡтан да асып күрһәтергә теләнем. Йәғни, табип уҡ та яһап ата ала, атта ла саба, септә лә үрә һәм башҡалар. Дөйөмләп әйткәндә, мин медицинабыҙҙың, медицина хеҙмәткәрҙәренең данын яҡлап килдем һәм ҡатнаштым.

**Фәҙел Дәүләтов:** Мин Өфө сәнғәт институтында белем алам һәм проектҡа йәй көнөмдө буш ятып әрәм итмәйем, тип кенә килеп юлыҡтым. Бесәнде тамамлағайныҡ инде, башҡа мәшәҡәт булманы. Ғариза тултырып ебәргәндә лә алырҙар, уйынға үтеп китермен тип уйламаным. Быны шундай уйныҙ ғына ҡылыҡтан бик ҡыҙыҡлы хәл-вәҡиғалар килеп сыҡты.

**Алмас Усманов:** Проектта мин "ҡарт" егеттәрҙең береһе булдым. Бәйге барғанда егерме алтыла инем, хәҙер тағы ла бер йыл өҫтәлеп өлгөрҙө.

Ысынында проектҡа ғаризаны әсәйем биргән. Минең почтаға ингән дә тултырып ебәргән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың шулай осҡор, етеҙ була алыуы берәүгә лә сер түгел бит. Бына шунан минә яуап килеп төштө - конкурстан үткәнмен. Хәҙер мине әсәкәйем ҡатнашырға өгөтләй башланы. Ә үҙем коронавирус бәләһенән ҡыҫҡартылыуға эләгеп, ваҡытлыса өйҙә инем. Күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәһен, яңы мөхиттә йөрөп килһен, тигәндер инде өйҙәгеләрем. Әлбиттә, ҡаршы булдым! Унан "ауыр артиллерия" - өләсәйем ҡушылды. Өләсәйгә ҡаршы тороп буламы ни? Еңделәр мине икәүләп... Ҡатнаштым.

➔ **Төрлө ғаиләләрҙә үҫкән, төрлө холоҡ-фиғелле ир-егеттәргә оҙайлы ваҡыт бер проектта булыу, йәғни бергә йөрөү, ярышыу, ашау-эсеү, бер өйҙә йәшәү нисегерәк булды? Һыйыша алдығыҙмы? Бәхәстәр сыҡманымы?**

**Фәҙел Дәүләтов:** Ысынында, беҙ тәүге көндә танышып, автобусҡа ултырып юлға сыҡҡанда уҡ күптән таныш кешеләрсә аралаша инек инде. Мин, мәҫәлән, был уйындың ваҡытлыса икәнен иҫтән сығармаҫҡа тырыштым. Һәм үҙем дә артыҡ лидерлыҡ сифаттарына эйә булмағас, көләгәлә ҡалыуҙы, артыҡ алға ынтылмауҙы, башҡаларға конкурентлыҡ тыуҙырмауҙы хуп күрҙем.

**Алмас Усманов:** Проект планы буйынса беҙ ысынлап та конкурентлар инек. Асылда, шулай булырға тейеш ине. Тик беҙҙә ул тойғо ныҡлап уянманы. Рәсәй телеэкрандарындағы проекттарҙағыса, беҙ ирешептәлашып йәки ягалашып китеүгә барып етмәнек. Беренсенән, егеттәрҙә ундай әҙәпһеҙлек булманы, икенсенән, киреһенсә, һәр беребеҙ бер-беребеҙгә юл бирергә тырыштыҡ шикелле. Һәр хәлдә, минә шулай тойолдо.

**Айтуған Баисламов:** Шәхси планда конкурентлыҡ булмаһа ла, хеҙмәттә, кәсеп эштәрендә көс һынашыу булды булыуын. Ир-егеттәргә хас беренселеккә ынтылыу, алдынғы булыу, тәбиғи альфалыҡ тойғолары уяна бит инде бәйгелә. Әгәр ирҙәр араһында бындай ынтылыш булмаһа, улар бер-береһенән көсләрәк, аҡыллыраҡ, булдыҡлыраҡ булырға тырышмаһа, тормош та бөтөнләй икенсе юҫыҡта ағыр ине.

➔ **Ниндәй кәсептәрҙе үҙләштерҙегеҙ? Күңелегеҙгә ятҡандары булдымы? Ниндәй һөнәрҙәр һеҙҙең өсөн яңылыҡ булды йәки был эште тәүгә тотоп ҡараныгыҙ? Һөйләгеҙ әле барыһын да.**

**Айтуған Баисламов:** Бура бурауҙан башлайыҡмы? Бура бурау минә, мәҫәлән, таныш ине. Иң башта балтаны нисек тоторға, бысҡы менән ҡалай эш итергә, тигән кеүек хәүефһеҙлек дәрестәрен үттек. Унан бура бүрәнәләрен әҙерләү, һалыу, ояһына урынлаштырыу тәртиптәрен өйрәндек. Быларҙы күптәребеҙ белә ине һәм хатта балталарҙың бура өсөн ҡыҫҡараҡ һаплы булыуын да, үтмәслеген дә аңғарырлыҡ хәлдә инек. Ауыл егеттәребеҙ бит инде... Тик бында беҙҙең белеү-белмәүҙә түгел эш, ә бына шундай мөһим шөғөлдә иргеткә белеү зарур икәнде һыҙыҡ өҫтөнә алыу ине бурыс. Һәм эш барышында беҙ был кәсеп серҙәре, килеме, төрҙәре хаҡында ла әңгәмәләштек. Һәм быларҙы тамашасы ла ишетте.

**Фәҙел Дәүләтов:** Унан тимерлектә тимер һуғыуға күстек. Тәртешкәләр яһап алдыҡ. Артыҡ ауыр түгел, шул уҡ ваҡытта мәшәҡәтле генә хеҙмәт булды был. Тимер һүҡҡаным булманы, әммә был өлкәне күҙәткәнем бар ине. Ярайһы ғына тәртешкә килтереп сығарҙым, мунсала тора, ҡулланабыҙ.

Бөгөн тимерселек халыҡ араһында популярлаша бара. Тимерҙән бөгөп-нағышлап ҡапҡалар, ҡоймалар, бесэдкалар яһап һаталар, башҡа әйберҙәр ҙә күренә интернетта. Йәғни, тимерселек кәсебе килем килтереүсе, йәшәүгә булышлыҡ итеүсе һөнәр, тип әйтмәксемен.

**Алмас Усманов:** Ысынлап әйткәндә, бына ошо шөғөлдәр менән булышып йөрөү барышында нимәләрер өйрәнеп тә өлгөрөп булмағандыр, әммә әйберҙәрҙең ҡиммәтен, хаҡын белдек. Теге йәки был нәмәнең эш хаҡын, ниндәй хеҙмәт, көс, аҡыл талап итеүен һәм тауар булып формалашҡанға тиклем ниндәй юл үтеүен аңланыҡ. Ашаған белмәй, тураған белә, тигән шикелле, беҙ ҙә ана шул яһаусы, булдырыусы оҫта ролен һынап ҡараныҡ үҙебеҙҙә. Мәҫәлән, быйма баҫыуҙы алайыҡ. Бура бурауға, бесән сабыуға ҡарағанда ла ауырыраҡ эш булып сыҡты. Хатта, әйтәйек, бысраҡ ауыр эш. Йөндөң ҡараһына, сайырына ҡойоноп, эҫелә тонсоғоп, баҫаһың да баҫаһың, әүәләйһең дә әүәләйһең икән. Бөгөн базар кәштәләрендә бер пар бийма мең ярым-ике мең тора икән, был бер ҙә ҡиммәт түгел.

Биймасы тик ҡышҡы айҙарҙа ғына баҫа биймаларын. Ике-өс аҙна өҙлөкһөҙ эшләп ала ла, артабан һатыу менән генә шөғөлләнә ала. Уңайлы бит, тип уйланым. Был кәсепте ҡулың белһә, миҙгелендә яҡшы ғына аҡса эшләп алыу мөмкинлеге бар.

**Фәҙел Дәүләтов:** Артабан септә һуғыу, туҙҙан эшләнә яһау, атта йөрөү, бесән сабыу, ҡурай, сәнгелдәк эшләү һабаҡтарын үҙләштерҙек. Умартала шөғөлләндек, сыбыртҡы иштек, ҡымыҙ, уҡ-ян яһаныҡ. Бында эшләү, башҡарыу һәм кәсепте үҙләштереүҙән тыш, шөғөлдөң фәлсәфәһе, оҫталарҙың яһау манераһы, уйҙары, кемдән өйрәнгән булыуҙары хаҡындағы мәғлүмәттәр ҙә булды. Халыҡ араһындағы ир-егеттәр кәсептәрен асыу, улар хаҡында мөмкин тиклем күберәк мәғлүмәт биреү ине маҡсат.

➔ **Егеттәр, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, әгәр был проекты үҙәк каналдарға сығарғанда, ҡараясаҡтармы? Әллә был бәйге бары тик башҡорттар өсөн генәме? Кемдәр өсөн ҡыҙыҡ булырға мөмкин тапшырыуҙар?**

**Айтуған Баисламов:** Субтитры йәки тәржемә менән булғанда, барыһына ла аңлашылыр ине. Тик проект тулыһынса башҡорт телендә барҙы. Бер яҡтан, был милли проект, икенсе яҡтан, туған телде пропагандалау булып та иҫәпләнә. Шул яҡтарын уйлағанда, барыһы ла дөрөҫ.

**Алмас Усманов:** Тәржемә менән сығарылһа, рус телле халыҡтарға ла ҡыҙыҡ булыр ине тип уйлайым. Башҡа каналдар алыр ине, реклама яҡшыраҡ ҡуйылыр ине. Мәҫәлән, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ кеүек төрки халыҡтарға башҡорт ир-егеттәренең шөғөлдәре таныш та булыр ине, унан ошо ябай ғына кәсептәр буйынса шундай бәйге ойоштороу идеяһы үҙе лә мәртәбәле бит.

**Фәҙел Дәүләтов:** Бөгөнгө көндә милли әҙәбиәтте лә, мәҙәниәтте лә, сәнғәтте лә рус теленән айырып ҡарау ярамай. Йәштәрҙең күбеһе рус телле, нисек кенә тимә, улар рус теле аша уҡый, белә, өйрәнә. Башҡорт телендә генә тип сикләү мөмкинлектәрҙе юғалтыу, үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнап ятып ҡалыу ул. Бында ла милли проект икәнен күрһәтеп, башҡорт телендә алып барып, әммә башҡа телле тамашасыларға ла аңлап ҡарау мөмкинлеген бирергә кәрәктер.

➔ **Проектҡа төрлөгөҙ төрлө сәбәп һәм юл менән килдегеҙ - аңлашыла, ә бына эштәр тамам булғандан һуң ниндәй тәьҫораттар ҡалды? Үҙегеҙгә ниндәйҙер мәғәнә, яңылыҡ таба алдығыҙмы? Нимә кисерҙегеҙ? Аралашаһығыҙмы үҙ-ара?**

**Алмас Усманов:** Аралашып, шылтыратышып, яҙышып торабыҙ. Хатта төрлөбөҙ төрлө өлкә кешеләре һәм проекттан һуң мотлаҡ дуҫлашыу булырға тейеш тимәгәндә лә, араларҙа ниндәйҙер яҡынлыҡ бар. Бергә хеҙмәткә өйрәнеү яҡынайта шул кешеләрҙе барыбер ҙә. Мин был проектта шундай матур, татыу башҡорт мөхитендә йәшәп алдым. Райондарҙа, ауылдарҙа шул хәтлем ихлас ҡаршы алдылар, өҫтәлдәр һый-хөрмәттән һығылып торҙо, кешеләр алсаҡ, эскерһеҙ, ярҙамсыл булды.

**Айтуған Баисламов:** Мин был проектта камера алдында эшләргә, һөйләргә, йәшәргә өйрәндем. Тәүлеккә 14-15 сәғәт төшө инек бит. Иртәнге һигеҙҙән төнгә өҫтәргә тиклем камера алдында йөрөйһең. Башта ҡыйын һымаҡ булһа, һәр ваҡыт хәтерҙә тотһаң, аҙаҡҡа ҡарай был хәл шул хәтлем ғәҙәтигә әйләнә, хатта онотоп китәһең. Унан һуң да төрлө телетапшырыуҙарҙа русса ла, башҡортса ла сығыш яһаным һәм һөйләү телмәрем шаҡтай үҫешкәнен тойҙом. Камера алдында йәшәү миндә үҙ-үҙемә ышаныс тойғоһо тыуҙырҙы. Был үҙенә күрә шәхси күтәрелеш булды.

**Фәҙел Дәүләтов:** Кәсептәр буйынса төбөнә төшөп өйрәнеү, шулар хаҡында ысын оҫталарҙың хәбәрен тыңлау ҡыҙыҡлы булды минә. Артыҡ етдигә һынамай ғына башлаһам да, шул мәғәнәгә инеп киттем тора-бара. Музыкант булыуым сағылыш таптымы, һәр шөғөлдә бер көй, үҙенә генә хас музыка, ритм тойҙом. Дөйөм алғанда, тормоштоң, кешеләрҙең йәшәү, хеҙмәт итеү мәғәнәһен аңланым кеүек.

➔ **Егеттәр, проект еңеүсеһе һәм ат хужаһы Фәҙел Дәүләтов булып сыҡты. Һорау һеҙгә, Айтуған һәм Алмас. Ни өсөн тап Фәҙел еңде? Ҡарап тороуға ул тыйнаҡ, тартыныусан, ипле генә егет. Бик йәш тә. Әйтегеҙ әле, ҡайны яғы менән алдыҙы?**

**Айтуған Баисламов:** Дөйөм күрһәткестәр буйынса, эйе, ул еңде. Тәүге ҡарашҡа илке-һалҡы, артыҡ етди булмағандай тәьҫораттар ҡалдырһа ла, Фәҙел бик ентекле, ныҡыш, төплө егет ул. "Тыйнаҡ кеше" тип әйтәләр бит әле, ул тап шундай. Әммә тыйнаҡ булыу булдыҡһыҙлыҡты аңлатмай. Киреһенсә, баҫылып эшләй, ижад итә алған шәхес. Тауыш-тынһыҙ, күп һөйләмәй эшләй ҙә ҡуя. Ысын ирҙәрсә инде.

**Алмас Усманов:** Ауылдарҙа шундай оҫталар була бит, күҙгә-башҡа ташланмай, ялтырап-күренеп бармай, ә эште ҡойоп ҡуя. Бына шундай кеше булып сыҡты ул Фәҙел. Ҡаҡса ғына, йәш кенә, баҙнатһыҙ ҙа кеүек, ә күңелендә шундай рухи көс, таҫыл, тәбиғи оҫталыҡ ята. Ысын башҡорт холҡо унда. Был егет менән беҙ ғорурланабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ете егеттең өсәүһе менән бына шулай ихлас аралашырға яҙҙы. Уларҙың донъяға ҡарашы, ҡыҙыҡһыныуҙары, проекттағы уйкисерештәре барыһы ла егеттәргә хас ярһыулыҡ, еңеллек, шаянлыҡ менән оҙатылып барҙы һәм тик яҡты тәьҫораттар ғына ҡалдырҙы.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Ярылған ирендәргә тейгән һыу әйтеп бөтөргөһөҙ ләззәт бирҙе. Соҡор өҫтөндә генә ҙур йәйғор торғанын соҡор төбөндә тороусы ир күрмәй ине. Күҙҙәре йомоҡ, хәстәре башҡа ине. Әлеге мәлдә күңелендә ине йәйғор.***




Күк күкрәгән тауыш ишетелгәндәй булды. Салт аяҙ көндә? Һағайып китте ир. Ҡолаҡҡа ғына ишетеләләр. Тик был дөрөҫ ине, иртәнге болоттар артыҡ йыраҡ китеп өлгөрмәгәйне, баяғы ел байраҡтарын болғап, уны был яҡҡа яңынан алып килде шикелле. Уйнапшаярып йөрөгән болоттарҙың елгә асыуы килеп киттеме, күкте күкрәтеп сыбыртҡыһын шартлатып ебәрҙе лә эре тамсылары менән ерҙе ҡайыҙлай башланы. Ир һикереп торҙо ла ике ҡулына йәйеп биштәрен тотто, күҙен йомоп, ауыҙын асып, күккә йөҙөн борҙо. Битенә, күҙенә тейгән тамсылар уны һиҫкәндереп-һиҫкәндереп ебәрҙе. Ярылған ирендәргә тейгән һыу әйтеп бөтөргөһөҙ ләззәт бирҙе. Соҡор өҫтөндә генә ҙур йәйғор торғанын соҡор төбөндә тороусы ир күрмәй ине. Күҙҙәре йомоҡ, хәстәре башҡа ине. Әлеге мәлдә күңелендә ине йәйғор.

Нисек килде, шулай тиҙ генә үтте ямғыр. Ир биштәргә йыйылған һыуҙы ебенә һеңмәҫ борон һемереп эсә һалды. Әлбиттә, һыуһын ҡанманы, шулай ҙа ҡырҡылып торған тамаҡ төбө йомшарып киткәндәй булды. Был ике-өс йотом һыу бер мәл киреһенсә ымһындырғысҡа, саҡырыусыға әйләнде. Бер аҙҙан түҙгеһеҙ булып элеккенән дә нығыраҡ һыу эскеһе килә башланы. Ҡапыл кесе ярау иткеһе килгәндәй булды. Нисә көн буйы бәҙрәфкә бармағанын уйлап алды. Эйе шул, һис кенә лә теләге булманы. Баяғы шешәгә ағыҙҙы. Шешә төбөн генә биләгән һары шыйыҡсаға ҡарап: "Запас торһон әле", - тип йылмайған булды. Соҡор төбө әҙерәк кенә дымланғайны. Балсыҡлы тупраҡтың өҫтөн генә һыпырып алып йомарланы ла, һыуын һығып ҡараны. Сыҡманы. Йомарламын бәрергә уйланы ла, туҡтап ҡалды.

- Яңғыҙ түгелмен дәһә. Бында колобок йәшәгән дә, - тип уға йән өрөрҙәй булып ҡарап ҡатты. Тик йоморо икмәк таралырға ғына тора ине, шуға шешәне ҡулына алды ла... кире ҡуйҙы. Һыламаны. Һуңғараҡ шыйыҡсаның күпкә кәрәгерәк булыуы бар. Кеҫәһенән ҡулъяулығын тартып сығарҙы ла таралып ҡына китер йомғаҡты бар яҡлап бәйләп, бер генә урынын асыҡ ҡалдырҙы.

- Бына күлдәкле лә булдың, әллә яулыҡлымы шул! Тимәк, һин ҡатын-ҡыҙ затынан. - Яңы дуҫын ул ипләп кенә стенаға терәп ҡуйҙы. Ҡойолорға, таралырға торған йомғаҡ Ирҙең күңелен күтәреп ебәрҙе.

- Хәҙер сәй эсербеҙ, йәме. Бер аҙ ял итеп алайыҡ та, - тине лә "ҡурсағына" йөҙөн бороп ятты. Оҙаҡ ятты. Берәй тауыш юҡмы, тип һаҡ ятты.

Бара-бара ҡурсағы уға йылмайғандай тойолдо. "Һе, иркә генә икәнһең үҙең. Миңә оҡшарға тырышаһыңмы? Йылмай-йылмай шулай. Нимә-ә? Мыҫҡыллап йылмаям? Минеме?" - ҡалҡынып ултырҙы ир. Күҙҙәре аларып китте лә, ул бармағын төртөп "ҡурсағына" ҡысҡырҙы:

- Нимә ҡарап ултыраһың, ҡотҡар мине! Ҡотҡар, тим. Ҡара, аҡайып ҡарап тик ултыра. Минең ни ғәйебем бар һинең алда? Һиңә ҡыҙыҡмы, ҡыҙғанысмы? Ҡара, аяғын салып, ҡорһағын ярып йәйелеп ултырған да, минең терелэй ғазапланғанды кинәнеп күҙәтә. Белгең килһә, соҡорға мин хужа! Ана шулай, беҙ бөтәбеҙ ҙә шулай. Кешенең ғазаптарынан кинәнес кисерәбеҙ. Беҙҙе бер генә кеше ҡыҙғана, ғүмере буйы бер генә кеше ярата. Кем тиһеңме? Әсә-әй!

Тынып ҡалды. Ғәйепле төҫ менән тағы "колобок"ҡа баҡты.

- Ә мин һине йәлләйем. Эйе, йәлләйем, сөнки һин кеше түгел, һин - балсыҡ. Йәнһеҙ балсыҡ, - арты менән боролоп ултырҙы ла ер соҡорға тотондо. Ҡапыл нәҙек кенә селәүсен тартып килтереп сығарҙы.

- Oho, бөгөн минең уңышлы көн, һунарға сыҡһам, болан алған булыр инем икән дә.

Селәүсендең ҡойроғонан (әллә башынанмы) тотоп, өҫкә күтәрҙе:

- Һин селәүме? Әсәйең бармы һинең? Һин бөгөн селәү түгел, һин бөгөн... - оҙаҡ ҡына уйлап торҙо, хатта ауыҙҙары шайыҡланып китте. - Һин селәү түгел, һин - тауыҡ бото! - Селәүсенде өҫкә күтәрҙе лә ауыҙы эсенә төшөрөп ебәрҙе. - Фу, ҡалай тәмһе-ееҙ, ләкин туҡлыҡлы-ы.

"Бына соҡор эсендә лә гонаһ ҡылдым, бер йән эйәһенең йәнен ҡыйҙым, - тип уйланы. - Ә ер өҫтөндә нисә миллион, миллиард кеше был ваҡытта гонаһ ҡыла. Уйлаһаң, күҙ аҡайыр!"

Һуҙылып ятып ерҙе тыңларға тотондо.

- Тсс... - Оҙаҡ тыңланы. - Ете миллиард пар аяҡ туҡ-туҡ, туҡ-туҡ ергә баҫып атлай. Эйе, ишетелә: туҡ-туҡ... Ете миллиард, ун дүрт миллиард аяҡ... Нисек инде шунса аяҡтың берәүһе генә булһа ла ошо урынға, ошо, - асырғанып ҡысҡырып ебәргәнен дә һиҙмәй ҡалды, - 10 сутыйлыҡ биләмәгә баҫмай һуң ул, ә? - Иғтибарлап тағы ерҙең тын алышын тыңланы. - Бер кем килмәй, ә үҙҙәре ергә баҫып атлай. Туҡ-туҡ... Тф-еү, аяҡ тиһәм, был йөрәк тибә бит, атайыңдың ҡара мыйығы, әйтәйем. Үҙемдең йөрәк тибә ләһә. - Ике ҡулы менән йөрәген тотоп ултырҙы. - Туҡ-туҡ, тук-тук... Тип, тип, әйҙә, ваҡыт туҡтамаған, һин типкәс, мин йәшәйем әле.

Тамаҡ туйҙы, төшкө ашҡа "корейский" селәүле фирменный блюдо тамам ғына булды, хәҙер бер тапҡыр бейеп алғанда ла мөмкин, тип уйланы. Нисек тә рухты һүндермәҫкә кәрәк. Тик күңеленә ҡапыл ғына бер төрлә моң да, көй ҙә килмәне. Шулай ҙа була икән. Ҡалҡына биргәйне, һыҙлауға түҙә алмай, ыңғырашып йығылып китә яҙҙы.

- Аяҡ, аяҡ, бисәкәй, аяҡ шеште, нишләргә? Хирургҡа алып бар мине, Әминә.

Балағын күтәрә биреп, һыҙлаған балтырын тотҡоланы. Шешкән урынды һыйпап ултырыу нисектер бер ләззәт тә бирә ине. Баҫып ҡараны, тик оҙаҡ та тормай, кире ултырҙы. Юҡ, былай сығып булмаясаҡ. Баяғы ҡаҙаҡ менән аяғын соҡорға тотондо. "Әҙерәк эренен ағыҙмайынса булмайҙыр... Минең урында атай булһа, ни эшләр ине икән? Ул да эрендән таҙартып, спирт менән йыуып, юл япрағы ҡаплар ине. Шеште былай дегәнәк япрағы ла һура инде. Тик уны ҡайҙан табаһың? Була не була, шунһыҙ был соҡорҙо һикереп сығып булмаясаҡ".

Күҙен йомдо, ҡаҙаҡты өҫкә күтәрҙе лә шешкә сәнсте. Аяуһыҙ әсе ҡысҡырыуға соҡорҙан тупраҡтар ҡойолдо, күк көмбәҙе сатнап китте. Аңы томаланып, башын ситкә тайпылдырып ята бирҙе. Ә шештән, тире йыртылып, күп кенә эрен ағып килеп сыҡты.

"А-ах. Күп йыйылған, шайтан. Сереп юҡҡа ла сығырмын бер заман..." Шулай ҙа һыҙлауы кәмене аяғының. Дезинфекция эшләргә ине лә, һыу менән йыуып, бер ус араҡы һөрткәндә... тамаҡты ла сылатҡанда. "Яра боҙолоп китеүе бар, ни эшләргә? Минең урында атайым?.."

Иҫенә төштө. Бер шулай урманда утын әҙерләгәндә һөрләгөп йығылып китеп, Зөбәйер танауын ҡанатҡайны. Ҡанды туҡтатып булмай бит, ҡәһәрең. Танау тишегенә ҡульяулыҡ та тыҡтылар, салҡан да ятып ҡараны. Юҡ. Шунда атаһы танауын ер менән томалағайны. Әлбиттә, тупраҡ аша ҡан һарҡып килеп сыҡты тәүҙә, шунан ысынлап та туҡтаны. "Ерҙән дә таҙа, ерҙән дә иманлы нәмә юҡ донъяла", - тигәйне шул саҡ атаһы.

Тирә-яғындағы санды, ҡатҡан балсыҡлы ерҙе усына йыйҙы ла яраһына һипте. Ер дауаһы килешер, тип балағын төшөрөп ҡуйҙы.

- Атай, хәҙер һин ҡайҙарҙа икән? - тип ҡуйҙы. - Күктән мине ҡарап тораһыңдыр. Язалана, ҡазалана был балам, тип. Нығ һағынам үҙеңде. Һин етмәйһең миңә.

Пенсияға сығып йыл да үтмәне, атаһы ҡапыл ғына биреште. Йүткерҙе, ябыҡты. Үҙе ауырыйым тип һис тә бәлә һалманы, үтер ул, тип йөрөнө. Райондан Өфөгә онкологияға йүнәлтмә бирҙеләр. Тикшеренергә. Яҡшыға өмөтләнгәйнеләр ҙә, тик... табиптар, ике айҙан үлә, тинеләр. "Нисек?" - тип аптыранылар. Аҡса бар, тинеләр. Бер ҙә булмаһа, кредит алырбыҙ, тип уйланылар. Мәскәүҙә дауалап ҡараһаҡ, тигән булдылар. Табип, Израилгә, хет Германияға алып бармайһығыҙмы, хәҙер һуң инде, ике айҙан ғүмере бөтәсәк, үпкәһендәге яман шеш ҡыҙыл үңәскә йәбешкән, тине. Ҡанһыҙ рәүештә. Уйлаһаң, дөрөҫөн әйтмәйенсә лә булмай инде. Ә атаһы улай уҡ нығ ауырыйым тип уйламаны ла, уға әйтмәнеләр. "Тиҙерәк әсәйең янына ҡайтып, унын ҡулынан сәй эсергә ине", - тип ултырҙы, бахыр. Бәлки, һиҙенгәндер ҙә.

- Һиҙенгә-әнде-ер.

Ысынлап та, ике ай ҙа биш көн тигәндә күҙҙәрен мәңгегә йомдо атаһы. Шуларҙы иҫенә төшөрөп ултырҙы Ир.

"Балағыҙ йә яҡынығыҙ яман шеш йә ҡотолғоһоҙ сир менән ауырыймы? Һеҙ бар донъяға... юҡ, тәүҙә үҙегеҙ эстән кисереп, эстән янып, шым булаһығыҙ әле, шунан... ни эшләргә белмәй, бар донъяға яр һалаһығыҙ. "Ул ауырый, һеҙ ярҙам итмәһәгеҙ, ул үләсәк", - тип һәр кемгә, һәр мәрхәмәтле әҙәмгә өмөт менән бағаһығыҙ. Мин дә шулай һәр кемгә, һәр табипҡа, һәр хәҙрәткә шулай ҡарай инем. "Тик атайҙы ҡотҡарығыҙ, ярҙам итегеҙ, берәй нимә эшләгеҙ, йәшәһен ине..." Хәлегеҙгә ингән һәр кемгә һеҙ ышанаһығыҙ, ҡотолоу, ҡотҡарыу юлдарын тик ул ғына беләлер кеүек. - Уйҙарынан тағы ла ярһый барҙы Ир. - Ә уйлаһаң, был ҡайғы килмәҫ борон һеҙ кешелеккә бөтөнләй ышанмай, үҙ көйөгөҙсә көн итә инегеҙ. Хатта Аллаһҡа ла ышанмай, ул - мистика, ул юҡ, тип гонаһлы һүҙҙәр ҙә ысҡындыра инегеҙ. Мин, мәҫәлән, шулай инем. Эшләйем, донъя көтәм. Атай-әсәй мәңге йәшәр кеүек. Ауырлыҡ килгәс, мәсеткә йүгерә һалып барып, доға уҡытып хәйер ҙә бирҙегеҙ. Мин дә шулай иттем. Аллаһ ишетер, хәҙер бөтәһе лә һәйбәт булыр, тип уйлайым. Баҡһаң, нығ, хатта нығ ышанаһығыҙ икән Аллаһҡа ла, унының мәрхәмәтенә лә. Мәсет ишеге ҡайһы яҡтан асылғанын белмәһәгеҙ ҙә. Ҡөрьән ашына доға тыңлар өсөн түгел, тәртибе шулайҙыр, тип һурпа һемерергә барғаныңды онотtonмо?"

- Берәү хәйер биргән икән дә, - тип мыҫҡыллы йылмайҙы.

"Ярай, мәсеткә инелде, доға уҡылды, хәйер һалынды. Ярҙам да иттеләр, ти, кәрәкле операцияға тейешле сумма ла йыйыла, мәрхәмәтле кешеләр күп, йәлләйҙәр, хәлеңә инәләр... - оҙаҡ итеп йомғаҡҡа ҡарап ҡатты Ир. Уйҙарынан уйылғыһы килде. - Тик Хоҙайҙың әмере башҡа, бер ни ярҙам итә алмай. Алма-ай. Эйе, Путин иң шәп табипҡа шылтыратып бойормаймы икән, Хоҙайҙың эше, Әжәлдең уйы башҡа, тәҡдире билдәле, ҡотҡарып булмаясаҡ. Һин бер ни эшләй алмайһың...

Бына мин нисек ошо соҡорҙа, ҡотолғоһоҙ ҡоҙоҡта ятһам, шулай бер нисек тә ҡотҡарып булманы атайҙы. Уға һуҙылған арҡан да, баҫҡыс та ярҙам итә алмай ине. Хоҙай олатай ғына еңеллек бирә алды!" - Атаһын һағынып илағыһы килде, тик ни эшләптер күҙ йәштәре сыҡманы. Үҙенең хәле яман шештән дә былайыраҡ ине шул.

## Өсөнсө төн

Йыраҡта эттәр өргән тауыштар ишетелгәндәй булһа ла, ир торманы ла, ҡолағын да тырпайтманы. Яҙмышына, әлеге хәленә күнеп тик ятты. Күңеле уяу ине. Һыуыҡ теймәһен, тип шешкән аяғын свитеры менән урап ҡуйҙы. Төн кисәге кеүек йылы, күк йөҙө йондоҙло ине. Һаҡал-мыйыҡ баҫып киткән йөҙөн, күҙ төптәрен ҡатып бөткән устары менән йыш һыпырғыланы. Шулай усының да, битенең дә йылыһын тоя ине. Күккә ҡарап ятыу ҙа ялҡыта икән. Ятҡан йә ултырған килеш быяла күҙҙәрен соҡорҙоң төпһөҙ стеналарына төбәп, шым ғына йыр һуҙҙы. Йырҙары ябай, ләкин танһыҡ ине. Ул йырҙарҙы бала сағынан алып иҫкә лә алғаны юҡ. Әле үҙҙәре телгә килде, аңға һеңде.

*" Һәр ваҡыт булһын ҡояш,*
*Һәр ваҡыт булһын һауа,*
*Һәр ваҡыт булһын әсәй,*
*Булайым һәр саҡ мин".*

Йырҙы күңелендә "йырлап" бөткәс, кипкән ирендәрен ҡыймылдатып:

- Булайым һәр саҡ мин. Иҫкә төшөрөп эҙләгән кеше бармы икән? - тип ҡуйҙы.

"Әсәйем генә борсолоп ултырмаһа. Юлға сыҡмай тор, балам, тине, үтенеп тә һораны. Күҙҙәре ниндәй һағышлы ине, ә мин..."

Бая килмәгән моң әле килеп төштөмө күңел соҡорона, ир ҡапыл һикереп торҙо ла бер аяғында һикергеләп бейергә кереште.

*- Баҫ ҡыҙым, Әпипә, һин баҫмаһаң, мин баҫам,*
*Һинең баҫҡан эҙҙәреңә мин дә килтереп баҫам.*

Элеккесә хәл юҡ ине, йығылыуҙан ҡурҡып стенаға тотондо ла тағы ултырҙы. Килгән моң һағыш булып йөрәккә ятты. Йырлағыһы килде. Ҡысҡырып. Тик ауыҙ асылманы, күңел һәм уй ҡапҡалары ғына шар асылды ла, бар донъяға ауаз һалып, моң һәм ғәм тирбәлеп-тирбәлеп таралды.

*Сәскәйҙәрең толом-толом, уны нисек үрәһең?*
*Толом-толом сәстәреңде көн дә килә күрәһем...*

**(Дауамы. Башы 11-14-се һандарҙа).**

*ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ*

**Уҡырға, белем алырға тырышырға, һөнәр үҙләштерергә, юғары уҡыу йортона инергә, ғаилә ҡорорға, балалар үҫтерергә һәм эшләргә, эшләргә, эшләргә... Күптәребеҙ тап ошо формула тип әйтәйекме, планмы ул, шуның буйынса йәшәйбеҙ. Унан ситкә тайпылыусылар ҙа, үҙ тормоштарына яңылыҡ, үҙгәреш индереүселәр ҙә бар, әлбиттә, әммә улар бик аҙ. Бөгөн шундайҙарҙың береһе - Мәләүез районының Һыртлан ауылында тыуып үҫкән, хәҙерге көндә Стәрлетамаҡта йәшәгән һәм эшләгән Илназ ӘСЛӘМОВ тураһында бәйән итмәксебеҙ.**

# ҮҘ ЭШЕ - ХӘЛӘЛ КӨСӨ



Йәш эшҡыуар Илназ Әсләмов.

Илназ бәләкәйҙән тырышлығы менән айырыла, һәр ваҡыт үҙенә ауырыраҡ юлды һайларға, алдына маҡсат ҡуйырға, башлаған эшен еренә еткереп ҡуйырға өйрәнеп үҫә. Мәктәпте тамамлағас, электрик һөнәрен үҙләштерә. Етешһеҙлектәрҙән, аҡсаһыҙлыҡтан арыныу, яҡшы тормош тураһында хыяллана. Тәмәке тартыу, һыра йә башҡа төрлө алкоголле эсемлекте тәмләп ҡарауҙы башына индереп тә ҡарамай, сөнки был ҡылыҡтарҙың аҡсаңды юҡҡа сарыф итеү, елгә осороу икәнен аңлай.

Тиҙҙән Илназ ауылда пилорама аса, сәскәләр һата башлай. Былар барыһы ла уға, әлбиттә, ҙур тәжрибә мәктәбе була. Шунан Илназ Себер тарафтарына сығып китә. Шул уҡ ваҡытта юғары белем тураһында ла онотмай, ситтән тороп уҡыуын дауам итә. Ғаилә ҡороп, Стәрлетамаҡ ҡалаһында төпләнә, ипотекаға фатир алалар. Барыһы ла һәүетемсә бара, эш хаҡы алаһың, бурыстарыңды түләйһең, тағы ла эшкә сығып китәһең. Бер ҡараһаң, барыһы ыңғай ғына барған һымаҡ, әммә ул хыялланыуҙан туҡтамай. Үҙ эшен асыу тураһындағы уй башынан сыҡмай. Тик... эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеү өсөн башланғыс капитал кәрәклеге уны ете ҡат үлсәргә мәжбүр итә.

Ваҡыты еткәс, эш үҙенән-үҙе килеп сыға. Уйламаҫтан. Ҡатын-ҡыҙҙар байрамына кәләшенә... гример көҙгөһө эшләп бирә. Бар күңелен һала был яңы шөғөлгә: яҡтылыҡ лампалары менән ҡаймалай, тартмалы өҫтәле лә бик йәтеш генә килеп сыға. Матурлыҡ салонындағы заманса йыһазың ары торһон! Ҡатынының ҡыуаныуын, туғандарының, дуҫ-иштәренең һоҡланыуын күреү һәм уларҙың да заказ биреүе тап ошо шөғөлгә этәрә лә инде. Тәүҙә яратҡан эше менән фатирында ғына шөғөлләнә, вахтаһынан йөрөп ҡайта ла, йәнә дәртләнеп ағас эшенә тотона. Уның тауарын алырға теләүселәр артҡандан-арта бара. Өлгөрә алмай башлағас, Себерҙәге эшен ҡалдырып, бар көсөн, ваҡытын, күңелен үҙенә оҡшаған ошо шөғөлөнә бағышлай.

Эшҡыуарлыҡ Илназға тормошта үҙ урынын табырға ярҙам итә, ә иң мөһиме, ул эшенән ҡәнәғәт. Цех аса, эшкә кешеләр ала. Заказдар Стәрлетамаҡтан, республиканан ғына түгел, бөтә ил буйынса килә, хатта алыҫ Хабаровск крайына ла оҙатыла уның гримёр көҙгөләре. Белемен дә камиллаштырырға онотмай Илназ. "Аңды тулыһынса үҙгәртеү өсөн күп әҙәбиәт уҡырға тура килде", - ти ул. - Әгәр ҙә кеше эскеселәр йәки ялҡауҙар араһында йәшәй һәм бер нәмә лә үҙгәртергә теләмәй икән, тимәк, улар һымаҡ буласаҡ. Ҡурҡмаҫҡа, уйларға, эҙләргә, тырышырға, табырға һәм йәшәргә кәрәк. Үҙең теләгәнсә, һәр көндөң, үҙ көсөңдөң ҡәҙерен белеп".

Әлбиттә, эшҡыуар булып китеүе еңел түгел. Ауыр ваҡыттар ҙа, Илназдың башланғыстарын хупламаусы хейтерҙар ҙа булмаған түгел, булған. Әммә улар егетте ҡурҡытмай, киреһенсә, алға этәрә, ҡаршылыҡтарҙы еңеп алға барыуы үҙе бер бәхет, тип иҫәпләй ул. Ябай ауыл егетенең тырышып алға, тауға үрмәләүенә, бар күңел йылыһын һалып эшләгән көҙгө, шкаф, өҫтәл һәм башҡа сифатлы йыһаздарына ҡарап ҡыуанырға ғына ҡала.

**Фәниә БИКМӨХӘМӘТОВА.**

*АФАРИН!*

# "НУРБОСТАН" САҠЫРА

**Былтыр Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантына башҡорт телендә тәүге "Нурбостан" анимация сериалы төшөрөлдө. 12 апрелдә, Космонавтика көнөндә, "Тамыр" балалар-үҫмерҙәр телеканалы йәш дуҫтарын "Йырлы донъя Нурбостан" байрамына саҡыра.**




"Күп йылдар хыялланған проектты былтыр ғына тормошҡа ашыра алдыҡ, - ти "Тамыр" телеканалы директоры Гөлназ Ҡолһарина. - Пандемия шарттарында уҙған йылда йәш тамашасылар менән онлайн - Башҡортостан юлдаш телевидениеһының тура эфирында осраштыҡ. Ләкин беҙ "Нурбостан" байрамында йәнле аралашыуҙы, сериалдың үҙенсәлекле геройҙары һәм тарихы менән таныштырыуҙы мөһим тип һанайбыҙ. Анимация сериалының икенсе миҙгелен төшөрөү өсөн дә мөмкинлек булыр тип өмөтләнәбеҙ".

"Нурбостан" анимация сериалының беренсе миҙгеле 12 сериянан тора. Сағыу геройҙар, башҡорт легендалары һәм традициялары буйынса мауыҡтырғыс сюжеттар, юморға бай файҙалы мәғлүмәт, өҫтәл уйыны, социаль селтәрҙә ойошторолған конкурстар, "НУРТИН-банк" уйыны - быларҙың барыһы ла балалар өсөн бик ҡыҙыҡлы. Әлеге ваҡытта "Тамыр" телеканалы командаһы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы саралары барышында "Нурбостан"ды республика районларында һәм Рәсәй төбәктәрендә күрһәтә.

"Йырлы донъя Нурбостан" байрамы "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була. Йәш тамашасыларҙы "Тамыр" телеканалының йыр студияһы, "Сулпылар" конкурсы еңеүселәре һәм республиканың бейеү ансамблдәре ҡатнашлығындағы концерт, шулай уҡ уйындар, бүләк уйнатыу, тәм-томдар көтә.

*АРАЛАШЫУ МӘКТӘБЕ*

# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ - БАШҠОРТТАР!

**Бөйөк шағир Шәйехзада Бабичтың ошо юлдары бөгөн ысын мәғәнәһендә милләтте асылына ҡайтарыусы оран булып яңғырай. Әйтерһең дә, йылдар аша шағир һәр беребеҙҙең күңеленә рух һалырға тырыша. Ысынлап та ошо бер юлға күпме ҡеҙрәт, көс һәм рух һеңгән һәм шулай тип ҡабатлаған һайын иңдәр турайып, умыртҡа бағанаһы нығынып, тыңдар иркенәйеп киткәндәй, ошо юлдар халҡыбыҙ тағы ла быуаттарҙан-быуаттарға данлы, шанлы, даланлы исемен дауам итһен өсөн нимәләр эшләргә этәргәндәй.**

Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты уҡытыусылары һәм хеҙмәткәрҙәренең беренсел профсоюз ойошмаһы Башҡортостан Республикаһының Граждандар йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фонды ярҙамы менән тормошҡа ашырған "Беҙ үҙебеҙ - башҡорттар!" фәнни-белем биреү интернет-платформаһы проекты ла үҙенә мөһим һәм яуаплы бурыстар алған. Улар Башҡортостанда тыуып, яҙмыш ҡушыуы буйынса төрлө тарафтарҙа йәшәгән милләттәштәребеҙ хаҡында бай мәғлүмәт, халҡыбыҙ тарихы, мәҙәниәте, әҙәбиәте һәм бөгөнгөһө хаҡында рухлы яҙмалар, башҡорт теле һәм әҙәбиәте, фольклоры, этнографияһы, башҡорт телен өйрәнергә теләүселәр өсөн видео-дәрестәр, башҡорт милли уйын ҡоралдары, биҙәүестәре һәм башҡа милли йүнәлештәр буйынса оҫталыҡ дәрестәре, арҙаҡлы шәхестәр менән онлайн осрашыуҙар тәҡдим итә. Әммә бөгөнгө мәғлүмәт быуатында иң мөһим ресурс булып нимә тора? Дөрөҫ, мәғлүмәт яҙыусылар, уны таратыусылар һәм уҡыусылар.

Ошоно күҙ уңында тотоп марттың һуңғы көнөндә юғары уҡыу йортонда республиканың милли баҫмалары баш мөхәррирҙәре һәм сит илдәрҙәге башҡорт диаспоралары вәкилдәре менән онлайн-осрашыу ойошторолдо. Сараны асып, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ ректоры Салауат Сәғитов интернет-платформаның эше менән таныштырып үтте, эшләнгән эштәргә байҡау яһаны. Артабан Й. Баласағун исемендәге Ҡырғыҙ милли университеты профессоры, филология фәндәре докторы, дәүләт телдәре буйынса проректор Садиҡ Тиллебаев сәләмләү һүҙҙәре менән бер рәттән, интернет-портал эшен ҡыҙыҡһынып күҙәтеүе, башҡорт теле буйынса онлайн-лекцияларҙы тыңлауы һәм телдәрҙең бик яҡын булыуы, уны бигерәк тә милли аш-һыу атамаларының бер төрлө булыуы аптыратыуын белдерҙе. "Ватандаш", "Аҡбуҙат", "Башҡортостан ҡыҙы", "Ағиҙел" журналдары, "Башҡортостан", "Йәшлек", "Киске Өфө" гәзите баш мөхәррирҙәренең сығышы сарала ҡатнашыусы Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Силәбе өлкәһе вәкилдәренең сығышы менән аралашып барҙы.

Сит ил ҡунаҡтары Башҡортостан менән бәйләнештәре һәм эш тәжрибәһе тураһында һөйләне, үҙ төбәктәрендә башҡорт теле һәм мәҙәниәтен пропагандалау, республика гәзит-журналдары битендә илдәр араһындағы хеҙмәттәшлек һәм дуҫлыҡты сағылдырған мәҡәләләрҙе күрергә, Башҡортостандың алдынғы юғары уҡыу йорттары менән тығыҙ бәйләнеш булдырырға теләүҙәрен белдерҙе. Бөгөн Рәсәй төбәктәрендә һәм сит илдәрҙә лә башҡорт телен өйрәтеү һәм уҡытыу курстары ойоштороло, эшләй. Ҡасандыр үҙе БДПУ-ла белем алып, бөгөн Ҡаҙағстанда эшләп йөрөгән Мерей Кубжан башҡорттарға башҡорт телен өйрәтеүе тураһында һөйләне. Әйткәндәй, проектты тормошҡа ашырыуҙа Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан, Төркиәнең гуманитар вуздары партнер булып тора.

Заман менән бергә атлап, башҡорт телен һәм башҡорттар тураһында мәғлүмәтте юғары технологиялар ярҙамында таратыу, башҡорт телен донъя кимәленә сығарыу йүнәлешендә яңы форматта эш башлаған проектҡа уңыштар ғына теләйһе ҡала.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

✓ *Уларҙың шулай бер-береһенә ыуыҙ ҡоймағына саҡырышҡандарын әле лә иҫләйем. Ҡунаҡҡа барғанда улар һыйыр менән быҙауға ла күстәнәс - бесән, берәй биҙрә һоло, йә булмаһа, ярма тотоп барырҙар ине.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘШЕЛ СӘЙ ЭС

■ Көн һайын йәшел сәй эсеү һөйәктәрҙең тығыҙлығын нығыта. Әгәр ҙә кеше һуңғы 30 йыл эсендә йәшел сәй эсһә, уның һөйәктәре ысынлап та тығыҙ булып сыға. Быны уларҙың яуаптарына һәм медицина карталарына ҡарап билдәләйҙәр. Йәшел сәй эсмәүселәр менән сағыштырғанда, уларҙа һөйәк һыныу осраҡтары 12 процентҡа һирәгерәк осраған. Эксперимент барышында йәшел сәй эсеүселәрҙең ҡайһыларының 30 йыллыҡ тәжрибәһе булмай. Уларҙа бот һөйәге һыныу осраҡтары 30 процентҡа түбәнәйгән. Йәшел сәйҙең быңдай ыңғай тәьҫиренең сәбәбен ғалимдар әлегә аңлата алмай.

■ Тормошта яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшергә теләһәгеҙ, көнөнә йога һәм медитацияға 25 минут бүлегеҙ. Был мейе эшмәкәрлегенә яҡшы йоғонто яһай, хистәрҙе контролдә тоторға ярҙам итә, энергияны арттыра, ти Ватерлоо университеты ғалимдары. Һынауҙарҙа ҡатнашыусы 31 кеше өс төркөмгә бүленгән. Беренсе төркөм 25 минут буйына Хатха-йога, икенсе төркөм медитация менән шөғөлләнгән, ә өсөнсө төркөм китап уҡыған. Тәүге ике төркөмдәге кешеләр үҙ маҡсаттарына иғтибар туплай алған, хистәрен дә контролдә тотҡан, көс-ҡеүәттәре лә ташып торған. Әйткәндәй, Һиндостанда үткәрелгән эксперимент күрһәтеүенсә, тәмәке тартырға теләүселәргә лә йога һәм медитация менән шөғөлләнеү файҙалы. Ошо рәүешле һынауҙарҙа ҡатнашыусы 1021 кешенең 80 проценты яман ғәҙәте менән хушлашҡан.

■ Бөтөн донъяла һатылған һыуҙың 80 процентында пластик бар. Пластик өлөшсәләре эске ағзаларға әләгеп, сәләмәтлекте ҡаҡшатыуы ихтимал. Миннесота университеты тикшеренеүҙәренә ярашлы, иң бысраҡ һыу Америкала. Артабан исемлекте Ливан, Һиндостан дауам итә. Ә иң түбән бысраныу кимәле Франция, Германия, Бөйөк Британияла. Ғалимдар бөтөн донъянан алынған һыу өлгөләрен тикшергән. Күп өлгөләрҙә микропластик - диаметры 5 мм булған пластик табылған. Микропластик составындағы токсик химик матдәләр эсәктәрҙә тарҡала. Бынан тыш, кеше микропластик менән һулай, сөнки ул һауала ла бар. Эске ағзаларға эләккәс, пластикта булған химик матдәләр үпкәнең аҫҡы өлөшөнә, хатта ҡан әйләнешенә барып етә. Ғалимдар пластик һауытта һатылған һыуҙың зарары барлығы тураһында иҫкәртә.

■ Сәләмәтлегеңдә һаҡлайым тиһәң, күберәк көлөгөҙ, тип кәңәш итә табиптар. Көлкө иммунитетты күтәрә, ҡандағы шәкәр кимәлен түбәнәйтә икән. Бәҡтиһәң, көлөүҙең организмға ыңғай йоғонтоһо күптән дәлилләнгән. Мәҫәлән, бер тикшеренеү ваҡытында берҙәй тукланған диабет сирлеләрҙең комедия ҡараған төркөмөндә шунда уҡ үҙгәрештәр булған, уларҙың ҡанында шәкәр кимәле төшкән. Көлөү - ауыртыуҙы ла баҫа. Әйткәндәй, һалҡын тейҙереп, ауырып ятыусыларға ла көлөп алыу файҙалы. Көлгән саҡта һулыш алыу оҙона, ә тын сығарыу ҡыҫҡара, әммә йышая. Был үҙенә күрә тын алыу юлдарына гимнастика булып тора. Бынан тыш, көлөү йөрәк тибеше йышлығын ҡыҫҡарта, ҡан тамырҙарын киңәйтә, иммуноглобулин бүленеп сығыуын арттыра, былар барыһы ла иммунитетҡа яҡшы тәьҫир итә.

■ Бөгөн балалар араһында һимеҙлек йыш осрай. Ғалимдар быныӊ сәбәптәрен эҙләй. Дьюка университеты белгестәре май ҡатламдарының артыуына йорттағы туҙан да тәьҫир итә ала, ти. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, баланың организмына уртаса 60-тан алып 100 миллиграмға тиклем туҙан эләгә. Туҙан һулыш алғанда инә, бала уны уйынсыҡтарын йәки башҡа предметтарҙы ялағанда ла эләктерә. Ғалимдар туҙандың 194 өлгөһөн йыйып, уларҙың 100-ҙән ашыуын тикшергән. Туҙан составында булған матдәләрҙең өстән ике өлөшө май күҙәнәктәре барлыҡҡа килеүҙе арттыра, ә яртыһынан күбеһе - ошо күҙәнәктәрҙең артыуына килтерә. Асыҡланыуынса, көнкүрештә ҡулланылған таҙартыусы саралар, буяуҙар, косметиканың зарарлы матдәләре туҙан менән бергә организмға эләгә.

ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# ҺЫЙЫРЫМ БУЛҺЫН ТҮЛЛЕ,

## өҫтәлем булһын - һыйлы



**Иш, бол килтереп, һыйырҙар быҙаулай башлауы ауыл халҡы өсөн иң күңелле мәл ул. Сөнки һыйыр һөтөнән ниндәй генә ризыҡтар әҙерләнмәй! Ҡаймағы ла, эремсеге лә, ҡатығы ла, ҡорото ла... Һәм тағы. Һыйыр быҙаулағас та ыуыҙҙан ҡоймаҡ ҡойоп, күршетирәне һыйлау - башҡорттарҙың борондан ҡалған йолаһы бөгөн дә йәшәй. Ыуыҙ һыйыр быҙаулағандың тәүге өс көнөндә генә була. Ул һөттән ныҡ айырыла. Төрлө витаминдарға бай. Ҡуйы, майлы, һарғылт төҫтә һәм әскелтем тәмле. Ыуыҙ һөтөнән әҙерләргә мөмкин булған ризыҡтар байтаҡ. Иң билдәлеһе, моғайын да, ҡоймаҡтыр.**

### Ыуыҙ ҡоймағын нисек әҙерләйҙәр?

Ҡоймаҡ өсөн бер литр ыуыҙ һөтөнә ярты балғалаҡ шәкәр, ярты балғалаҡ тоҙ, кәрәкле ҡуйылыҡҡа еткәнсе он алына. Ҡамыр ҡаты булмаһын өсөн бер аҙ һөт йәки ҡайнаған һыу, бер ҡалаҡтай көнбағыш майы ҡушырға мөмкин.

### Ыуыҙ һөтөнән аш

Тәүҙә һауған һөттө һөҙәһең һәм бер нисә сәғәт һалҡында тотаһың. Һуңынан уны һүлпән генә утҡа ҡайнатырға ҡуяһың. Ыуыҙ ҡайнап сыҡҡас, ике (ҡаты һәм шыйыҡ) өлөшкә бүленә. Ҡатыһы - ыуыҙ, шыйыҡы - ыуыҙ һүле була. Ыуыҙҙы һөҙөп алып һарҡыталар һәм ҡатыралар. Һүлендә аш әҙерләйҙәр. Енелсә ҡыҙҙырылған һуған, тәмләткестәр ҡушалар, һурпа ҡайнап сығыу менән һалма һалына. Өлөштәргә бүленгән ыуыҙҙы бер нисә минут бешереп алалар. Өҫтәлгә әҙер ыуыҙ ашын ҡорот йәки ҡатыҡ менән бирәләр.

### Ыуыҙ һөтөнән сыр

Кемгә ниндәй тәмләткестәр оҡшай, ыуыҙға шуны ҡушырға була: һарымһаҡ, борос, укроп, йөҙөм, күрәгә, ҡара емеш. Уларҙың барыһын да бергә һалып, яҡшы ғына итеп болғатырға кәрәк. Бейек эмаль кәстрүл алып, массаны шунда ҡояһың да, кәстрүлде духовкаға йә мейескә ултыртаһың. Ошондай ысул менән әҙерләнгән сыр оҙаҡ һаҡлана, боҙолмай. Тәмле лә, туҡлыҡлы ла.

### Шундай хәтирәләр һаҡлана

***Гүзәл Монасипова, Ярат ауылы:*** Иртәнсәк танауҙы тәмле генә май еҫе ҡытыҡлағанға уяныпн китәһең... Өйҙә ҡоймаҡ еҫе таралған - ыуыҙ ҡоймағы! Кисә кискә табан һыйырыбыҙ быҙаулаған бит. Бит-ҡулды йыуа һалаһың да, мейес янына йүнәләһең. Ә унда... ҡып-ҡыҙыл, эре-эре ҡуҙҙар емелдәй, өҫтөндәге табала ҡоймаҡ шыжлай... Әсәйемдең ике бите лә ҡып-ҡыҙыл, үҙе эстән генә ниндәйҙер йыр мөңгөрләй, беҙгә, 5 балаһына, күҙҙәре йылмайып баға... Ҡоймаҡты алдыр (табаҡ) өймәле булғансы бешерә лә: "Бар, атайығыҙҙы сәйгә саҡырығыҙ..." - ти.

Боҫрап ҡайнап ултырған самауырҙы урындыҡҡа ашъяулыҡ өҫтөндәге батмусҡа ултыртабыҙ ҙа, әсәйебеҙҙең ҡоймаҡтарҙы майлап бөтөүен сабыр ғына көтәбеҙ. Эҫе табала эре киҫәкле май тиҙ генә ирей. Әсәйем йәһәт кенә һәр ҡоймаҡты шул майға тығып, өйөп бара... Их, шул майы ағып торған ҡоймаҡтарҙың тәмлелеге!.. Йылы бәреп торған мейес эргәһендә урындыҡта ҡумаҡләшеп сәй эсеү кинәнестәре, атай менән әсәйемдең ягымлы йөҙҙәре... Һуңынан әсәйем тәрилкәгә ҡоймаҡ өйә лә: "Бар, ҡыҙым, күршеләр ҙә ыуыҙ ҡоймағынан ауыҙ итһен", - ти. Ҡыуаныстан ауыҙ йырылып китә лә, күршеләргә йүгерәм...

***Айһылыу Үлйәбаева, Ишмырҙа ауылы:*** Элегерәк һыйырҙар бер ваҡыттараҡ, ҡыш сыҡҡансы быҙаулап бөтөр булған бит. Өләсәйҙәр шул осорҙа ыуыҙ ҡоймағына сәйгә йөрөшкән. Уларҙың шулай бер-береһенә ыуыҙ ҡоймағына саҡырышҡандарын әле лә иҫләйем. Ҡунаҡҡа барғанда улар һыйыр менән быҙауға ла күстәнәс - бесән, берәй биҙрә һоло, йә булмаһа, ярма тотоп барырҙар ине. Сәй табынында ла таҡмаҡтар әйтешеп, йырлашып ултыра торғайнылар.

***Рәшиҙә Фәттәхова, Аҡморон ауылы:*** Аҡморонда халҡыбыҙҙың матур йолаһы "Ыуыҙ ҡоймағы" байрамын йыл да уҙғарабыҙ. Ағинәйҙәр менән берлектә мәктәп, балалар баҡсаһына барабыҙ. Балаларға халыҡ йолаһы нигеҙендә халҡыбыҙҙың тарихын өйрәтәбеҙ. Байрам һуңынан уларҙы яңы ғына бешкән ҡоймаҡ менән һыйлайбыҙ. "Ыуыҙ ҡоймағы"нан ҡарттар йортонда тәрбиәләнеүселәрҙе лә ситтә ҡалдырмайбыҙ. Ыуыҙ ҡоймағы менән һыйлаусылар рәхмәт әйтеп, "Ағы ла үҙегеҙгә булһын, түле лә үҙегеҙгә булһын", тигән теләктәрен еткерә. Йәғни, көткән малығыҙҙың һөтө-ҡаймағы ла, һыйырығыҙҙың алдағы тоҡомо ла ҡотло булһын, үҙегеҙгә яҙһын, тигән тәрән мәғәнә һалына был теләккә.

**Лилиә ТАКАЕВА.**
**Баймаҡ районы.**

ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ

# ШӘШКЕ



**Йыл һайын ҡыш башланыу менән Башҡортостан ҡурсаулығында шәшке иҫәбен алыу эштәре башҡарыла. Быйыл 62 шәшке иҫәпләнгән. Был йәнлекте нисек һанайҙар икән - был һорау, әлбиттә, күптәргә ҡыҙыҡтыр.**

Был ғилми эш шәшкенең йәшәү рәүешенә бәйле: ул йыл әйләнәһенә тип әйтерлек һыу эргәһендә йәшәй. Шәп сума, шәп йөҙә. Хатта һыу төбөндә ятҡан нәмәләргә тотоноп, һыу төбөнән атлап та китә ала. Ашағаны балыҡ та баҡа, тигәндәй. Тура килһә, сысҡанды, ҡыҫаланы, селәүҙе, ерҙә йөмортҡа баҫып ултырған ҡошто, уларҙың йөмортҡаларын да ашай. Урыҫса исеме - норка. Ҡайһы берәүҙәр был исемдә шәшкенең өңдә (нора) йәшәүенә бәйләй. Шулай ҙа был фараз дөрөҫлөккә тап килмәйҙер. Улайға китһә, өңдә бер шәшке генә йәшәйме? Был исем, моғайын, нырять (сумыу) һүҙенә бәйлелер. Был фараз менән күптәр килешәләр.

Ҡыш көнө лә ташламай шәшке йылға буйҙарын. Йылға буйында ҡолаған ағас, ереле-ваҡлы дүңгәктәр, йылғаның ярҙары текә булһа, бигерәк шәп. Ә ҡурсаулыҡтың күпселек йылғалары тап шулай. Яҙғыһын шашып аҡҡан ҡар һыуҙары уның ярҙарын йыуа. Ҡыш көнө йәйелеп киткән шәре ағастарҙың йәйлап сереүенә, тора-бара йығылыуына булышлыҡ итә. Йәй көнө йылға күпкә кәмей төшә, һөҙөмтәлә һыуһыҙ ҡалған үҙәндәрҙә дүң-

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

**Мосолмандар көтөп алған изге Рамаҙан айы башлана. Был ай - ураҙа тотоу, тәүбә ҡылыу, төнгө намаҙҙар уҡыу, саҙаҡа таратыу, Ҡөрьән-Кәримде уҡыу мәле. Был айҙа үҙен мосолман тип һанаған һәр кеше мотлаҡ рәүештә ураҙа тоторға тейеш. Ауырлы йә имеҙеүсе ҡатындарға, сәфәрҙә булғандарға, сирлеләргә ураҙанан тыйылыу рөхсәт ителә. Рамаҙан айындағы ураҙа еренә еткереп тотолғанда ғына камил һанала һәм Аллаһ тарафынан ҡабул ителә.**

# ИЗГЕ РАМАҘАН БАШЛАНА



Мосолмандар был изге айҙы көтөп ала. Мысырҙа, мәҫәлән, урамдар төрлөсә биҙәлә, йорт-тирә яғы таҙартыла, яңы йыһаздар һатып алына, хәленән килмәгәндәр яңы балаҫ алып булһа ла түшәргә тырыша. Рамаҙан айы килеп еткәс инде Мысыр урамдарында ифтар (ауыҙ астырыр) өсөн махсус палаткалар ҡуйыла. Унда теләгән кеше инеп ашап сыға ала. Рамаҙан айы шулай уҡ төнгө намаҙҙарҙы көсәйтеү менән дә билдәле. Был айҙа йәстү намаҙынан һуң тәрәүих намаҙы уҡыла.

Күптәр ураҙа тотоу ҡояш ҡалҡҡандан алып байығанға тиклем ашау-эсеүҙән тыйылыу ғына тип уйлап, яңылыша. Ураҙа тотоуҙың маҡсаты күпкә бөйөгөрәк. Төп маҡсат - тәҡүәлеккә ирешеү, тимәк, Аллаһтан ҡурҡыу, Уның ризалығына ынтылыу.

Иң тәү сиратта Рамаҙан айы тәүбәне яңыртыу, көсәйтеү айы булып тора. Был айҙың Рамаҙан атамаһына "гонаһтарҙың янып бөтөүе" тигән мәғәнә һалынған. Ошо изге айҙа мосолман гонаһтары өсөн тәүбә ҡылып, изге эштәр эшләп, улардан арына. Гонаһһыҙ кеше булмай. Гонаһтарҙан арыныуҙың иң яҡшы юлы - ихлас күңелдән тәүбә ҡылыу. Сөнки: "Ысынлап та, Аллаһ тәүбә ҡылыусыларҙы ярата" ("Әл-Бәҡара", 222).

Ураҙа тотоуҙың киләһе маҡсаты - ихтыяр көсөн ныҒытыу. Рамаҙан айында кеше ашап-эсеүҙән тыйылып, күберәк изге эштәр эшләргә ынтылып, насар эштәрҙән ары торорға тырышып, ихтыяр көсөн нығыта. Рух ныҡлығы, ихтыяр көсө күп ауырлыҡтарҙы йырып сығырға ярҙам итә, күңел төшөнкөлөгөнән аралай. Юҡҡамы ни, зәғиф, ауырыу кешеләр һау-сәләмәт кешеләргә ҡарағанда күпкә рухи яҡтан көслөрәк, маҡсаттарына ынтылыусаныраҡ була. Тимәк, улар булғанына шөкөр итә белә.

Рамаҙан айында әҙәм балаһы шулай уҡ ихласлыҡҡа өйрәнә. Сөнки ураҙа тотоуҙың төп шарты - ихлас ниәт. Беҙ ураҙаны ихлас күңелдән тик Аллаһ Тәғәлә өсөн генә тоторға, ошо ниәтебеҙҙе көн һайын яңыртып торорға тейешбеҙ. Бөтә ғәмәлдәрҙең дә ихлас күңелдән эшләнеүе - уларҙың ҡабул булыуы өсөн төп шарт

Ураҙа тотҡан кеше гонаһтарҙан ары торорға, нәфсеһен тыйырға, тыйылған ғәмәлдәрҙән йөҙ борорға тырыша. Уға мотлаҡ телен насар һүҙ һөйләүҙән тыйырға кәрәк. Сөнки ғәйбәт һүҙ һөйләү, алдашыу ураҙаны боҙа. Аллаһ Тәғәләгә былдай кешенең ашап-эсеүҙән тыйылыуы кәрәкмәй. Ураҙа тотаһың икән, тимәк, бөтә тән ағзаларыңды ла гонаһтан араларға тейешһең.

Тимәк, ураҙа тотоуҙың тағы бер маҡсаты - әхләғыңды үҙгәртеү. Рамаҙан айында гонаһтарҙан ары торорға тырышыу менән бер рәттән, әҙәбең өҫтөндә лә эшләргә кәрәк. Был изге айҙа талашып, әрләшеп йөрөү килешмәй. Кем дә булһа һине битәрләргә тотона, талашырға сәбәп эҙләй икән, Бәйғәмбәребеҙ өйрәткәнсә: "Мин - ураҙала", - тип әйтергә кәрәк.

Ашап-эсеүҙән, ғәйбәт һүҙ һөйләүҙән, әрепләшеүҙән баш тартыу өсөн ихтыяр көсөнән тыш, ҙур түҙемлек тә кәрәк. Тимәк, ураҙа тотоуҙың тағы бер маҡсаты - сабырлыҡҡа өйрәнеү. Аллаһ сабырҙарҙы ярата. Ҡыйын саҡтарҙа ла сабырлыҡ күрһәтә белергә кәрәк. Тейешенсә сабырлыҡ күрһәтеүселәргә әжер-сауаптар ҡаралған: "Ысынлап та, сабыр булғандарға әжерҙәре тулыһынса иҫәпһеҙ-һанһыҙ бирелер" ("Әз-Зумар", 39).

Ошо маҡсаттарҙың барыһынан да сығып, дөйөмләштереп әйткәндә, ураҙа тотоу - ул Раббыбыҙға буйһонорға ла өйрәнеү. Әммә был буйһоноуыбыҙ ураҙа тотҡан ваҡытта ғына түгел, даими булырға тейеш. Изге Рамаҙан айынан алда ошо маҡсаттарҙы тағы бер ҡат иҫкә төшөрөп, ниәтебеҙҙе дөрөҫләргә онотмаһаҡ ине.

Рамаҙан айының ҡасан башланыуына килгәндә инде, беҙ уны Бәйғәмбәребеҙ өйрәткәнсә, айға ҡарап беләбеҙ. Тимәк, Шәғбән айының 29-сы йәки 30-сы көнөндә яңы айҙың тыуыуын күҙәтергә кәрәк. Яңы ай тыуа икән - Рамаҙан айы башланды, ураҙаға инергә ваҡыт, тигән һүҙ. Ә инде бер йыл алдан астрономик календарь төҙөп, шуның буйынса ураҙаны башлау дөрөҫ түгел. Сөнки ҡайһы саҡта яңылышлыҡ китергә мөмкин. Яңы айҙың ҡасан башланырын бары Аллаһ ҡына белә. Уны алдан уҡ билдәләп ҡуйыу мөмкин түгел.

**Нәркәс АЛСЫНБАЕВА.**

---

гәктәр барлыҡҡа килә. Шәшкегә былдай йылғала көн итеүе бигерәк хәрриәт. Ә шулай ҙа шәшкенең көн итеүендә бер үҙенсәлек бар - ул ҡыш осоронда йылғаның туңмаған өлөшөндә йәшәй ала. Иҫәп-хисап эштәре тап ошо үҙенсәлеккә бәйле. Ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәре ҡурсаулыҡ йылғалары буйлап үтә һәм шәшке эҙҙәрен иҫәпләй. Сама менән бер шәшке 250-300 м арауыҡты биләй һәм шунда йәшәй. Шәшке һаны уның ошо биләмәләр һанына ҡарап асыҡлана.

Иҫәп эшендә тағы бер үҙенсәлек бар - иҫәп эштәрен башҡарғанда ҡарҙың тәрәнлеге 15 см-ҙан артмаҫҡа тейеш. Эш шунда, шәшке йәки ҡарҙа ғына шәп йөрөй ала. Тәбиғәт уға оҙон, көслө һәм һығылмалы буй биргән. Ә бына аяҡтарға оҙонлоҡ бирергә йәлләгән. Улары ҡыҫҡа ғына. Дүрт ҡарыш кәүҙәгә ни бары ярты ҡарыш аяҡ (Боронғо үлсәмде иҫәбеҙгә төшөрөп китәйек әле. Бер ҡарыш - ул баш бармаҡ менән һүк бармаҡты яҙып тотҡан ара. Бер ҡарыш сама менән 10-12 см тирәһе була). Шуға күрә ҡар тәрәнлеге 15 см-ҙан артып китте икән, шәшке ул ҡарҙан йөрөй алмай. Дөрөҫөрәге, аяҡтар ергә буйламай. Ә шәшке барыбер яйын таба. Ҡар тәрәнәйеп китһә, ул ҡар өҫтөнән йөрөп ыҙаламай, ә ҡар аҫтында өң-юлдар эшләп ала. Етмәһә, ҡолаған ағасы, дүңгәге, текә яры булған йылғаларҙа ҡыуышлыҡтар күп була. Хәҙер шәшкегә ҡар өҫтөнә сығыу артыҡ кәрәкмәй. Ул ҡар аҫтындағы өң-юлдар буйлап йөрөп көн итә башлай. Баяғы норка исеме ошоға бәйле инде.

Бына ошондай матур урман йәнлеге көн итә беҙҙә. Әммә күңелдә ҡырып торған бер урын бар - бөгөн беҙҙә үҙебеҙҙең шәшке көн итмәй. Ваҡытында барҙың ҡәҙерен белмәйбеҙ шул беҙ. Ә бөлә көтмәгән ерҙән килә. Бынан йөҙ йыл самаһы элек ҡайһы бер әҙәмдәр Европаға Американан шәшке алып килергә ҡарар итә. Нәфсе ҡоторта уларҙы. Йәнәһе лә, Америка шәшкеһе кәүҙәлерәк, шуға күрә уның тиреһе лә ҙурыраҡ. Етмәһә, тип уйлаған улар, был осраҡта шәшке артынан урман буйлап сабып йөрөргә кәрәкмәй. Сөнки алып килгән шәшкеләрҙе махсус рәүештә эшләнгән ситлектәрҙә аҫрап була! Шулай уйлаған кеше. Һәм шулай эшләгән дә. Ысынлап та, тәү осорҙа кешенең уйы тулыһынса бойомға ашҡан. Ситлектәрҙә аҫралған шәшкеләр мул табыш килтергән. Әллә кеше бер аҙға уяулығын юғалтҡан, әллә Америка шәшкеһе йылғыр булып сыҡҡан, әммә бер мәл был йәнлектәр ситлектән сығып ҡасҡан! Бөтәһе лә түгел, әлбиттә. Ниндәйҙер бер өлөшө. Ярай, артыҡ зыян юҡ, тип артыҡ бошонмаған кеше. Үлеп бөтәрҙәр әле, тип ҡул һелтәп ҡуйған. Әммә тәбиғәткә ҡасҡан шәшкеләр үтә әрһеҙ булып сыҡҡан. Улар Европа урмандарына бик тиҙ яраҡлашҡан һәм үтә әүҙем үрсей башлаған. Бөгөн улар шул хәтлем ныҡ үрсегән, хатта үҙенән бәләкәйерәк һәм көсһөҙөрәк булған урындағы шәшкене ҡыҫырыҡлап сығара башлаған. Бына шулай, бөгөн Европаның күп урмандарында Америка шәшкеһе көн итә. Кемдер, былдай хәүеф беҙгә янамай, Европа ҡайҙа ла Башҡортостан ҡайҙа, тип битараф ҡына уйлап ҡуйыр. Әммә беҙҙә лә хәл мөшкөл. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, бөгөн ҡурсаулыҡ урмандарында Америка шәшкеһе көн итә. Үҙебеҙҙең шәшке әллә һаҡланып ҡалған, әллә юҡ, быны әйтеүе ҡыйын.

Бөгөн ҡурсаулыҡ өсөн урындағы шәшкеләр һанын асыҡлау һәм уларҙы һаҡлап алып ҡалыу буйынса барлыҡ мөмкинлектәрҙе ҡулланыу мөһим.

**Әғләм ШӘРИПОВ,**
**Башҡортостан дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығының төп ғилми хеҙмәткәре.**

---

УҢЫШ ҠАҘАН



# КӨТӨҮ ЗАКОНЫ

Психологик тикшеренеүҙәр, уңыштың төп сәбәбе кешенең уға иҫәп тотоуына ҡайтып ҡала, тип иҫбатлай. Уңышҡа өлгәшкән спортсылар еңеүгә иҫәп тотҡан. Мәҫәлән, Мөхәммәт Али, ғәҙәттә, "әгәр мин алышта еңһәм" тип түгел, ә "алышта еңгәс" тип белдереп, үҙенең еңеүен алдан раҫлаған. Бына үҙ-үҙеңә ниндәй ышаныс!

Аристотель: "Нимәгә иҫәп тотаһың, шуға эйә булаһың", - тигән. Көтөү ул ҙур көскә эйә, шуға күрә уны контролдә тотоу бик мөһим. Тормошонда фекерләүҙең кире схемалары өҫтөнлөк итеүенә юл ҡуйһаң, кире һөҙөмтәләр көтөү һинең ғәҙәтеңә инеп китә. Ышанаһыңмы-юҡмы, кире һөҙөмтәләр көтөү һине ҡартайта ла. Һин, билдәле бер йәшкә еткәс, үҙеңдә өлкәнерәк итеп тойорға программалаштыраһың.

Шуға ярашлы, холоҡ үҙенсәлектәрен, кейем стилен һәм өлкән йәштең бөтә "симптомдарын" үҙләштерәһең. Филдәр, мәҫәлән, үҙенең үлер ваҡытын алдан белеү инстинктына эйә. Үлер сәғәте еткәнен тойоп, улар фил зыяратына һуңғы сәйәхәткә юл ала. Ҡайһы бер кешеләр ҙә шулай эшләй.

Үҙ-үҙеңә тулы ышаныс ыңғай көтөү аша үҫешә. Теләһә ниндәй ҡаршылыҡты еңә алырлыҡ эске Көскә эйә булыуыңды белеп һәм раҫлап, һин үҙеңдә ыңғай көтөү булдыраһың. Күптәр үҙенең үткәнен һағынып өнсоусан. Улар иҫке хаттарҙы, альбомдарҙы, төрлө ваҡ-төйәкте, гәзиттән ҡырҡып алынған мәҡәләләрҙе һаҡлай.

Әгәр һин уңышҡа өлгәшергә теләһәң, уйҙарың киләсәккә йүнәлтелергә, ә иҫке образдар һин башҡарып сығырға теләгән эштәге образдар менән алмаштырылырға тейеш. Иҫтәлектәргә бик бирелергә теләһәң, бала саҡтан йәки йәшлегеңдән иң матур һәм тормошҡа ашҡан көтөүҙәрҙе хәтереңдә яңыртырға тырыш.

Киләсәккә ышаныс менән ҡара һәм энтузиазм менән эш ит. Ыңғай һөҙөмтәгә иҫәп тотһаң, Көтөү законы буйынса, магнит кеүек, уны үҙеңә йәлеп итәсәкһең. Әгәр аҡылыңды иң яҡшы йәшәү шарттарына көйләһәң, бел - улар һиңә яҡынлаша. Бөгөнгө көтөүҙәрең иртәгә тормошҡа ашасаҡ.

Нимә эшләргә йыйыныуыңды һөйләүгә ваҡыт әрәм итмә. Был тирә-йүндәгеләрҙең хуплауын эҙләү менән бер. Үҙ маҡсаттарыңды асып һалып, һин, бер яҡтан, уға өлгәшеү өсөн кәрәкле ҡиммәт энергияңды таратаһың, икенсе яҡтан, һиңә контроллек итергә теләгәндәрҙең ҡаршылығын үҙеңә йәлеп итәһең.

Күп кешеләргә үҙ-үҙен түбән баһалау һәм үҙе хаҡында насар фекер хас. Уларға кемдәрҙер эште үҙенә ҡарағанда яҡшыраҡ башҡарып сығыуы оҡшамай. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп ҡына ла, уй-пландарыңды кешегә асып һалмау үҙең өсөн отошло булыуын аңла.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Ҡулығыҙға тығыҙ туҡыма йәки таҫтамал алып, һыуын һығырға теләгән кеүек хәрәкәт эшләгеҙ. Бөтә мускулдар эшләһен өсөн бөтә көс менән һығығыҙ. Урап бөткәс, ҡапыл ебәрегеҙ, таҫтамалды иҙәнгә бәрегеҙ.***



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 16 АПРЕЛЬ - БАШҠОРТОСТАН ХАЛЫҠТАРЫНЫҢ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**14-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Биишева. Әҙрәс. Һағыҙаҡ. Бүлә. Лоцман. Боккаччо. Уҫаҡ. Башлыҡ. Ленин. Ҡороҡ. Милләт. Дарман. Вертолет. Ниәт. Ваба. Лувр. Оҫта. Әҙип. Азов.

**Вертикаль буйынса:** Бөрлөгән. Бикчәнтәев. Надир. Һә. Чук. Телмәр. Иҫәнғолов. Европа. Ҙур. Нота. Айсыҡлау. Мырҙаҡаев. Шүлгән. Мәҡәл. Нотоҡ. Торт.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**12 апрель "50+1" Т. Сәйфуллин ис. БР Дәүләт академия хор капеллаһы** концерты. 6+

**13 апрель Есенинға арналған** музыкаль-әҙәби кисә. 6+

**16 апрель "Даланға - 20!"** концерт. 6+

**18 апрель "Дорогою добра"** музыкаль-әкиәти сәйәхәт. 15.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**16 апрель "М. Карим. Близкий горизонт"** (В. Аношкин). 19.00 0+

**17 апрель "Слоненок"** (Р. Киплинг). 12.00, 14.00, 16.00 0+

**18 апрель "Три поросенка"** (С. Михалков). 12.00, 14.00 0+

**"Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 16.00 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**13 апрель Беҙ - Стәрлетамаҡта! "Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 16+

**14 апрель Беҙ - Ҡырмыҫҡалыла! "Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 16+

**15 апрель Беҙ - Бала-Сытырманда! "Голубцы"** (А. Финк), комедия. 16+

**16 апрель "Әллә яңылыш, әллә яҙмыш"** (Т. Миңнуллин), трагикомедия. 16+

**17 апрель "Салтан батша хаҡында әкиәт"** (А.Пушкин). 13.00 0+

**"Көтмәгәндә булған хәл"** (Э. Йәһүҙин), музыкаль комедия. 16+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**15 апрель "Бигылый"** (С.Ильясов), булған хәл. 12+

**17 апрель "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р.Шарт), комедия. 16+

**18 апрель "Познавайка в стране Узнавайка"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

## Сибай театр-концерт берекмәһе

**15 апрель "Донъя матур, донъя шундай матур"** концерт программаһы менән Аҡъяр ауылы сәхнәһендә. 6+

**16 апрель "Ғаиләм - ҡәлғәм"** Сибай драма театры залында 27-се ижад миҙгелен ябыу концерты. 6+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Апрель (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (30) дүшәмбе | 4:53 | 6:23 | 13:30 | 18:42 | 20:12 | 21:42 |
| 13 (1) шишәмбе | 4:50 | 6:20 | 13:30 | 18:44 | 20:14 | 21:44 |
| 14 (2) шаршамбы | 4:48 | 6:18 | 13:30 | 18:46 | 20:16 | 21:46 |
| 15 (3) кесе йома | 4:45 | 6:15 | 13:30 | 18:48 | 20:18 | 21:48 |
| 16 (4) йома | 4:43 | 6:13 | 13:30 | 18:50 | 20:20 | 21:50 |
| 17 (5) шәмбе | 4:41 | 6:11 | 13:30 | 18:52 | 20:22 | 21:52 |
| 18 (6) йәкшәмбе | 4:38 | 6:08 | 13:30 | 18:53 | 20:23 | 21:53 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

# ТЫНЫСЛАНЫР ӨСӨН...



**Тормош булғас, төрлө хәлдәргә осрарға тура килә. Ҡайғырмайым, борсолмайым, янмайым-көймәйем тиһәң дә, был халәт беҙҙең үҙебеҙгә генә бәйле түгел шул. Ҡайһы берҙә үҙең дә уйламағандан көслө стресҡа дусар булып ҡуяһың. Ошондай ваҡытта нервыларҙы тынысландырырға өйрәнергә кәрәк. Һеҙгә 60 секундта үҙеңде ҡулға алырға ярҙам иткән өс ысул тәҡдим итәбеҙ.**

**Беренсеһе -** виртуаль образды күҙ алдына килтерегеҙ. Билдәле булыуынса, беҙҙе уратып алған донъя тураһында мәғлүмәттең күп өлөшөн күҙ аша алабыҙ. Ғалимдар билдәләүенсә, нервыны айырыуса аҡ төҫ һәм һыу образы тынысландыра. Бының өсөн уңайлы итеп ултырығыҙ, тын алышын көйләгеҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм һалҡын, аҡ төҫтәге, таҙа, үтә күренмәле түгел, ә нәҡ аҡ төҫлө һыуҙы күҙ алдына килтерегеҙ. Уның башығыҙҙан алып, аяҡ бармаҡтарына тиклем ағып төшкәнен тойоғоҙ. 30 секунд тирәһе кинәнес алығыҙ һәм яйлап ҡына уның соҡорға ағып төшкәнен күҙ алдына килтерегеҙ. Шул һыу менән бөтә көсөргәнеш ағып китәсәк. Тәрән итеп тын алығыҙ һәм күҙегеҙҙе асығыҙ.

**Икенсеһе -** ваннаға инегеҙ, муйынығыҙҙы ҡыҫып торған блузка йәки күлдәгегеҙҙең төймәһен, галстугығыҙҙы сисегеҙ. Ҡулығыҙҙы һыуыҡ һыу менән йыуып, муйынығыҙҙы, яурынығыҙҙы һыпырығыҙ. Аҙаҡтан тағы һалҡын һыу менән сайҡағыҙ.

**Өсөнсөһө -** тәрән итеп тын алығыҙ, тынды сығарығыҙ һәм ҡулығыҙға тығыҙ туҡыма йәки таҫтамал алып, һыуын һығырға теләгән кеүек хәрәкәт эшләгеҙ. Бөтә мускулдар эшләһен өсөн бөтә көс менән һығығыҙ. Урап бөткәс, ҡапыл ебәрегеҙ, таҫтамалды иҙәнгә бәрегеҙ һәм тәнегеҙҙең, айырыуса ҡулығыҙ һәм муйынығыҙҙың тынысланып ҡалыуын тойоғоҙ.

**Ошо ябай ғына күнегеүҙәр мөһим осрашыу һәм сығыш яһау кеүек ваҡиғалар алдынан тынысланырға ярҙам итәсәк.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# КӨЛДӨРҘӨЛӘР, УЙЛАНДЫРҘЫЛАР



**Ошо көндәрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында башҡорт моңона, башҡорт юморына һыуһаған баш ҡала тамашасылары өсөн "Ҡармаҡ" музыкаль-юмористик шоу үткәрелеүе хаҡында хәбәр иткәйнек инде. Был йырлы-көлкөлө кисә юморға ҡоролған башҡа сараларҙан мәҙәктәрҙең юғары мәҙәниле булыуы менән айырылып торҙо.**

Тамаша башланыуына ишаралап, сәхнәгә ҡармаҡ тотҡан балыҡсылар килеп сыҡты. Өс балыҡсы - Илсур Тайсин, Шәһит Хамматов һәм Иҙел Аралбаев донъя мәшәҡәттәренән арынып, тын ғына тулҡындар тауышын тыңлап, ара-тирә гәпләшеп ултырырға ниәтләгән икән. Һәм шунда уҡ был сарала ысын ир-егеттәр юморы өҫтөнлөк итәсәген аңланыҡ. Ысынлап та нәк шулай булды ла: һуңғы көндәрҙә ил-йортта барған хәл-ваҡиғаларҙың иң әһәмиәтлеләрен, мәсьәләләрҙең иң көнүҙәген һайлап ҡына тос мәрәкәләне улар. Мәҙәкселәрҙең күҙ уңынан мәҙәниәт, сәнғәт, сәйәсәт өлкәһендәге мөһим яңылыҡтар ҙа, йәмғиәттәге төрлө күренештәр ҙә ситтә ҡалманы. Әгәр шундай хәл мөмкин булып, һуңғы яңылыҡтарҙа хәбәрҙәр булмаған берәү табылһа, уға "Ҡармаҡ"ты тамаша ҡылыу ҙа етер ине.

Ә ҡайһы бер тамашасылар сәхнәлә үҙен, йә яҡындарын да танығандыр: арабыҙҙа "хайп" артынан ҡыуып, оятын онотоусылар ҙа, үҙен "уңышҡа көйләгән" осталыҡ дәрестәре үтеп, яҡындарын өгөтләүселәр ҙә юҡ түгел. Йәмғиәтебеҙҙәге бына шундай тәҙәтерҙәй күренештәрҙә күреп тотоп ала белгән тамашаның сценарий авторҙары Айбулат Сәсәнбаев һәм Рәйсә Абдуллина, афарин! Улар өр-яңы мәҙәк образдар - турист килерен көткән Бөрйән кешеһен, халыҡҡа интернет селтәрҙәре ярҙамында яҡынайырға тырышҡан депутат һәм йәш блогерҙы сәхнәгә сығарҙы. Тамашасыны "балыҡсыларҙың" үҙенә ҡатын-ҡыҙ ролен "кейеп" ҡарамауы ла арбаны, сөнки күптән уйналған был образ һөйкөмлөгөн юғалтҡан инде.

Шулай итеп, биткә ҡыҙыллыҡ килтергән билдән түбән шаяртыуҙар булмауы - "Ҡармаҡ"тың төп үҙенсәлеге һәм өҫтөнлөгө булды. Беҙ, ниһайәт, башҡорт юморының ниндәй һүҙ көләмен кескенәләгән тойҙоҡ, "Себергә барам әле" кеүек шаян "вахта-ара йыр"ҙарыбыҙҙы хәтергә төшөрҙөк. Бына шундай сәғәт ярым ваҡыт эсендә көлдөрөп тә, уйландырып та, күңелдәрҙе елкендереп тә ебәрерҙәй тамаша ойоштороуҙа Рита Өмөтбаева етәкселегендәге "КурайТВ" каналының командаһы: режиссерҙар З. Баймырҙина һәм А. Ғәлиәкәева, музыкаль яҡтан биҙәүсе У. Мөхәмәтйәров, графика Р. Зиаитдинов, оператор В. Аҫҡаров һәм "Ҡармаҡ" юмор клубы ағзалары.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Тиҙҙән, апрель айы аҙағында, "Ҡурай ТВ" каналы "Башҡорт йыры"на 10 йыл тулыу айҡанлы баш ҡала халҡына өряңы бүләк-сара әҙерләй: легендар композитор Рим Хәсәновтың иң билдәле йырҙарынан торған "Һаумы, Маэстро!" тип аталған концерт уҙғарыла. Меңдәр күңелен моңо, аһәңе менән арбаған йырҙар авторының ижад донъяһына сәйәхәткә саҡыра ойоштороусылар.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

## ӨФӨ ИЛСЕҺЕ




**"Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле республика буйлап гастролдәргә сыҡты. Тамашасыларҙы ансамблдең иң яҡшы номерҙары менән таныштыу көтә.**

Апрелдә лә "Мираҫ" ансамбле республика буйлап сәйәхәтен дауам итә һәм Белоретта, Учалыла, Аҫҡарҙа, Баймаҡта, Иҫәнғолда, Архангелдә сығыш яһай.

"Мираҫ"тың сәнғәте Рәсәйҙең бик күп ҡалаларына таныш, улар араһында - Мәскәү, Санкт-Петербург, Сочи, Түбәнге Новгород, Чебоксар, Һамар, Ҡырым ҡалалары һәм башҡалар бар. Ансамбль Рәсәй һәм сит ил гастролдәре географияһын да даими киңәйтә, ул Франция, Испания, Португалия, Италия, Бельгия, Германия, Люксембург, Болгария, Венгрия, Швейцария, Бөйөк Британия, Төркиә тамашасылары өсөн сығыш яһаған.

"Мираҫ" - Өфө илсеһе, республиканың визит карточкаһы, байрамдарҙың һәм тантаналы сараларҙың биҙәге. Ансамбль артистары араһында - халыҡ-ара, Бөтә Рәсәй һәм республика конкурстары лауреаттары, күптәре маҡтаулы исемдәргә һәм наградаларға эйә. Ансамблдең һәр программаһы үҙенсәлекле, һәр номерҙың үҙ стиле бар, башҡорт еренең матурлығын һәм байлығын сағылдырған милли колорит менән һуғарылған.

## ИЖАДИ ОСРАШЫУҘАР



**Башҡорт дәүләт университетында яңы проект башланды. Башҡорт филологияһы, шәрҡиәтте өйрәнеү һәм журналистика факультеты Мостай Кәрим исемендәге Ижади оҫтаханала аҙна һайын "Әҙәби йома" ойошторорға ҡарар итте. Бындай тәҡдим менән "Шоңҡар" әҙәби түңәрәге ағзалары сығыш яһаны.**

"Әҙәби йома"ның төп маҡсаты - әҙәбиәт, шиғри һүҙ һөйөүселәргә, үҙенең ижады менән уртаҡлашырға, тәжрибәле әҙәбиәтселәрҙең фекерен ишетергә теләгәндәр өсөн майҙансыҡ булдырыу. Был яҙыусыларыбыҙға ла студенттар менән яҡынданыраҡ танышырға, яңы исемдәр асырға ярҙам итер тип ышанабыҙ", - тип һөйләне Башҡорт дәүләт университетының "Шоңҡар" әҙәби түңәрәге етәксеһе, журналистика кафедраһының өлкән уҡытыусыһы Алмас Шаммасов.

"Әҙәби йома"ның тәүге ҡунаҡтары билдәле шағирҙар Салауат Әбүзәр һәм Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай булды. Улар яҙыусылар тормошонан ҡыҙыҡлы хәлдәр һөйләне, студенттарҙың һәм уҡытыусыларҙың һорауҙарына яуап бирҙе, үҙҙәренең хәтирәләре менән бүлеште, шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе.

Шағирҙарҙың сығышы йырҙар, ҡурай моңо, студенттар - "Шоңҡар" берекмәһе ағзаларының шиғырҙары, шаяртыуҙар, көләмәстәр менән үрелеп барҙы. "Беҙ, яҙыусылар етди, күңелһеҙ кешеләр тип уйлағайныҡ, ә улар бына ниндәй дәртле булып сыҡты", - тине студенттар.

"Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәтте өйрәнеү һәм журналистика факультеты яҙыусылар һәм шағирҙар менән осрашыуҙар аша йәштәргә әҙәбиәтте, шиғриәтте яратырға һәм аңларға ярҙам итергә тырыша. Бындай осрашыуҙар йыш ойошторолор, улар студенттарға һәм уҡытыусыларға, әҙәбиәтебеҙгә һәм филология фәненә бик кәрәк", - тип билдәләне факультет деканы Гөлфирә Абдуллина.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәкикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БӘХЕТЛЕ ЙӘШӘЙ...

### еңеүҙән һәм еңелеүҙән баш тартҡандар

Сәйәсәт - ул башҡа төрлө саралар менән һуғышты дауам итеү.

**(Во Нгуен Зиап).**

Сәйәсәттә, грамматикалағы кеүек, барыһы ла ебәргән хата ҡағиҙәгә әүерелә.

**(Андре Мальро).**

Ҡатын-ҡыҙҙар йәшен һанамай. Уның өсөн быны ахирәттәре эшләй.

**(Юзеф Булатович).**

Иҫке гәзиттәрҙе генә уҡырға кәрәк. Ун йылдан һуң уларҙа яҙылған бөтөн насар яңылыҡтар көлкө тыуҙырасаҡ.

**(Жан Ануй).**

Мин үҙемдең көйөнөүҙәремде һәр ваҡыт дошмандарыма һөйләйем, улар ғына мине иғтибар менән тыңлай белә.

**(Роберт Орбен).**

Еңеү нәфрәт тыуҙыра; еңелгән кеше хәсрәт менән көн итә. Еңеүҙәрҙән һәм еңелеүҙәрҙән баш тартып, тыныс йәшәүҙе һайлағандар ғына бәхетле ғүмер кисерә.

**(Будда).**

Әгәр ҙә өләсәй һәм олатай ейәнейәнсәрҙәре тәрбиәһенә ҡыҫылыуҙы мотлаҡ тип иҫәпләй икән, тимәк, улар үҙ балаларының тәрбиәһендә әллә ни уңышҡа өлгәшмәгән.

**(Роберт Лембке).**

Атты һыу сығанағы янына килтереп була, ләкин уны һыу эсергә мәжбүр итеп булмай.

**(Инглиз мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кеше йылдар буйына үҙен бар нәмәнән сикләп аҡса йыйған. Берҙән-бер көндө уға шундай уй килә: бер йыл буйына үҙен бер нәмәнән дә сикләмәйенсә йәшәп ҡарарға кәрәк. Тик көтмәгәндә уның алдына Үлем килеп баҫа. Кеше төрлө сәбәптәр килтереп, Үлемдән тағы ла бер ҙа йәшәргә үтенеп һорай, ялбара икән, тик ул ишетергә лә теләмәгән. "Миңә өс көн булһа ла йәшәргә мөмкинлек бир, мин һиңә байлығымдың яртыһын бирермен", - тигән кеше. Үлем уны ишетмәгән дә хатта. "Ярай, миңә бер генә көн булһа йәшәү бир, мин һиңә йылдар буйына үҙ көсөм менән йыйған бар байлығымды бирәм". Үлемде күндереп булмаған. Үлем алҡымынан алғас, кеше ҡағыҙ битенә ошо һүҙҙәрҙе генә яҙып өлгөргән: "Әгәр ҙә һинең лайыҡлы тормош өсөн аҡсаң етә икән, байлыҡ артынан ҡыуып, ваҡыт уҙғарма. Йәшә! Минең аҡсаларым ғүмерҙең хатта бер генә сәғәтен дә һатып алырға ярҙам итә алманы..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21015

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
9 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 244/04